ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 ғинуар-февраль (һыуығай-шаҡай)

2019

№4 (838)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Эргә-тирәләге таныштарығыҙҙы, туғандарығыҙҙы иҫкәртегеҙсе: 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - һәр айҙың 18-енә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе киләһе айҙан алдыра башлаясаҡтар. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә бер айға яҙылыу хаҡы - 101 һум 66 тин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙ еребеҙҙә...**

үгәй бала хәлендәбеҙ



2-3

**Мейенең...**

ике ярымшарын да эшләтеүсе фән



6

**Уҡыусыларыбыҙға беҙ кәрәкбеҙ!**



8-9

**Йыр йырлағанда...**

ихласлыҡ кәрәк



11

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөлә ниндәй атамалы урамдар күрергә теләр инегеҙ?

***Фәрит ВӘХИТОВ, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты:*** Кемгә нисектер, әммә минең өсөн был бик күңелде әрнетеп торған мәсьәлә. Шуны белгән кеүек шылтыраттығыҙ әле, бик урынлы һорау. Һүҙҙе алыҫтаныраҡ башлап ебәрәйем, булмаһа. 2002 йылдан алып байтаҡ йылдар мин Республика хәрби дан музейында ғилми хеҙмәткәр булып эшләнем. Шул саҡтарҙа беҙ Башҡортостан тарихына, уның ҡаһарман шәхестәре яҙмышына, батырлыҡтарына, һәр төрлө юбилейҙарға ҡарата конференциялар, осрашыуҙар үткәрә инек. Шунда ҡаһарман генерал Миңлеғәле Шайморатов исемен мәңгеләштереү, баш ҡалабыҙ урамдарының береһенә уның исемен биреү хаҡында йыш һүҙ күтәрелә ине. Был тәҡдимдәр юғары органдар иғтибарына еткерелә торҙо, ләкин бер ниндәй ҙә сара күрелмәне. Бәлки, чиновниктар ундай урамдың барлығына һылтана торғандарҙыр. Әйтһәң - һүҙ, тигәндәй, көлкө тойолор ине был, әгәр бик ҡыҙғаныс булмаһа... Черниковка биҫтәһенең Дм. Донской менән Ҡулса урамдары киҫелешенә яҡын бәләкәй генә иҫке бер (тыҡрыҡ тиһәң дә булалыр) урам йораты Шайморатов исемен йөрөтә ул, тик мин уны көскә таптым. Ярай әле, бәхеткә, итек кейгәнмен - йырып сыҡҡыһыҙ бысраҡ өҫтәүенә. Дөрөҫөн әйткәндә, уның данлы генерал Шайморатов исемен йөрөтөүен унда йәшәүселәр үҙҙәре лә белеп бөтөрмәй торғандыр, тигән уй ҡалды. Шул буламы шәхестәребеҙ исемен мәңгеләштереү, ихтирам билдәһе күрһәтеү? Был хаҡта мин аҙаҡ та, бөгөнгө көндә лә һөйләүҙән туҡтағаным юҡ, сөнки донъяға билдәле арҙаҡлы (һуғыштан алда М.Шайморатов Мәскәү тарафынан Ҡытайға илсе итеп ебәрелгән, шунда эшләгән һәм йәшәгән), күп яҡлы талант эйәһе генерал яҡташыбыҙ иҫтәлегенә мөнәсәбәт үҙгәрер, тип ышанам. Быйыл республикабыҙҙың юбилей йылында уның ҡаһарман улы Шайморатовтың да тыуыуына 120 йыл тула (15 август). Ошо күренекле даталар уңайынан Өфөләге яңы урамдарҙың береһенә "Генерал Шайморатов" исеме, ниһайәт, бирелер, тигән өмөттәмен.

***Земфира ХӘБИРОВА, журналист:*** Өфө ҡала советының "Өфө урамдары" конкурсын иғлан итеүе яҡшы булды әле, халыҡ саҡ ҡына булһа ла ҡыбырлай башланы. Юҡһа, Башҡортостандың баш ҡалаһы урамдарына ни өсөн башҡорт шәхестәренең, билдәле тарихи ваҡиғаларҙың атамалары ҡушылмай, теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ исемдәр барлыҡҡа килә, тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерә лә ҡуя торғайныҡ. Әлбиттә, шәхестәрҙең исемдәре яйлап ҡына ҡушыла бара ул, әммә халҡыбыҙҙың башҡа мәңгеләштерер нәмәләре лә күп бит. Бәлки, ошо мөмкинлекте файҙаланырға, әүҙемерәк булырға ғына кәрәктер.

Бөгөн, мәҫәлән, өфөләр 1919 йылда ВЦИК тарафынан Башҡортостан Совет республикаһының ваҡытлыса баш ҡалаһы тип иғлан ителгән Темәс ауылы хөрмәтенә Өфөлә ошо атамалы урам булдырыуҙы тәҡдим итә. Шулай уҡ быйыл дәүләтебеҙ генә түгел, илебеҙ тарихында оло ваҡиға көтөлә - Рәсәйҙә федерализм ҡоролошоноң беренсе нигеҙ ташын һалып, Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итергә йыйынабыҙ.

**Ошо йәһәттән граждандар Өфөлә Республика проспекты (ҡайһы бер урындарҙа Республика майҙаны бар), Башҡортостандың 100 йыллығы исемендәге урам барлыҡҡа килеүен күрергә теләй. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан Республикаһының беренсе президенты Мортаза Рәхимов исемендәге урам булдырыу инициативаһы менән сығыш яһаусылар ҙа бар.**

Әлбиттә, былдай атамаларҙың баш ҡаланың яңы төҙөлгән ҡасабаларындағы урамға йәки ҡайҙалыр бер тыҡрыҡҡа түгел, әүҙәктә булыуы мөһим. Был республикаға исем биргән, әллә күпме халыҡтарҙы һәм милләттәрҙе үҙ территорияһына һыйындырған аҫаба халыҡҡа ла рәхмәтле булыуҙың, хөрмәт күрһәтеүҙең бер сағылышы булыр ине.

Быйыл хәтер үҙе тарих биттәрен аҡтарырға мәжбүр итә һәм тағы ла бер мәшһүр шәхестең исемен мәңгеләштереү зарурлығын көн ҡаҙағына сығара. Ул да булһа, профессиональ башҡорт музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусы, йырсы, композитор, золом ҡорбаны Ғәзиз Әлмөхәмәтов. Эйе, баш ҡалалағы сәнғәт мәктәптәренең береһе уның исемен йөрөтә, әммә бөйөк шәхестең исемендәге урам булыуы ла насар түгел.

Ошо көндәрҙә республикабыҙ оло юғалтыу кисерҙе - РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, билдәле хирург Венер Сәхәүетдинов арабыҙҙан китте. Уның һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге эшмәкәрлеге, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты булған осорҙа һаулыҡ һаҡлау буйынса ҡабул ителгән закондар һәм башҡа бик күп хеҙмәте бөгөн дә, йылдар үткәс тә ҙур ҡиммәткә эйә буласаҡ. Әлбиттә, Венер Ғәзиз улының да исеме мәңгеләштерелергә тейеш.

Билдәле шәхестәребеҙ, милли атамаларыбыҙ хаҡында үҙебеҙ хәстәрлек күрмәһәк, уларҙы күтәрмәһәк, башҡалар беҙҙән яҡшыраҡ булдырасаҡ. Ул ваҡытта инде юҡ юҡ та социаль селтәрҙәрҙә күренеп ҡалған мәғәнәһеҙ атамалар һәм уларҙың мәғәнәһеҙ тәржемәләре (Сливовая - Ағыулы һ.б.) бирелгән урамдарҙа йәшәргә тура киләсәк. Әүҙемерәк булайыҡ, мөмкинлекте файҙаланайыҡ, тип кенә әйтмәксе инем.

(Дауамы 3-сө биттә).




12+

✔ *2002 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбе мәғлүмәттәре буйынса, 44 процент башҡорт йәшәгән районда ни өсөн гәзит рус һәм татар телдәрендә сыға, ә башҡортсаһы ҡайҙа, тигән һорау тыуа.*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Элгәрерәк заманаларҙа халыҡ мәнфәғәттәренә ҡаршы килгән берәй үҙгәреш йә сара хаҡында халыҡҡа король йә батша шуттары аша хәбәр һалғандар. Был ҡапылда халыҡты шаңҡытмау, хәбәрҙе "йомшартып" биреү өсөн эшләнгән. Унан шут-диуана һүҙенә әллә ни ышанып та бармағандар, ләкин кешеләр психологик яҡтан үҙенән-үҙе үҙгәрешкә әҙерләнә башлау ғәҙәте бар бит.**

# БАЙ КЕҪӘҺЕН КЕМ ҠАПШАР?

Бындай диуаналар хәҙер юҡ, тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Шуларҙың береһе - "прихватизация атаһы" - бөгөн дә "йылы ҡуйында" туйып һикергеләп ала. Яңыраҡ ҡына ҡүҙ уңынан бер аҙ юғалып торған Чубайс Гайдар форумы тип аталған һәм маҡсаты ябай халыҡҡа бигүк аңлашылып етмәгән йыйылыштарында ҡалҡып сыҡты һәм тағы халыҡ кеҫәләрен ҡапшай башланы. "Рәсәйҙә бөгөн электр энергияһына хаҡ уртаса донъя кимәленә ҡарағанда ике тапҡырға арзаныраҡ. Рәсәй донъяла энергияны иң ныҡ сарыф итеүсе ил. Ләкин беҙҙә иҡтисади үҫеш күҙәтелмәгәс, 2014 йылдан алып энергия ресурсын ҡулланыу һөҙөмтәлелегендә лә үҫеш юҡ",- тип белдерҙе ул. Ләкин уның оппоненты Рәсәй Эске эштәр министрлығы вәкиле Мария Захарова әйтмешләй, "тиҫтәләрсә йылдар буйы хөкүмәт ағзаһы, ватан иҡтисады һәм сәнәғәте йүнәлешендә ҙур вазифалар биләгән кеше" булараҡ, ил иҡтисади үҫтереү юлдары хаҡында фекер уртаҡлашыу урынына, мәсьәләне еңел генә хәл итеү юлын күрһәтә: электр энергияһына хаҡтарҙы күтәрергә кәрәк, ти ул һәм шунда уҡ үҙ өҫтөнә ябырыласаҡ халыҡ нәфрәтен самалағандай, дәртен баҫа биреп: "Рәсәйҙең ярлы ил булыуын күҙҙә тотоп, быны ҡапыл эшләргә ярамай", - тигән ташлама яһай. Бер ямандың бер яҡшыһы, ти халыҡ. Чубайс та ошо тәҡдименең яртыһында... ярлы халыҡҡа йөҙө менән әйләнеп: "Байҙар күберәк түләһен, ә ярлылар - элеккесә, - тип һалдырмаһынмы. - Электр энергияһы ҡулланыуҙарҙың социаль нормаһы буйынса программа тап шуны күҙҙә тота ла инде".

Бынағайыш, ниндәйҙер дә дөрөҫ һүҙҙәрҙе Чубайс ауыҙынан ишетеү уғата шикләндерә башланы. Аҙаҡ та бит туктай алманы, "Рәсәй - 1" телеканалына биргән интервьюһында: "Байҙар күберәк түләһен, ярлылар күберәк түләмәһен", - тип тағы бер ҡабатланы һәм һүҙҙәрен шулай тип нигеҙләп тә ҡуйҙы: "Мин һәр киловатт-сәғәт өсөн хаҡты Магнитогорскиҙа йәшәүсе пенсионер түләгән күләмдә үк түләүемде ғәҙел тип иҫәпләмәйем". Бына һиңә - мә! Ни ягы әйләндә быныҢ? Бәлки, бер теле асылғас, артабан һалымды ла арттырып түләйәсәкмен, тип таң ҡалдырмаҫмы беҙҙе? Ярай ҙа юғары чиновниктың был белдереүе ил етәкселегенең байҙар кеҫәһен дә ҡапшай башлауына тәүге сигнал булһа. Әллә сираттағы йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултыртырға самалаумы? Бәлки, ҙур чиновниктың халыҡ алдындағы гонаһтарынан арынырға теләү гәләмәте генәлер? Ни тиһәң дә үткән быуаттың 90-сы йылдарында РАО"ЕЭС" башлығы булараҡ, Рәсәй энергетика системаһын юҡҡа сығарып, электр станцияларын шәхси инвесторҙарға биреп бөтөүен халыҡ онотмаған әле.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ҮҘ ЕРЕБЕҘҘӘ...

## үгәй бала хәлендәбеҙ

**Беҙҙең Ҡариҙел районы Болмоҙо ауылының бер яғында - башҡорттар, икенсе осонда урыҫтар йәшәне. Ике халыҡ вәкилдәре үҙ-ара шул тиклем дуҫ көн итте. Күршеләребеҙ башҡортса бик һәйбәт һөйләште, ҡай ваҡыт кемдең ниндәй милләт вәкиле икәнен дә белеп булмай, йөҙөнән йәки исемдәренән генә быны айырып була ине.**



Ололар, ауылы берҙәң - ҡәүеме бер, тигән борондан килгән ҡанунды һәр саҡ иҫкә төшөрөп кенә торорҙар ине. Ике туған ағайым, инде 20 йылдан ашыу Германияла йәшәнә лә (рус телен дә, немец телен дә камил белеүенә ҡарамаҫтан), телефондан һөйләшкәндә урыҫсалап ебәрһән: "Тырманы таныmайһыңмы әллә", - тип киҫәтеп ҡуя. Элек берәү әрме сафтарында оҙаҡ ҡына йөрөп ҡайтҡас, әсәһе менән дә руссалап ҡына һөйләшеп йөрөй икән. Тырмаға баҫып, тырма башына һуҡҡас: "Быны шул тырманы аяҡ аҫтына бәреп йөрөмәһәләр ни була инде", - тип, үҙебеҙсә һөйләшә башламаһынмы был! Беҙҙең яҡтарҙа ауылдаштар менән икенсе телдә һөйләшә башлаһаң: "Тырманы таныmайһыңмы әллә", - тип тиҙ генә асылыңа ҡайтара һалалар.

Хәтерҙә, һис кенә лә оноторлоҡ түгел: һикһәненсе йылдар инеме икән... Ҡариҙелгә сығырға Әхмәҙийә аҡбабай менән паром көтәбеҙ. Бер урыҫ знакум: "О-о, здравствуй, Ахмадия!" - тип ҡул һуҙып, күрешергә килә. Аҡбабай: "Бирермен мин һиңә здравстуйыңды, кит бынан!" - ти. Ошонан һуң тегә урыҫ знакумы саф башҡорт телендә: "Һаумы, Әхмәҙиә дуҫ!" - тип күрешкәс, "Бына быныһы беҙҙәнсә!" - тип, йән дуҫтарса әңгәмәләшеп киттеләр. Мине был күренеш аптыратты, бик сәйер тойолдо. Һуңынан аҡбабайҙан иплөп кенә ниңә улай ҡыланыуын һорағас: "Үҙ еремдә минең менән минең телдә һөйләшһендәр, беҙҙең телдә беләләр бит", - тип ҡырт киҫте. Аҙаҡтан тегә урыҫ знакум минең менән дә беҙҙең телдә иҫәнләшеп йөрөй башланы.

Тағы ла бер күңелгә һеңеп ҡалған хәл. Халыҡтың аҡса тигән нәмәне онотоп барған ваҡыттар. Класымда атай-әсәйҙәр йыйылышы. Көн тәртибенә балаларға гәзит-журналдар яҙҙырыу мәсьәләһе лә индерелгән. Һүҙгә әүәҫ Даян ағай:

- Мин Иктауға яҙылмайм, - тип үҙенең фекерен белдерҙе. Уның нимә тураһында һүҙ йөрөткәнен ҡапыл ғына аңламай:

- Ундай гәзит юҡ та инде, булмаған гәзиткә яҙылып та булмай инде, Даян ағай, - тип һүҙҙе көлкөгә бороп ебәрмәксемен. Ә ул едти ҡиәфәттә, асыуланыбыраҡ:

- Булмай ни, бар ул... Мин районканы әйтәм. Урысса районка Ҡарағайсатты - "Черный лог"ка әйләндереп бөтөрҙә, инде былары Ыйыҡтауыбыҙҙы - "Иктау"ға әйләндереп маташа. Юҡ, кәрәкмәй, яҙылмайым, - тип үҙ һүҙен әйтте.

Йыйылыштан һуң:

- Иллә, Даян ағай, телеңдең осона сығырлыҡ түгел дә инде һинең, аҡса юҡ тип кенә әйтһәң, ни була инде, юҡһа, әллә ҡайҙарға инеп киттең, - тип һөйләшеүҙе дауам итергә тырышып, һүҙ ҡуштым.

- Эй энем, эш аҡсаламы ни... Дөрөҫө шул бит инде. Ыйыҡтау - аңлашыла, ә "ик" нимәне аңлата һуң? Әйткәндәй, ул гәзиттәрҙең бөҫе бөттө: инструкция, бойороҡ, беҙ беренсе, беҙ алда - шунан башҡа нимә яҙалар инде унда? Халыҡ күрмәй тиһеңме? Үҙең уйла нимә булырын алда, - тип һамаҡлап та ебәрҙе.

Уның әйткән һүҙҙәре мине оҙаҡ уйландырҙы һәм... 2002 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбе мәғлүмәттәре буйынса, 28960 кешенең 44 проценты - башҡорт, 28,2 проценты - татар, 20-һе - урыҫ, 6 проценты - мари һәм башҡа халыҡ вәкилдәре йәшәгән районда ни өсөн гәзит рус һәм татар телдәрендә сыға, ә башҡортсаһы ҡайҙа, тигән һорау тыуҙырып, алдағыһынан алда арттағыһына, йәки үткәндәргә күҙ ташларға мәжбүр итте.

1934 йылда Ҡариҙел районына лингвистик экспедиция килә, уның алдына ҡуйылыуҙың, эш ҡағыҙҙарының, сәнғәттең рәсми телен билдәләү бурысы ҡуйылған була. Һәм ошо экспедиция көтөлмәгән һығымта яһай: "Шулай итеп, экспедиция тикшергән һөйләш формаль яҡтан һис шикһеҙ башҡорт теле һөйләше булып тора, шуға ҡарамаҫтан, татар әҙәби теле башҡорт әҙәби теленә ҡарағанда ерле халыҡҡа яҡыныраҡ (уҡыу әсбаптары һәм әҙәбиәт күҙҙә тотола). ...Экспедиция барлыҡ "эйе" һәм "юҡ"тарҙы тикшереп, хеҙмәтләндереү сифатында (әҙәби тел, мәктәптә белем биреү, матбуғат, эш яҙыуҙары һ.б.) татар телен рәсми тел тип танырға кәрәк, тигән ҡарарға килде. Шулай булғас, башҡорт телендә сыҡҡан "Алға" район гәзите баҫмаһын да маҡсатҡа йүнәлешле түгел тип табырға һәм татар теленә күсерергә кәрәк".

Был тәҡдим Ҡара-Иҙел ВКП(б) райкомы бюроһына тикшереүгә ҡуйыла һәм унда тулыһынса ҡабул итә. Бына шулай итеп бер һелтәүҙә "башҡорт телендә" һөйләшеүсе халыҡты административ юл менән татар телендә белем алырға, яҙырға, һөйләшергә, уҡырға мәжбүр итәләр. Һәм, Башҡортостанда йәшәһәк тә, 1985 йылға тиклем район мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытылманы. "Татарстан - туған илем, Казан минең баш ҡалам" тип үҫте йәш быуын. Был тарихи хатаны төҙәтеү тора-бара минең бурыстарымдың мөһименә әйләнде.

Ул ваҡытта гәзитте ойоштороусылар район советы, район хакимиәте һәм "Ҡариҙел" гәзите редакцияһы ине. Дәүләт органдары

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сентябрҙә төбәк етәксеһен һайлауға "Берҙәм Рәсәй" партияһынан бара. "Минең "Берҙәм Рәсәй"ҙән алыҫтараҡ торорға тәҡдим иткән коллегаларым бар. Ләкин мин икенсе төрлө уйлайым. Мин ошо партия ағзаһымын һәм шуның менән ғорурланам. Хәйер, ошо партияның үҙенсәлекле ағзаһымын: мине ике тапҡыр унан сығарҙылар һәм ике тапҡыр тергеҙҙеләр. Ләкин нисек инде үҙемдең партиямды яратмаҫҡа тейешмен?" - ти Радий Фәрит улы.

✔ Башҡортостанда республиканың дәүләт һәм унда йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы гранттарын алыуға ғаризалар ҡабул ителә. Ғаризалар 2019 йылдың 31 ғинуарынаса иртәнге сәғәт 10-дан 5-кә тиклем Мәҙәниәт министрлығының этномәҙәни үҫеш һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлегендә ҡабул ителә. Адресы: Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 18, 12-се бүлмә. Бәйләнеш телефоны - 8 (347) 280-87-95, 8 (347) 280-87-85. Шылтыратыуҙар иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға ҡәҙәр ҡабул ителә.

✔ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары киләһе пленар ултырышта диспансерлаштырыу һәм туберкулезға бәйле күҙәтеү аҫтында булған кешеләр өсөн табип тәғәйенләгән дауалауҙы үтеү буйынса бурыстарҙы билдәләгән "Республикала туберкулездың таралыуын иҫкәртеү тураһында" законға үҙгәрештәр индерергә ниәтләй. Закон проекты "туберкулез булыу ихтималлығына эйә кеше", "туберкулез сығанағы янында булған кеше" тигән төшөнсәләр индерә һәм граждандарҙың ошондай категориялары өсөн мотлаҡ медицина тикшереүе ҡарала.

✔ Башҡортостандан сауҙа селтәрҙәре вәкилдәре делегацияһы ошо көндәрҙә Делиҙа IndusFood Бөтә донъя аҙыҡ-түлек күргәҙмәһендә ҡатнашты. Күргәҙмә Һиндостандың иң яҡшы 500 аҙыҡ-түлек етештереүсеһен һәм 800-гә яҡын халыҡ-ара байерҙарҙы йыйҙы. Башҡортостан вәкилдәре Һиндостандан төрлө аҙыҡ-түлек, емеш-еләк, йәшелсә, тәмләткестәр, сәй, балалар аҙығы етештереүселәр менән тура бәйләнештәрҙе яйға һалды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары ҡулланылды.**

бит улар. Дәүләт органдарының ижтимағи-сәйәси баҫмаһы булараҡ, ул дәүләт телендә сығырға тейеш. Республикабыҙҙа ике тел генә дәүләт теле тип иғлан ителгән: башҡорт һәм рус телдәре. Ошо һорау менән гәзиттең баш мөхәрриренә мөрәжәғәт итһәм дә, аныҡ яуап ала алманым. Күренеп тора, ул быға ҡаршы, уға нисек бар, шулай ҡалдырыуы унайлыраҡ. Район хакимиәтендә лә шундайыраҡ фекерҙәләр. Мәҡәлә яҙып, халыҡҡа мөрәжәғәт итергә генә ҡалды. Әммә нисек? Баш мөхәррир үткәрмәйәсәк. Шулай ҙа баш мөхәррирҙең отпускыла булыуынан файҙаланып, район гәзитенең ике һанында "Үҙ тамырҙарыңды онотма!" тигән мәҡәләмде баҫтырып сығарыуға өлгәштем. Район етәкселәре ыжламанылар ҙа, ҡыл да ҡыбырҙатманылар. Дәртем һүрелде, мәгәр ниндәйҙер өмөттән төңөлмәнем.

"Ниәт иткән мораҙына еткән", тигәндәй, ниндәйҙер бер йыйылышта (хәтерҙә юҡ) яҙыусы Мөнир Ҡунафинға тап булдым. Борсоған һорауҙарым менән уртаҡлашҡас, ул:

- Мәҡәләңде бир, мин уны кәрәк урынға тапшырырмын, - тип, мәҡәләмде Өфөгә алып китте. Рәхмәт яуғыры, күп тә үтмәне, үҙебеҙҙең гәзиттә ошондай иғлан баҫылып сыҡты: "Район Советы президиумының сираттағы ултырышында "Кариҙел" район гәзитенең башҡортса ҡушымтаһын сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде..."

Шулай итеп, районда айына ике тапҡыр булһа ла, ҡушымта рәүешендә, башҡорт телендә "Хазина" гәзите сыға башланы. Әммә был минең ҡәнәғәтләндермәне. Нисек инде, дәүләт теле статусындағы башҡорт телле гәзит, рус телендә сыҡҡан "Караидель" (ярай, быныһы дәүләт теле тигән статуслы) һәм уның татарсаға дубляжы булған "Караидел" гәзиттәренә ҡушымта ғына булып сыға?

Барыбер ғүмере ҡыҫҡа булды гәзитебеҙҙең. 2016 йылда уны ябып, Аҫҡында алты районға бер "Йәнтөйәк" гәзите сығара башланылар. Ә татар телендә сыҡҡан дубляж, айышын үҙгәртмәһә лә, айырым "Караидел хәбәрләре" гәзите булып ҡалды. Ҡайҙа йәшәйбеҙ һуң беҙ, йәмәғәт, тип аптырау дауам итә...

Компьютер заманында гәзит тә гәзит тип башты ҡатырма әле, тиер кемдер. Район гәзите - район тарихы ла бит ул. Күпмелер ваҡыт үткәс, тарихсылар ошо материалдар менән эш итәсәк һәм, бына - ташҡа баҫылған рәсми дәлил, тийәсәк. Ә беҙҙә дәүләттең ташҡа баҫылған һәр ҡағыҙына һуҡыр рәүештә ышаныу бар. Етмәһә, урындағы топонимик атамаларҙың төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә булыуы хәүефкә һала. Был мәсьәлә мине һәм милләттәштәремде генә түгел, хатта тәбиғәтебеҙҙе лә хәүефләндерә, буғай. 2010 йылда республикабыҙҙың терминология комиссияһы мин һыуын һыулап үҫкән йылғамдың исемен рәсми документтарҙа Өфө-иҙел тип йөрөтөргә тигән ҡарар сығарҙы. Күрһәгеҙ икән ул йылды Ҡариҙелемде! Ҡышын йылғала һыу ныҡ төштө, урыны-урыны менән боҙ төбөнә йәбешеп туңды, яҙын йылға ташманы, ярҙарынан сыҡманы. Йәй ҡоро килде, йылғам тамам һайығып, кипте. Хатта йылға аша һалынған понтон күпер ике ярға эленеп ҡалғас, уны ваҡытынан алда алырға мәжбүр булдылар. Уны йыуатырға тырышып:

*Һин, Ҡариҙел!*
*Һинә ғорур Ҡариҙелем*
*Кемдәр һөйөп ҡараманы.*
*Бөгөн килеп бер түрәгә*
*Исемең дә ярамаңы.*
*Үҙгәртеләр атамаңды,*
*Өфө-иҙел булып киттең.*
*Әллә инде шуға быйыл*
*Ныҡ һайыҡтың,*
*тамам киптең.*
*Исем-атың яратмаһа,*
*Сабый ҙа бит үрһәләнә.*
*Хәлкәйеңде аңлайым да*
*Аңламайҙар "үрҙә" ана.*
*Үрһәләнмә, яҙылһа ла,*
*Өфө тиеп паспортыңда,*
*Ата-бабам атағанса*
*Һин "Кариҙел" үҙ йортоңда,* - тип шиғыр ҙа яҙып ҡуйғанмын.

Халыҡ ижадында мин Өфө-иҙел тигән бер генә лә легенда йә риүәйәт осратҡаным булманы, ә миңә комиссия ағзалары, урыҫ ғалимы Рычков шулай тип яҙған бит, тигән дәлил килтерә. Башҡорт халыҡ ижадында Ҡариҙел тураһында әллә күпме мәғлүмәт табырға була. Ысынында, ғәрәп хәрефтәре менән боронғолар яҙыуында ул Ҡариҙел тип түгел, ә Карыил йылғаһы тип яҙыла.

Хәҙер туристарҙың етешмәгән ере юҡ - урындағы халыҡтан һорап-нитеп тормай, интернетта үҙҙәренсә атама биреп, тарата ла ебәрәләр, шулар картаға ла инеп китә. Мәҫәлән, тыуған яғымда ғәжәйеп үҙенсәлекле сусаҡ башлы Ҡалатау бар. Урыҫтар "щучковая гора" тип йөрөтәләр, ә беҙҙекеләр инде урыҫсанан тәржемә итеп, "суҫҡа тау"ға әйләндергәндәр. Ә был тау башҡорттарҙың изге урындарының береһе. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында уҡ Рәсәй кимәлендә дәүләт тарафынан һаҡланырға тейешле археологик ҡомартҡы тип тә иғлан ителгән булған. Әммә 80-се йылдарҙа унда таш сығарыу карьеры асалар, һәм сусаҡ башлы тау киҫек башлы тауға әйләнә. Район халҡы ла тауҙың ысын исемен онотҡан тиерлек. Ауылдарҙың, тау-йылғаларҙың тарихи атамалары ла русса исемдәр менән алышына, гәзиттә татарса Иктау һымаҡ атамалар урын ала. Быға тиклем Башҡортостанда башҡорттарҙың йәшәгәнен һәм уларҙың әле лә йәшәүен онотторорға тырышыу инде был. Ни өсөн оҙаҡ йылдар буйына телебеҙҙе юҡ итергә, онотторорға тырышыуҙары - ана шуныһы башҡа һыймай. Мин быны (шул иҫәптән властарҙың да был ҡылығын) геноцидтың бер төрө тип атар инем.

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының 1983 йылғы Бөтә донъя конференцияһында "төп халыҡтың ере, тәбиғи байлығы, үҙ илендәге законлы хоҡуҡтары тартып алынырға, теле инҡар ителергә тейеш түгел", тип билдәләнгән. Тимәк, һәр милләт вәкиле үҙ ерендә ереңең хоҡуҡлы хужаһы. Был хоҡуҡ халыҡ-ара закондар менән нығытылған. Ситтән килгәндәр ошо дәүләттең закондарына һис һүҙһеҙ буйһонорға, уларҙы үҙ ерендә ҡабул иткән төп милләт кешеләрен хөрмәт итергә бурыслы.

Шул саҡта ғына беҙҙең тарихыбыҙ киләсәк быуындарға дөрөҫ барып етәсәк.

**Фидаиль САФИН, шағир.**
**Ҡариҙел районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Өфөлә ниндәй атамалы урамдар күрергә теләр инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Йомадил ЙОМАҒУЖИН, Белорет ҡалаһы, Межгорье ҡасабаһы:*** Ҡалабыҙҙың яңы урамдарына исем биреүгә бик яуаплы ҡарарға кәрәк, тип уйлайым, сөнки ул документтарҙа, тарихта ҡаласаҡ, шуға күрә уларҙа беренсе сиратта Башҡортостаныбыҙ тарихы сағылыш табырға тейеш. Элек ҡала урамдарына исем биреү халыҡ араһына бик сығарылып, тикшерелеп, тәҡдимдәр ҡабул ителеп барманы, күрәһең, ул хужалар кабинеттарында бер нисә кеше тарафынан ҡарар ҡылынғандыр, тип уйлайым, сөнки исем уйлау хаҡында бер ниндәй иғлан-фәлән хәтерҙә юҡ. Ә бына былтыр Өфө ҡала Советы тарафынан баш ҡалабыҙ урамдарына исемдәр тәҡдим итеү тураһында конкурс иғлан ителгәс, унда бик шатланып ҡатнаштым һәм Өфө урамдарының береһенә "Төньяҡ амурҙары" исеме бирергә тәҡдим итеп, еңеүселәрҙең береһе булдым. Башҡортостаныбыҙ тарихын онотторға хаҡыбыҙ юҡ. Тап ана шул тарихыбыҙ хаҡында йөйылмаҫ хәтеребеҙҙән, туған телебеҙҙән, мәҙәниәтебеҙҙән, тыуған еребеҙҙән башлана ла бит ул Ватан төшөнсәһе. 2017 йылғы "Өфө урамдары" конкурсында еңеүсе тип табылған тағы биш тәҡдим араһында "Әсә скверы", "Шиғриәт скверы", "Йырсы фонтандар" майҙансығы" тигән исемдәр ҙә бар ине. Улары, исмаһам, ҡолаҡҡа ятышлы әле ул. Баш ҡалабыҙҙа бигерәк мәғәнәһеҙ атамалы урамдар ҙа етерлек бит, юғиһә.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** "Өфө урамдары" конкурсы быйыл да иғлан ителде. Кемдәр әле ул хаҡта ишетмәгән, "Киске Өфө" гәзитенән был хаҡта уҡығас, конкурста ҡатнаша ала әле. "Исем креатив, үҙенсәлекле булырға, еңел иҫтә ҡалырлыҡ, рус һәм башҡорт телдәре талаптарына яуап бирергә, шулай уҡ ике һүҙҙән дә артыҡ булырға тейеш түгел", - тип әйтелә конкурс шарттарында. Конкурс 9 ғинуарҙа башланғайны, ошо йылдың 7 мартына тиклем барасаҡ, ҡатнашырға теләгә булғандар был хаҡта Өфө ҡала Советына (450098 Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 120) хәбәр итеп, 10-дан артыҡ булмаған исемдәр теҙмәһе тәҡдим итә ала. Форсат булғанда, үҙ иркеңде белдереп ҡалыу фарыҙ, сөнки аҙаҡ теге йәки был урам атамаһына ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөрлөк булмаһын. Юғиһә, аҙмы ни беҙҙә ана шундай туҙға яҙмаған урам исемдәре!

Әмәлгә ҡалғандай, яңыраҡ ҡына Өфө урамдары исемлеген ҡарап ултырғайным. Ысынлап та, ниндәйҙәре генә юҡ уларҙың! Билдәле шәхестәр фамилияларына ҡағылып тормайым, ләкин уларҙың да Өфөгә бер ниндәй ҡағылышы булмағандары күп. Ә бына Кронштадт исемле урам һуң баш ҡалабыҙҙа - дүртәү! Кронштадт урамы, 1-се Кронштадт урамы, 2-се Кронштадт урамы, 3-сө Кронштадт урамы. Еттеме? Юҡ әле, тағы ла 1-се Кронштадт тыҡрығы, 2-се Кронштадт тыҡрығы, 3-сө Кронштадт тыҡрыҡтары ла бар. Былардан тыш, Ун һигеҙенсе партсъезд, Ҙур электрификация, Аҫҡы делегат урамдары халҡы ла эстәре лә бошмай ошондай исемле урамдарҙа йәшәп ята.

Бер заман Өфө ҡала Советында, урамдарға бынан ары айырым шәхестәр исемдәрен бирмәҫкә, тигәнерәк тә тәҡдимдәр яңғырап алғайны, уның менән дә килешеүе ҡыйын, сөнки, берҙән, был тарихи шәхестәребеҙ исемдәрен мәңгеләштереүҙең бер юлы; икенсенән, әгәр фантазияға ирек ҡуйһаң, әлегесә Молочная, Звонкая, 1-я ул.Тюльпанов, 2-я ул. Тюльпанов, Вольная, Видная, Веерная, Виражная тигән атамалар "сәскә атырға" ғына тора. Әлбиттә, Солнечная, Лучистая, Весенняя тигән атамалар ҙа шул исемлектән, ләкин уларының, исмаһам, башҡортсаға тәржемәһе лә матур яңғырай. Ә бына тәүгеләренең дә башҡортса варианттары хаҡында уйлау кәрәк бит. "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон нигеҙендә урам исемдәре башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылып ҡуйылырға һәм аталып йөрөтөлөргә тейеш, шуға ла урам исеме ике телдә лә матур яңғырашлы, мәғәнәле булырға тейеш. Элекке хаталар ҡабатланмаһын ине...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәй гидрометеорология үҙәге синоптиктары фаразына ярашлы, быйыл Башҡортостанда февраль ғәҙәттәгегә ҡарағанда йылыраҡ була. Ҡыштың һуңғы айында һауа температураһы нормаһы -13,7 градус тәшкил итә. Шуға күрә һауа торошоноң йылыраҡ булыуын көтөргә кәрәк. Гидромет порталы мәғлүмәттәре буйынса, февралдә Өфөлә термометр бағанаһы -3, -16 градус күрһәтә. Айҙың тәүге көндәрендә -22 градус һыуыҡ булыуы ихтимал. 1 мартҡа табан һауа температураһы күтәрелә башлай. Ләкин, белгестәр кәңәше буйынса, шатланырға иртә әле. Ҡыш, ҡағиҙә булараҡ, шунда уҡ сигенмәй.

✓ Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай бинаһында Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға 100 йыл тулыуға арналған художестволы эштәр күргәҙмәһе асылды. "Күргәҙмәгә ҡуйылған картиналарҙың авторҙары - тыуған төйәгенән тыш, сит илдәрҙә лә киң билдәле республикабыҙ рәссамдары, - тине Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе К. Толкачев. -Уларҙы Башҡортостандың танылыу яулаған урындары менән бәйләнеш, республикала йәшәгән халыҡтарҙың холоҡ-фиғеле, төбәгебеҙ өсөн төп мотивтар һәм образдар берләштерә".

✓ 21 ғинуарҙан 4 февралгә тиклем Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы һөт ризыҡтарының сифаты һәм хәүефһеҙлеге, яраҡлылыҡ ваҡыты буйынса "ҡыҙыу элемтә" ойошторa. Һәр кем дүшәмбе-йома көндәрендә урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем 8-800-700-90-30 телефоны буйынса консультация алырға мөмкин. Тәнәфес: көндөҙгө сәғәт 12-нән 1 тула 15 минутҡа тиклем (шылтыратыу бушлай).

✓ Рәсәйҙә декларация кампанияһы башланды: граждандарға һәм эшҡыуарҙарға 2018 йылда алынған килемгә һалым (НДФЛ) түләргә кәрәк. 30 апрелгә тиклем килем тураһында мәғлүмәт биреү һәм декларация төҙөү зарур. 15 июлгә ҡәҙәр иҫәпләнгән һалымды түләү талап ителә. Декларацияны шәхси эшҡыуарҙар, адвокаттар, нотариустар; минималь ҡулланыу ваҡытынан аҙыраҡ тотонолған күсемһеҙ милкен йәки автомобилен һатҡан граждандар тапшырырға бурыслы.

**"БАШИНФОРМ"**
**материалдары ҡулланылды.**

**✓ Минең өсөн был тарихтан төп һығымта икенселә: кешеләр власҡа ышанмай, шуға ла уның менән бәйле бөтөн нәмәне негатив баһалайҙар. Һәм был беҙҙең идара итеүселәр командаһы өсөн иң мөһим иҫкәртеүҙәрҙең береһе.**



КӨНАУАЗ

**Белеүегеҙсә, уҙған йылдың ноябренән Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибайҙағы файҙаланылмаған баҡыр яткылығында мәгдән әселәнеү сәбәпле һауа зарарлы газдар менән бысранды һәм шул көндән алып ҡалала юғары әҙерлек режимы һаҡлана.**

# НИ ХӘЛДӘҺЕҢ, СИБАЙ?

Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Сибайға килеп, ундағы хәл менән яҡындан танышып, эндоген янғын эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса сараларҙы ҡыҙыулатып ебәргәйне. Йәғни йәмәғәтселек ҡуҙғатҡан мәсьәләләр - экологик һәләкәтте бөтөрөү буйынса эштәрҙе әүҙемләштереү, һауалағы зарарлы матдәләрҙе үлсәп, халыҡҡа хәбәр итеп тороу, халыҡтың һаулыҡ торошон тикшереүҙе ойоштороу кеүек эштәр Радий Фәрит улының һәм тейешле органдарҙың контроленә алынды. Әлеге ваҡытта карьерҙа әселәнеү процестарын бөтөрөү эштәре бара. Атмосфера һауаһы сифаты даими тикшерелә. Халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәтеүгә Өфөнән бөтә төр йүнәлештәге врачтар йәлеп ителде һәм улар бында 1 мартҡа тиклем эшләйәсәк.

Һуңғы хәбәрҙәрҙең береһе: Сибай карьерына һәм Яңы Сибай яткылығының ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу урынына өлөшләтә һыу тултырыла. Был эш Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы көсө менән башҡарыла.

Үткән аҙнала республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров тағы Сибайҙа булды. Был юлы ул үҙе менән Ҡырым республикаһы етәксеһе Сергей Аксеновты алып килгәйне. Радий Фәрит улы хәбәр итеүенсә, Ҡырым башлығы Сергей Аксенов Урал аръяғындағы ҡалала ҡатмарлы экологик хәл тураһында белгәс, Сибай балаларын Ҡырымға һауыҡтырырға алып барырға тәҡдим иткән. Февраль аҙағында һәм март айында Сибайҙан 500 бала Ҡырымға ял итергә барасаҡ. Сибай хакимиәтендә билдәләүҙәренсә, шифахана-курорт дауалауына тәү ситтта санитар-һаҡлау зонаһына яҡын урынлашҡан биләмәлә йәшәгән һәм медицина күрһәтмәһе буйынса шифаханала дауаланыуға мохтаж балалар ебәреләсәк.

Әйткәндәй, Радий Фәрит улы үҙенең сәхифәһендә ошо хәл менән бәйле шундай юлдар яҙған: "...Социаль селтәрҙәрҙә тағы негатив барлыҡҡа килде. Йәнәһе, Ҡырымға башлыса етәкселәрҙең һәм башҡа вазифалы ата-әсәләрҙең балалары китәсәк. Беренсенән, беҙ аныҡ критерийҙар билдәләгәнбеҙ: Ҡырымға һаулыҡ торошо күрһәткестәре буйынса кемгә кәрәк - шулар китәсәк. Әйткәндәй, улар араһында шул уҡ чиновниктарҙың балалары ла булыуы ихтимал, сөнки улар ҙа балалар.

Минең өсөн был тарихтан төп һығымта икенселә: кешеләр власҡа ышанмай, шуға ла уның менән бәйле бөтөн нәмәне негатив баһалайҙар. Һәм был беҙҙең идара итеүселәр командаһы өсөн иң мөһим иҫкәртеүҙәрҙең береһе. Башҡортостандың һәм унда йәшәүселәрҙең киләсәге чиновникты үҙ эшен намыҫлы атҡарып сығырға мәжбүр итеү бурысын үтәй алыу-алмауыбыҙға бәйле буласаҡ..." Радиф Фәрит улы шунда уҡ Сибай ҡала хакимиәте башлығы Рөсәм Авзаловты ла иҫкәртеп ҡуйған: "Быныһы - һеҙгә шәхсән ҡағыла. Был хәл - һеҙҙең кешелеклелек һәм өлгөргәнлеккә һынау. Һеҙ уны лайыҡлы үтерһегеҙ һәм минә Сибайҙа икенсе бер етәксе менән эшләргә тура килмәç, тип ышанам..."

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҘУР САРА КӨТӨЛӘ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советы президенты Филипп Боссан менән осрашты. Яҡтар 2020 йылда Башҡортостанда үтергә тейешле Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек барышын тикшерҙе, тип хәбәр иттеләр республика Башлығының матбуғат хеҙмәтендә.**

"Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының киләһе Фольклориаданы Өфөлә уҙғарырға хәл итеүе - республикабыҙ өсөн ҙур хөрмәт. Башҡортостандың ҙур, етди халыҡ-ара саралар ойоштороу тәжрибәһе бар. Был йәһәттән бөтәһе лә килеп сығырға тейеш", - тине Радий Хәбиров һәм Рәсәй Президенты Владимир Путиндың 2020 йылды Халыҡ ижады йылы тип иғлан итергә ниәтләнеүен иҫкә төшөрҙө. Филипп Боссан CIOFF-тың эшмәкәрлеге һәм 2020 йылғы Фольклориадаға әҙерлек барышы тураһында һөйләне. "Былтыр октябрҙә Өфөлә Бөтә донъя CIOFF конгресын уҙғарҙыҡ, унда яҡынса 55 ил ҡатнашты. Ләкин ул саҡта 200 генә кеше килде, ә Фольклориадаға 2 500-ләгән ҡатнашыусы көтәбеҙ, - тине CIOFF президенты. - Беҙҙең сараға йыл ярым ҡалды, һәм мин артабанғы емешле хеҙмәттәшлеккә өмөтләнәм". Журналистар менән аралашҡанда Филипп Боссан бөгөнгө Фольклориадала донъяның 70-тән ашыу иленән ҡатнашырға теләк белдереүҙәрен билдәләне.

# НИСЕК ҺАҠЛАРҒА?

**Республика Йортонда мәғлүмәт өлкәһендә граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә уҙҙы. Уны Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров үткәрҙе. Кәңәшмәлә Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт етәксеһе Александр Жаров, профилле министрлыҡ һәм ведомстволар, хоҡуҡ һаҡлау һәм күҙәтеү органдары вәкилдәре ҡатнашты.**

Республика етәксеһе 1-2 февралдә Өфөлә Мәғариф форумы ойошторолоуын хәбәр итте. Төп бурыстарҙың береһе - балаларҙы агрессив мәғлүмәт донъяһынан ҡурсалау мәсьәләһе. Уны хәл итеү өсөн тейешле тәрбиәүи һәм консультатив эш кәрәк. Башҡортостанда Бала хоҡуҡтары буйынса тулы хоҡуҡлы вәкил Милана Скоробогатова шул туралағы фекере менән уртаҡлашты: "Балаларыбыҙҙы көндән-көн күбәйгән интернет хәүефтәренән тыйыу саралары менән һаҡлау мөмкин түгел, - тине ул. - Балиғ булмағандарҙың, уларҙың ата-әсәләренең һәм балалар менән эшләгән белгестәрҙең цифрлы белемен күтәреүгә йүнәлтелгән иҫкәртеү саралары системаһын ойошторорға кәрәк. Балиғ булмағандар өсөн махсус позитив контент булдырыу зарур".

Башҡортостандың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин бөтә мәктәптәрҙә уҡыу процесына ҡағылышы булмаған негатив мәғлүмәтте үткәрмәү өсөн фильтрҙар ҡуйылғанлығы тураһында һөйләне. Александр Жаров был тәжрибәне "уникаль" тип билдәләне. 2018 йылдың ноябрендә Башҡортостанда Балаларҙың мәғлүмәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү концепцияһы раҫланды. Бер нисә социаль әһәмиәтле сара үткәрелде лә инде. 280 мендән ашыу бала интернетта хәүефһеҙлек дәресен тыңланы, 53 мендән күберәк үҫмер цифрлы белем буйынса махсус квеста ҡатнашты. Мәғарифты үҫтереү институты 2-11 класс уҡыусылары өсөн өҫтәмә дөйөм белем биреү программаһын әҙерләне. Бынан тыш, республика Мәғариф министрлығы тәҡдиме менән 2018-2019 уҡыу йылында республика уҡытыусыларының 20 проценты (ете меңгә яҡыны) интернетта балалар хәүефһеҙлеге программалары буйынса квалификация күтәреү курстарын үтергә тейеш.

# ПОДЪЕЗД ТӨҘӨК БУЛҺА...

**Быйыл Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙа подъездарҙы ремонтлау буйынса республика программаһы старт алды. Төбәктә бөтәһе төҙөкләндереүгә мохтаж 26 мең подъезд иҫәпләнә.**

Уҙған дүшәмбе Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының программаны тормошҡа ашыра башлауға мөнәсәбәте менән кәңәштеһелеген белдерҙе һәм Өфөнөң граждандар өсөн мөһим программаның башланыуына нисек әҙерләнеүен үҙе ҡарарға булды. Гоголь урамындағы 80-се биш ҡатлы йортта йәшәүселәр менән аралашыуҙан һуң, Радий Хәбиров тулыһынса ремонтлау талап ителгән подъездарҙың береһенә инде. Түшәмдәр ремонтҡа мохтаж, стеналарҙы буярға, тәҙрәләрҙе, электр сымдарын алмаштырырға кәрәк. Республика ҡала властарының иғтибарын подъездарҙы тиҙ һәм сифатлы төҙөкләндереү кәрәклегенә йүнәлтте. 2019 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында бөтәһе 1590 подъезды төҙөкләндереү, бының өсөн 430 миллион һум тотоноу күҙаллана. Өфө мэрының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов һүҙҙәренсә, Гоголь урамындағы 80-се йорт подъездарын ремонтлау 1,7 миллион һумға төшә, йәғни һәр подъезға яҡынса 215 мең һум тура килә.

# ТӨҘӨЛӘ, ЙҮНӘТЕЛӘ...

**Башҡортостан быйыл федераль адреслы инвестиция программаһына инеү өсөн дөйөм суммаһы 4,2 миллиард һумлыҡ ғариза бирҙе. Шуларҙан 994 миллион һумлыҡ ғаризалар хупланды, тип хәбәр иттеләр республика Иҡтисади үҫеш министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.**

Һүҙ, атап әйткәндә, Республика онкология диспансерының хирургия корпусына төкәтмә һалыу һәм Ағиҙел йылғаһында ярҙы нығытыу инженер ҡоролмаларын төҙөү буйынса ғаризалар тураһында бара. 2020 йылға килгәндә, федераль үҙәк менән Өфөлә спорт гимнастикаһы үҙәге, Ғ.Ҡыуатов исемендәге поликлиниканың яңы корпусын, Республика кардиология үҙәгенең хирургия корпусын, Ағиҙел йылғаһында ярҙы нығытыу инженер ҡоролмаларын федераль программаһына индереү, шулай уҡ Республика кардиология үҙәге, Сибай концерт-театр берләшмәһе, Стәрлетамаҡ Ҡала мәҙәниәт һарайы, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының әлеге биналарын төҙөкләндереү һәм Өфө дәүләт циркын капиталь ремонтлау буйынса мәсьәлә ентекле өйрәнелә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Сочиҙа 30-сы Халыҡ-ара КВН "КИВИН-19" фестивалендә булды һәм Александр Масляков менән осрашты. Осрашыу барышында быйыл Өфөлә "Поволжье" Халыҡ-ара КВН лигаһының 8/1 финалын үткәреү тураһында килешелде. Шулай уҡ Халыҡ-ара КВН союзының Беренсе лигаһын да Өфөлә үткәреү планлаштырылды. Был саралар Өфөлә һәм республикала КВН хәрәкәтен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк, тип билдәләнде.

✓ Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Татарстанда эш сәфәрендә булды һәм Ҡаҙан ҡала хакимиәте башлығы Илсур Метшин менән осрашты. Өфөләр аҙаҡтан ҡаланың йәмәғәтселек мөхитен - бульвар, балалар ҡаласыҡтары, урман парки кеүек урындарҙы ҡараны һәм һәм уларҙың төҙөклөгөн юғары баһаланы.

✓ Өфөлә өс яңы күпер төҙөү күҙаллана. Беренсе күпер - Интернациональ урамы яғына табан, ул Черниковканан ағымды М7 трассаһына тоташтырырға тейеш, икенсеһе - Димдән Нижегородкаға, өсөнсөһө -Өфө - Аэропорт трассаһы буйлап Кузнецов затоны аша Менделеев урамына. Потенциаль инвесторҙар - Ҡытайҙан. Яңы проект уларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған. Проект буйынса, күперҙәр өс йылдан сафҡа инделәр.

✓ Башҡортостанда 11 саҡрымлыҡ Иҫке Собханғол - Мораҡ юлын төҙөкләндереү дауам итә. Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында хәбәр итеүҙәренсә, ҡышҡы миҙгелдә һалҡын температура ҡамасауламаған эштәр башҡарыла. Был юл - "Бөрйән" туристик кластерын үҫтереү проектының бер өлөшө. Шулай уҡ "Шүлгәнташ" ҡурсаулығына юлды төҙөкләндереү ҡаралған.

✓ Санитар нормаларға ярашлы, ауыл мәктәптәрендә башланғыс кластарға - 23 градус, ҡала мәктәптәрендә 25 градус һаҡлығында дәрестәр булмай. Ауыл ерендә 5-9 класс уҡыусыларына - һауа температураһы 25 градустан түбән булһа, ә ҡалала 27 градус һыуыҡта уҡырға бармаҫҡа мөмкин. Ауыл мәктәптәренең өлкән класс уҡыусыларына - 30 градус, ә ҡаланыҡыларға 32 градус һыуыҡта мәктәпкә бармаҫҡа була.

**"БАШИНФОРМ" материалдары ҡулланылды.**

✓ *1 ғинуарға халыҡтың торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысы 2 миллиард 376 миллион һум.Ирекһеҙҙән, шундай һорау тыуа: халыҡтың шул сама бурысы бар икән, ни өсөн хөкүмәт уның елкәһенә тағы ла түләүҙәр өҫтәй?*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Яңы йыл байрамдарынан һуң әҙерәк баш-күҙ алғас, Башҡортостанға Ҡырым Республикаһы башлығы Сергей Аксенов килһә, Өфө Симферополь ҡалаһы хакимиәте башлығы Наталья Маленко етәкселегендәге делегацияны ҡабул итте. Улар баш ҡала объекттары, муниципаль предприятиеларҙың эше менән танышты. Визит һөҙөмтәләре буйынса һуңынан Өфө ҡалаһы менән Симферополь ҡалаһы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Артабан инде беҙҙәге ҡала хужалығындағы эшмәкәрлек менән ныҡлап танышыу өсөн ҡырымдарҙың эшсе төркөмө килеүе көтөлә. Баш ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмә ошо мәсьәләнән башланды ла инде. Кәңәшмәне алып барыусы ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов ике арала мәғлүмәт менән алмашыуҙы ойошторорға ла ҡушты.**

# ҠАР МӘШӘҠӘТТӘРЕ ҺӘМ...

Әсе телдәр: "Ялалов Мәскәүгә киткәйне, ҡар яумай", тип көлә ине, көлкө көлә етә, тигәндәре шулдыр, күрәһең, һуңғы көндәрҙә буранлап тороп ҡар яуыуы тағы ла ҡала эсендәге транспорт, йәйәүлеләр хәрәкәтен ҡатмарлаштырҙы. "Коммуналь хеҙмәттәр көсәйтелгән эш режимына күсерелде. Район хакимиәттәре башлыҡтарының һәм коммуналь хужалыҡ идаралыҡтары етәкселәренең урындарға сығып, урамдарҙың ҡарҙан таҙартыу сифатын билдәләү өсөн территорияларҙан йәйәүләп үтеүҙәрен, ихаталарҙа, йәйәүлеләр йөрөгән юлдарҙа, туҡталыштарҙа халыҡҡа уңайлымы икәнен баһалауын һорайым", - тине Салауат Сәхи улы. Әлбиттә, баш ҡала урамдарын ҡарҙан таҙартыуҙа 300-ҙән ашыу махсус техника тәүлек әйләнәһенә эшләй. 140-тан ашыу кеше тротуарҙарҙы, туҡталыштарҙы таҙарта. Бынан тыш, йорт яны территорияларына 130 берәмек техника һәм меңдән ашыу урам һепереүсе йәлеп ителгән. Ҡаланың ҙур транспорт магистралдәре, бигерәк тә күперҙәр, үткәүелдәр юлдарын боҙлауыҡҡа ҡаршы материалдар менән эшкәртеүгә иғтибар бүленә. Шуға ҡарамаҫтан, өфөләр ихаталар эсе, йәйәүлеләр йөрөгән тротуарҙар таҙартылмауына зарлана. Әлбиттә, транспорт коллапсы килеп тыумаһын өсөн коммуналь хужалыҡтар тәү сиратта төп юлдарҙы таҙарта, әммә туҡталыштарға килеп еткәнгә тиклем йәйәүлеләргә күпме араны бата-сума, ҡар йәки бутҡаға әйләнгән массаны кисеп үтергә тура килә.

Эйе, ҡала хакимиәте һауа торошоноң тағы ла насарланыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, техниканы һәм хеҙмәткәрҙәрҙе даими әҙерлек һыҙығында тота. Шулай уҡ Салауат Сәхи улы фуралар, ҙур йөк машиналары булған структураларға һауа торошо боҙолғанда ҡалаға инеүҙе тыйыусы регламент буйынса мөрәжәғәт әҙерләргә ҡушты. Бындай ваҡытта ҡалаға йөк машиналары төнөн генә инә аласаҡ. "Был даими эшләүсе документ булырға тейеш. Әлегә башҡа варианттар күрмәйем. Юҡһа, ҡар яуғас ҡына ҡыбырлай башлайбыҙ, һөҙөмтәлә урамдарҙа тығындар барлыҡҡа килә, уңайһыҙлыҡ тыуа", - тип белдерҙе ул.

Оператив кәңәшмәлә көн тәртибенә сығарылған башҡа мәсьәләләр менән бер рәттән, "Өфө ҡалаһы ҡала округының берҙәм иҫәп-касса үҙәге" (ЕРКЦ) муниципаль унитар предприятиеһының эшмәкәрлегенә лә йомғаҡ яһалды. Был тема буйынса предприятиеның генераль директоры Айгөл Винникова сығыш яһаны. Ойошманың төп эшмәкәрлеге - иҫәп-хисаптың асыҡлығы һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүҙең финанс ағымын бүлеү. Былтыр Өфөлә 14 миллиард һумлыҡ торлаҡ-коммуналь хеҙмәте күрһәтелгән, шул сумманың 13 миллиард 986 миллион һумы түләнгән. Түләүҙәрҙе йыйыу 2017 йыл менән сағыштырғанда 0,4 процентҡа артҡан. Күпселек идара итеү компанияларында торлаҡ-коммуналь хеҙмәт хаҡтары күтәрелгән. Быға йыйымдарҙы арттырыу маҡсатында алып барылған саралар: акциялар, судҡа тиклемге һәм суд эштәре, түләмәүселәрҙе торлаҡтан сығарыу - булышлыҡ иткән. Әйткәндәй, был предприятиеға бурыстары булған граждандарҙы йәшәгән урындарынан күсереү маҡсатында торлаҡ биналары бирелгән. Былтыр 29 судҡа 29 ғариза бирелһә, уларҙың 14-е буйынса суд граждандарҙы күсереүҙән баш тартҡан, сөнки улар тулыһынса йә өлөшләтә бурысын түләгән, 5 ғаиләне күсереү тураһында ҡарар сығарылған. Уларҙың береһе күсерелгән, 3-һө буйынса өлөшләтә түләү индерелгән, береһе күсереү стадияһында. Ҡалған дәғүәләр әлегә ҡарала. 1 ғинуарға халыҡтың торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысы 2 миллиард 376 миллион һум тәшкил итеүгә ҡарамаҫтан, үткәрелгән саралар һөҙөмтәһендә ул 2018 йылдың 1 ғинуары менән сағыштырғанда 1 процентҡа кәмегән. Ирекһеҙҙән, шундай һорау тыуа: халыҡтың шул сама бурысы бар икән, ни өсөн хөкүмәт уның елкәһенә тағы ла түләүҙәр өҫтәй? Киреһенсә, халыҡтың түләү мөмкинлеге сикле булыуын иҫәпкә алып, уның хәлен еңеләйтергә тейеш түгелме ул? Эйе, судҡа биреп, халыҡ араһында аңлатыу эштәре (әгәр ярты йыл түләмәһәгеҙ, торлағығыҙҙан ҡолаҡ ҡағаһығыҙ йәки бәләкәй квадратуралы торлаҡҡа күсереләһегеҙ) алып барып, халыҡ бурысын тулыһынса йәки өлөшләтә түләүгә өлгәшеп булалыр. Бында өс категория булыуы ихтимал: йә улар аҡсаһы булып та түләмәгән, закондарҙы һанға һуғып бармаған байҙар - киҫәтеү булыу йәки эштәре судҡа барып етеү менән бурысын тулыһынса ҡаплаусылар, сөнки мөмкинлектәре бар; икенселәре - аҡсаһы булмағанлыҡтан, кредит алып, бурысын өлөшләтә ҡайтарыусылар һәм башын ике бурыс ҡоллоғона алып барып тығыусылар, сөнки торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙең ҡалған өлөшөн дә түләп бөтөргә, алынған кредитты ла ҡайтарырға кәрәк; өсөнсөләре инде әхлаҡһыҙ тормош алып барыусылар. Әммә отчет биргәндә түләмәүселәрҙең ниндәй категорияға ҡарауы тураһында бер ниндәй мәғлүмәт булмауы ла уйландыра: нисек кенә булмаһын, тәү сиратта, түләй алмаусыларға ярҙам күрһәтеү тураһында уйларға кәрәктер, бәлки. Ни тиһәң дә, улар ҙа бит ошо ҡала граждандары. Кешеләрҙе йәшәгән йортонан күсереп йәки күсереү менән ҡурҡытып ҡына тормошто алға ебәреп булһа икән...

Әйткәндәй, райондарҙың Торлаҡ-коммуналь хужалығының идара итеү ойошмалары шулай уҡ йорт ҡыйыҡтарын ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу менән дә шөғөлләнә. Был эшкә 7 автовышка, 319 кеше һәм сәнәғәт альпинистары бригадаһы йәлеп ителгән. Тәбиғәттең үҙ ҡануны, шуға күрә ул йорт ҡыйыҡтарын таҙартыу графигына үҙенең төҙәтеүҙәрен индерә, һөҙөмтәлә бер майҙанды бер нисә тапҡыр таҙартырға тура килә. Өфө ҡала хакимиәте граждандарҙы иғтибарлы һәм һиҙгер булырға, йорт тирәләрендә иҫкәртеүсе аншлагтар йәки таҡтасыҡтар булғанда, уларҙы урап үтергә саҡыра. Алдағы көндәрҙә һауа торошо үҙгәрмәй тормаҫ, шуға ла ҡайһы бер хәүефһеҙлек сараларын хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: епшек ҡар һылашып, хатта сәләмәт ағастарҙың да ботаҡтары, ауырлыҡты күтәрә алмайынса, һыныуы мөмкин, шуға күрә автомобилдәрҙе ағастар аҫтына, шулай уҡ иҫкәртеү таҡтасыҡтары торған майҙанда ҡалдырырға, йәйәүлеләргә ағас, электр линияһы, реклама щиттары, еңел конструкциялар эргәһендә булырға ярамай. Әгәр инде йорт эргәһендәге биләмәлә хәүефле участка күрһәгеҙ, берҙәм 112 номерына шылтыратып, хәбәр итеү зарур.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҠЫҪҠАСА*

## РӨХСӘТ ЮҠ!

**Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов фонарь бағаналарына, туҡталыштарҙа һәм күп фатирлы йорттарҙың ишектәренә рөхсәтһеҙ иғландар йәбештереүҙә тәртип урынлаштырыуҙы талап итте.** Уның фекеренсә, улар Башҡортостандың баш ҡалаһының йөҙөн боҙа. "Бөтә бағаналарҙы һәм туҡталыштарҙы иғландарҙан таҙартырға кәрәк. Ҡаланы йәмһеҙләгән кешеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу тураһында ҡарар сығарыу зарур. Ә әлегә бөтә ҡала иғландар менән тулған, ниһайәт, тәртип урынлаштырырға ваҡыт", - тине Салауат Хөсәйенов. Бынан алда Өфөлә йәшәүселәр ҙә бер нисә тапҡыр ошо мәсьәләгә иғтибар йүнәлткәйне. "Беҙ ҡалабыҙҙа ҡағыҙҙар йәбештерелгән булыуына шул тиклем өйрәнгәнбеҙ, хатта уны күрмәйбеҙ ҙә", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәрҙең береһендә билдәле блогер Владимир Кобзев.

✓ **Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, 2018 йылдың IV кварталында Башҡортостанда беренсел торлаҡ баҙарында бер "квадрат"тың уртаса хаҡы 57,9 мең һумға етте.** Былтырғыға ҡарағанда, был 6 процентҡа күберәк, тип белдерҙе республика статистары. Төбәктә икенсел торлаҡҡа хаҡтар бик артманы - квадрат метр өсөн уртаса 53,3 мең һум. 2017 йылдың IV кварталы менән сағыштырғанда, икенсел баҙарҙа торлаҡ хаҡы 4,6 процентҡа күтәрелде, тип йомғаҡ яһанылар Башстатта. Күсемһеҙ милек баҙары уйынсылары фекеренсә, быйыл беренсел баҙар секторында, атап әйткәндә, Өфөлә хаҡтарҙың 15-20 процентҡа артыуы мөмкин. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Артем Ковшов иһә икенсе төрлө фараз тураһында белдерҙе: "Быйыл беренсел баҙар секторында хаҡтарҙың 10-12 процентҡа артыуын көтәбеҙ..."

✓ **Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты Рәсәйҙә тәүге тапҡыр мәктәп йәшендәге балаларҙы тикшерә.** Белгестәр компьютер технологияларын, мобиль ҡоролмаларҙы ҡулланыу һәм күрәшлектең үҫешеүе араһында үҙ-ара бәйләнеште асыҡларға теләй. Был проблема тулыһынса тикшерелмәгән һәм шуға ярашлы ошо фекерҙе раҫлаған база юҡ, ти табиптар. Был мәсьәлә айырыуса мәктәп йәшендәге балалар араһында көнүҙәк. Рәсәйҙә халыҡтың 50 процентҡа яҡыны күрәшлектән яфалана һәм йылдар үтеү менән был һан арта бара. Уҡыусылар араһында тикшереү бушлай уҙғарыла һәм заманса ҡорамалда диагностика сараларының тулы комплексын үҙ эсенә ала. Күҙ ауырыуҙары асыҡланған осраҡта балаларға Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында офтальмологик ярҙам күрһәтелә. Өфө уҡыусыларын тикшереү 21 ғинуарҙан башланды.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Арыуҙан

❖ 1 ҡалаҡ бәпкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, таҫтамалға урап, ярты сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр, ашар алдынан 1-2 ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 14-21 көн.

❖ 1 ҡалаҡ ҡырҡбыуын (хвощ) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. 1 стакан төнәтмәне 4 өлөшкә бүлеп, көнөнә 4 тапҡыр эсергә. Дауаланыу курсы - 21 көн. Ул организмды таҙарта, һөҙөмтәлә арыу ҙа юҡҡа сығасаҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн кремний айырыуса мөһим, ә был үләндәрҙә - бәпкә үләнендә лә, ҡырҡбыуында ла был матдә күп. Шуға ла уларҙы ҡатын-ҡыҙ үләндәре тип атайҙар. Ҡайһы берҙә киске сәй урынына бәпкә үләне бешереп эсергә ғәҙәтләнһәгеҙ, яҡшы булыр.

❖ 2 ҡалаҡ ҡыҙылхан (кипрей) үләненә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 минут ҡайнатырға. Уттан алып, тағы 30 минут төнәтергә. Ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

❖ 10 грамм киптерелгән юл япрағы үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. 15-20 көн дауаланырға.

❖ Ярты кг әстерхан сәтләүегә, 300 грамм бал, 100 мл алоэ һуты, 3-4 лимондың һуты. Бергә ҡушып болғатҡас, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға. Был иммунитетты ла әүҙемләштереп ебәрә.

### Тире сирҙәренән

❖ Диатез менән дерматитты дауалау өсөн 3-4 әстерхан сәтләүеген мейестә көрән төҫкә ингәнсе бешерергә. Һыуынғас, ярырға һәм сәтләүектәрҙе иҙергә, балыҡ майы ҡушып, компресс итеп һалырға. Кипһә, тағын алыштырырға. Оҙаҡ та үтмәй, тире таҙара.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**XX быуат башында Башҡортостанда 3 тапҡыр (1906, 1907, 1912 йй.) булып киткән С. И. Руденко, башҡорттарҙың көнкүрешен һүрәтләгәндә "илдең дала өлөшөндә" һарыҡсылыҡтың мөһим роль уйнауын билдәләй һәм айырыуса көнсығыш райондарын һыҙыҡ өҫтөнә ала: "Күсмән башҡорт тормошонда йылҡы менән бер рәттән һарыҡтар ҙа төп урында, XIX быуаттың аҙағында улар Башҡортостандың Урал арьяғының көнсығышында күпләп үрсетелә".**

Тап ошонда (хәҙерге Ҡурған өлкәһе территорияһы) ғалим-этнографтар тирмәләрҙе фотоға төшөрөп ала. 1909 йылда венгр лингвисы Д. Месарош тап Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында башҡорт тирмәләрен тап итә. Венгрия этнография музейы архивында Талҡаҫ күле яҙҙарындағы йәйләүҙәге тирмәләр фотоһы һаҡлана. Тап уның хеҙмәте арҡаһында беҙ бөгөн биҙәкле кейеҙҙең һүрәтен күрә алабыҙ.

Этнографик хеҙмәттәрҙә төрлө маҡсатта ҡулланыу өсөн һуғылған кейеҙҙәр өсөн күпме сеймал китеүе тураһында мәғлүмәттәр ҙә осрай. Ҡаҙаҡ тикшеренеүсеһе С. Толыбеков революцияға тиклем баҫылып сыҡҡан бер баҫмала түбәндәге мәғлүмәткә осрай. Унда автор киңлеге 2,5-3 аршин (1,8-2,1 м) булған 8 аршинлыҡ (5,6 м) кейеҙ баҫыу өсөн 25 һарыҡтың йөнө кәрәк, тип яҙа. В. Радловтың "Из Сибири" (1884 й.) китабында 40 һарыҡ йөнөнән 1 кейеҙ баҫыла, тейелә. Тирмә өсөн 7-8 кейеҙ кәрәк булған, уларҙың ҙурлығы тирмәнең ҙурлығына бәйле. Бәләкәйерәк тирмә өсөн 15 бот (240-250 кг) йөн киткән. Ю. Шибаеваның ҡырғыҙҙарҙан алған мәғлүмәте буйынса, алты ҡанатлы тирмә өсөн 280 кг йөн кәрәк. Йәшенә һәм тоҡомона ҡарап, бер һарыҡтан 1-ҙән 2 кг-ға тиклем йөн ҡырҡып алына. Тирмә өсөн 150-200 һарыҡ йөнө талап ителгән.

Хужалығында 10-12 һарыҡ булһа, ҡырҡып алынған йөндән ҙур булмаған кейеҙ баҫырға мөмкин булған. 40-50 баш һарыҡтан торған көтөүҙән бер нисә йылға бер генә тирмә өсөн кейеҙ баҫып ала алғандар. Ә тирмә өсөн тәғәйенләнгән кейеҙҙе ҡулланыу ваҡыты - 5-6 йыл иҫәпләнә. Шуныһы ла бар, хужалыҡта һарыҡ йөнө кейеҙ баҫыу өсөн генә ҡулланылмаған. Уның бер өлөшө балаҫ, тула һуғыуға, ойоҡ, шәл бәйләүгә тотонолған. Кейеҙ түшәк кәрәк-ярағына, ат егеү ҡоролмаларына ла кәрәк булған.

Башҡортостандың көньяғы һәм көньяҡ-көнсығышында урынлашҡан башҡорт ауылдарына ошондай мәғлүмәтте лә иштергә тура килә ине. Йәйләүҙәр мәлендә, XX быуат башында тирмә өсөн кейеҙҙе ситтән, ат һатып алғандар. Әбйәлил менән Баймаҡ райондары ауылдарында биҙәкле ҡаҙаҡ кейеҙҙәре лә осраны. Малсылыҡ продукцияһын һатыу һәм тауарҙы алыштырыу өсөн сауҙа үҙәге булып Ырымбур, Троицк, Кустанай торған. Тарихсылар был йәрминкәләргә көньяҡ далаларынан, бигерәк тә ҡаҙаҡтарҙан ҙур күләмдә йөн һәм кейеҙ килтереүҙәрен билдәләй.

XIX быуат аҙағында - XX быуат башында кейеҙ баҫыу башҡорттарҙың төп шөғөлдәренең береһе булыуҙан туҡтай. Әммә боронғо кәсеп онотолмаған. Уны бөгөн дә еренә еткереп башҡарыусылар бар.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

**Балаларға өҫтәмә белем биреү мәсьәләһе бөгөн мәғарифтың иң актуаль темаларының береһе. Уны баланың һөнәрен арттырыу, өлгәшен яҡшыртыу һәм киләсәктә лә файҙалы булыуын күҙаллап һайларға тырыша ата-әсәләр. Яңы йылдан алда Малайзияла үткән менталь арифметика буйынса халыҡ-ара олимпиадала Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы уҡыусылары Мәрйәм Моталова - икенсе, Азра Хөснөтдинова, Әминә һәм Ильяс Игебаевтар өсөнсө урындарға лайыҡ булды. Уларҙың уңыштары, республикала менталь арифметика буйынса өҫтәмә белем биреүҙе ойоштороу мәсьәләләре тураһында уҡытыусылары Өлфәт МАЛИКОВ менән әңгәмәләштек.**



# МЕЙЕНЕҢ...

## ике ярымшарын да эшләтеүсе фән

**➔ Тәүҙә менталь арифметика тигән төшөнсә нимә аңлатыуын, уға нисек өйрәнергә булыуы тураһында һөйләһәгеҙ ине.**

- Менталь арифметиканы тиҙ һанарға өйрәтеүсе ысул тип яҙалар интернет селтәрендәге бөтә сығанаҡтарҙа ла. Беҙ "Орбита" IT-мәктәбен асҡанда был төшөнсәне үҙебеҙсә аңлатырға булдыҡ. Менталь арифметика - ул көнөлдән тиҙ һанау ғына түгел, ә баш мейеһенең ике ярымшарын да берҙәй үҫештерергә ярҙам иткән ысул. Мәҫәлән, мин һеҙгә ун бишкә егерме етене ҡушығыҙ тип әйтһәм, мәктәптә өйрәнгәнсә, уйҙа бағана рәүешендә ҡуйып хисаплап яуап табаһығыҙ. Был саҡта яуапты логика ярҙамында табабыҙ, ә менталь арифметикала баш мейеһенең уң яҡ ярымшары эшләй, ул кешенең күҙ алдына килтерә белеү, ижад итеү һәләте өсөн яуаплы. Балалар тәүҙә абакусҡа һанарға өйрәнә, артабан шул абакусты күҙ алдына килтереп, уйында ҡушып-алып, ҡабатлап-бүлеп яуап бирә башлай.

**➔ Был рәүешле көнөлдән иҫәпләргә өйрәнеү өсөн күпме ваҡыт кәрәк?**

- Беҙҙең уҡыу программаһы бер йыл ҡушыу-алыуға, бер йыл ҡабатлау-бүлеүгә өйрәтерлек итеп төҙөлгән. Әлбиттә, күп нәмә баланың теләп өйрәнеүенә бәйле, көнөләнә ятмаһа, уның өлгәшеү ҙә ауыр. Шуға беҙ уҡыусы, атай-әсәй, уҡытыусы бер маҡсатта эшләүенә ҙур иғтибар бүләбеҙ.

**➔ Һеҙҙең мәктәпкә йөрөргә теләүселәр күпме?**

- "Орбита" IT-мәктәбенең Башҡортостан, Татарстан республикалары, Силәбе өлкәһендә алтмышҡа яҡын филиалы бар. Дөйөм алғанда, уларҙа ике меңгә яҡын бала шөғөлләнә. Бөгөн минең олимпиадала ҡатнашыусылар төркөмөндә биш уҡыусы шөғөлләнә, шуларҙың дүртеүһе әлеге халыҡ-ара кимәлдәге ярышта бик яҡшы күрһәткестәргә өлгәште.

**➔ Әйткәндәй, халыҡ-ара кимәлдәге ярыштарҙа йыш ҡатнашаһығыҙмы?**

- Тәүге тапҡыр ҡатнаштыҡ, шуға ла уҡыусыларыбыҙ алдынғылар рәтенә инеүенә үтә шатбыҙ. Быға тиклем үҙебеҙ мәктәп, республика, төбәк-ара кимәлендә ярыштар ойоштора торғайныҡ. Былтыр Бөтә Рәсәй кимәлендәге менталь арифметика буйынса олимпиадала икенсе һәм өсөнсө урындар яулап ҡайтҡас, Рәсәй командаһы составына инергә тәҡдим иттеләр. Биш уҡыусы ошо составҡа индерелде һәм уларҙы маҡсатлы рәүештә халыҡ-ара бәйгегә әҙерләй башланыҡ, тик ваҡытында ғаризаһын бирепөлгөрмәгәнлектән, был юлы бер уҡыусым Малайзияға бара алманы.

**➔ Математика тормошта кәрәк түгел, беҙ ҡатмарлы иҫәпләү ысулдарын бер ҡасан да ҡулланмайбыҙ, ни өсөн уны мәктәптә уҡыталар, тип һуҡраныуын ишеткәнебеҙ бар уҡыусыларҙың. Ә менталь арифметикаға көнкүрештә ҡулланылыш табыламы?**

- Беҙ көнөлдән хисаплауҙы оҫталыҡ тип ҡабул итәбеҙ. Математика уҡыу беҙҙә логик фекерләргә, сәбәп һәм һөҙөмтә бәйләнешенә, күләмле фекер йөрөтөргә өйрәтә. Нәҡ фекерләү системаһына нигеҙ һалына, тик математика баш мейеһенең һул яҡ ярымшарын үҫтерһә, менталь арифметика уң яғына ныҡыраҡ тәьҫир итә. Ә бына тормошта ҡулланып булыу-булмауға килгәндә, менталь арифметика кешенең хәтерен, бигерәк тә күргән нәмәне тиҙ генә хәтерҙә ҡалдырыу оҫталығын яҡшырта. Мәҫәлән, 10-15 секунд ҡына күреп ҡалған ун алты һанды шундуҡ хәтерҙә ҡалдырып әйтергә була.

**➔ Малайзиялағы ярыш нисек үтте, кемдәр ҡатнашты, һөҙөмтәләр менән ҡәнәғәтһегеҙме?**

- Беҙҙең уҡыусылар унда өс категорияла ярышты: Мәрйәм Моталова А категорияһында, Ильяс Игебаев һәм Азра Хөснөтдинова Б категорияһында, Әминә иң ҙурҙар араһында - С категорияһында. Был категориялар йәш арауығына ҡарап бүленә, ә яуаптар дөрөҫ булыу һәм тиҙлек критерийҙарына ҡарап баһалана. Конкурс ете этаптан торҙо, башта абакусты ҡулланып иҫәпләнеләр, унда уйларға 3 минут бирелде. Һуңынан көнөлдән һанап, 1 минут эсендә дөрөҫ яуап сығарырға тейеш булдылар. Һыҙғыстары таушыш ишетелгәс тә алда ятҡан ҡағыҙҙы әйләндереп, шунда яҙылған заданиены үтәргә кәрәк. Уҡыусыларыбыҙ һынатманы. Улар ярышҡан арала беҙ башҡа илдәрҙән килгән вәкилдәр менән осраштыҡ, башҡа илдәрҙә был йүнәлеш буйынса балалар кәмендә биш-алты йыл шөғөлләнә икән. Былтыр үткәрелгән халыҡ-ара олимпиадала Рәсәйҙән ни бары ике генә уҡыусы ҡатнашҡан, ә быйыл - утыҙ һигеҙ! Хәҙер беҙҙең алда йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫтәй кадрҙар әҙерләү бурысы тора, шуға, тәжрибә уртаҡлашыу һәм хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеп тә ҡайттыҡ. Ни өсөн беҙҙең башҡорт балалары ла японлар, ҡытайҙар, вьетнамдар кеүек еңеү яуламаҫҡа тейеш!

Киләһе йыл был ярыш Таиландта, унан Канадала үтәсәк, унда тағы ла яҡшыраҡ әҙерлек менән барырбыҙ, тип пландаштырып торабыҙ. Сөнки был оҫталыҡ балаларға бәләкәйҙән олимпиада системаһының төҙөлөшө менән танышырға ярҙам итә. Беҙ уҡыусы саҡта хатта республиканан да ситкә сығып йөрөмәнек, ә был балалар ҡала, район, республика, бөтә Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдәрҙә белемдәре күрһәтеп булыуын белә. Әлбиттә, ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн уҡытыусыға ла теүәл план, аныҡ маҡсаттар ҡуйып эшләргә кәрәк.

**➔ Менталь арифметикаға бөтөнләй һанай белмәгән кешене лә өйрәтергә буламы, әллә теүәл фәндәргә барымы булғанды ғынамы?**

- Бындай туранан-тура бәйләнеш күҙәтелмәй, төрлөсә булыуы мөмкин. Әминә менән Ильястың Сафия исемле бәләкәй һеңлеһе бар, ул һандарҙы әле белмәй, әммә абакус аша ҡушыу-алыу ғәмәлдәрен башҡара белә. Математиканан насар өлгәшһә лә, менталь арифметика еңел бирелеүе мөмкин. Беҙгә йөрөгән балалар мәктәптә бөтәһе лә тик бишлегә генә өлгәшә. Ғөмүмән, Башҡортостанда талантлы балалар күп. Яҡыраҡ ҡына Әбйәлил районынан видеояҙма ебәргәйнеләр, менталь арифметика буйынса ике генә дәресте булып ҡайтҡан бер бала ике урынлы һандар менән ҡушыу-алыу ғәмәлдәрен бик шәп эшләй. Быны ҡайҙан һәләттәләрҙе эҙләргә, үҫтерергә кәрәк. Шуға ла уҡыусыларҙы тәү сиратта олимпиада хәрәкәтенә әҙерләп ылыҡтырырға тырышабыҙ, мөмкинлектәр ауыл мәктәбендә уҡығанда ла, Өфөнөң алдынғы мәктәбендә уҡығанда ла бер тигеҙ булһын.

**➔ Әммә атай-әсәйҙәр кеҫәһенән аҡсаһын сығарып бирергә әҙерме?**

- Был ҡатмарлы һорау, сөнки беҙҙә ун йыл буйы бер ниндәй сығымдарһыҙ уҡытып, 11-се синыфҡа килеп еткәс, балаһын репетиторҙарға йөрөтөп аҡса түгергә күнеккәндәр. 10-15 йыл элек мәктәптәге бөтә түңәрәктәр, дәрестәр уҡытыусы энтузиазмына бәйле булды, барыһы ла бушлай ине. Заман талабы хәҙер икенсе: уҡытыусы ла бушҡа эшләргә риза түгел, ата-әсәгә лә бишун йылға алдан уйлап, баланың киләсәген инвестицияларға кәрәк. Быны аңлаған ғаиләләр бар.

**➔ "Орбита" IT-мәктәбе тағы ла ниндәй йүнәлештәр буйынса эшләй?**

- Өс йүнәлеш буйынса эш алып барабыҙ: менталь арифметика, робот техникаһы һәм алгоритмика. Белем уҫтаҡтары менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ, ошо йүнәлештәр буйынса төрлө конкурстар, олимпиадалар, ярыштар үткәреп торабыҙ. Йыл да "Орбита"ның йәйге мәктәбен ойоштораБыҙ, унда бөтә республиканан йыйылған уҡыусыларға робот техникаһы, алгоритмика, программа төҙөү һәм инглиз теле буйынса мауыҡтырғыс дәрестәр үткәрелә, мәҙәни саралар, экскурсиялар, уйындар менән матур ял мәле ойоштороло. Быйыл Өфөлә "Абакус" чемпионатын үткәрергә йыйынабыҙ, Башҡортостандың менталь арифметика үҙәгенә әйләнеүен теләйбеҙ. Pama Global менталь арифметика буйынса ассоциацияһына нигеҙ һалыусы Девид Ляо менән дә хеҙмәттәшлек итергә килешкәйнек, үҙе лә Өфөгә килеп китергә вәғәҙә бирҙе. Быны шундай халыҡ-ара кимәлдәге иң алдынғылар араһында тиң булырға тейеш Башҡортостан.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Редакцияға Өлфәт Рәүеф улының уҡыусылары Әминә һәм Ильяс Игебаевтар ҙа килгәйне, улар уҡытыусылары менән һөйләшкән арала шулай уҡ Малайзияға сәфәрҙән тәьҫораттары менән бүлеште. Уҡыусылар ярыштағы тулҡынланыу тойғоһон, төрлө илдәрҙән йыйылған тиҫтерҙәре менән осрашыуҙы һәм Куала-Лампур буйлап экскурсия барышында күргән маймылдарҙы хәтерендә ҡалдырған. Менталь арифметикаға һөйөү аша шундай ҙур донъяға ишек асҡан балалар ҡанатланып, яңы үрҙәргә ынтылыуҙы маҡсат итеп ҡайтҡан.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# КАТАЛОН АТЛАСЫНДА...

## Мәскәү юҡ, ә Башҡорт ҡалаһы бар

**Баш ҡалабыҙҙа Нияз Мәжитов иҫтәлегенә бағышлап үткәрелгән Халыҡ-ара фәнни симпозиумға "Боронғо Өфө" республика тарихи ҡурсаулығы музейы саҡырыуы буйынса Санкт-Петербург ҡалаһынан тарихсы-картограф Александр Григорьевич Юрченко ла килгәйне. Александр Григорьевич тикшеренеүсе, сәйәхәтсе, урта быуаттар яҙыуҙарын уҡый белеүсе генә түгел, боронғо карталар белгесе лә. Беҙҙең сараға ул 1375 йылда төҙөлгән Каталон картаһын алып килгәйне. Картала "Башҡорт" тип билдәләнгән ҡала ла бар. Тарихсы ауыҙынан ишеткән мәғлүмәттәрҙе гәзит уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.**





**➔ Шулай ҙа беҙҙең һеҙҙән, төрки халыҡтар тарихын өйрәнеүсе тарихсынан, аныҡ ҡына яуап ишеткебеҙ килә. Һеҙҙең фекерегеҙ ниндәй? Өфө-II ҡаласығы Каталон атласындағы Башҡорт ҡалаһы ул, тиғән һығымта яһап буламы?**

- Археологик ҡомартҡылар, Европа, шәреҡ ғалимдарының яҙмалары, карталар хәҙерге Өфөнөң боронғо Башҡорт ҡалаһы нигеҙендә ултырыуын раҫлай. Башҡорттарҙың үҙҙәренең тарихи хәтеренән теркәлгән яҙмалар ҙа был инаныуҙы нығыта. Ҡасандыр был урында башҡорттарҙың бөйөк ҡалаһы булыуын иҫләүсе инештәрҙән алынған мәғлүмәттәрен Рычков яҙып ҡалдыра. Шулай уҡ "Сыңғыҙнамә" дастанында ла Өфө йылғаһы тамағында ҡала булыуы, унда хандар йәшәүе бәйән ителә.

Тарихсы-географ Матвей Меховский 1517 йылда Краковта сыҡҡан "Трактат о двух Сарматиях" тигән хеҙмәтендә башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙе Башкирия тип атай һәм улар үҙ телендә һөйләшәләр, тип яҙа. Карталар тураһындағы һүҙҙе дауам итеп, күренекле фламанд картографы Герард Меркаторҙың эштәрен атап китергә була. Ул 1554 йылда Рәсәйҙең картаһын төҙөй. Унда Волга, Кама, Һамар, Ырғыҙ йылғалары төшөрөлгән. Ағиҙел йылғаһы буйындағы Өфө урынында Pascherty тип яҙылған ҡала билдәләнгән, Урал тауҙары руссаға тәржемәлә "Каменный пояс" тип аталған.

XVII быуат башында Рәсәйгә бер нисә тапҡыр Голландия картографы һәм сауҙагәре Исаак Масса килә һәм Рәсәйҙең бер нисә вариантта торған картаһын төҙөй. Уларҙың береһендә Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡушылған урынындағы ҡала Өфө (Pascharti) тип билдәләнгән. Шулай итеп, Европа ғалимдары төҙөгән урта быуат карталарында хәҙерге Өфө ҡалаһы "Паскерти", "Паскатир", "Пашхерти" тип атала. Хатта XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат башы карталарында ла Өфө ҡалаһы "Башкорт" тип күрһәтелә.

Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты беҙҙең эраның IV-XV- XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтен билдәләй. Өфө-II ҡаласығы быуаттар буйына йәшәп килгән ҙур административ, сауҙа үҙәктәренең һәм Урал-Волга буйы тарихының әһәмиәтле пункттарының береһе һанала. Мәҙәни ҡатламдың һәм органик материалдың яҡшы һаҡланыуы Урта быуаттарға ҡараған урындағы тарихи процессы яҡшы күҙалларға мөмкинлек бирә.

Боронғо ҡаласыҡтың фәнни әһәмиәте шунда: ул Башҡортостандың һәм Көньяҡ Уралдың яҙма тарихҡа тиклемге иң ҡиммәтле тарихи сығанаҡтары иҫәбенә инә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламын ныҡлы һәм комплексы өйрәнеү Өфө-II ҡаласығын Рәсәй археология фәненең эталоны объектына әүерелдерәсәк.

Минең фекеремде ишетергә теләйһегеҙме? Боронғо карталарҙағы Башҡорт тип аталған ҡаланың һеҙҙәге археологик Өфө-II ҡаласығы икәнлеген иҫбатлау минең маҡсатым түгел. Әммә мин быға алып барылған тикшереүҙәрем һөҙөмтәһендә уларҙың тап килеүен дәлилләйем. Тик, ҡабатлап әйтәм, карталарҙа ҡаланың ултырған тәңгәле асыҡ ҡына әйтелмәй. Мин археолог түгел, мин - картограф. Был тәңгәлдә хеҙмәт иткән башҡорт тарихсыларының хеҙмәттәрен хөрмәт итәм һәм уларға хәлемдән килгәнсә булышлыҡ итәм. Минең фекеремсә, был йомаҡҡа яуапты башҡорттар үҙҙәре табырға тейеш, һәм табасаҡтар ҙа.

**➔ Александр Григорьевич, һеҙ тарихты сәйәхәттә өйрәнгән кеше. Ниндәй сәйәхәттәрегеҙҙе мөһим йәки билдәле тип әйтә алаһығыҙ?**

-Тәүге сәйәхәткә мин студент сағымда уҡ юлландым. Тарих менән ҡыҙыҡһыныуым, сәйәхәтселәрҙең яҙмаларын йөрөп тикшереп сығыу хыялы шул тиклем көслә ине, бер рюкзак менән сыҡтым да киттем. 1988 йылда X быуат сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн Фаҙландың, 1989 йылда Францисканц Иоан де Плано Карпинизың, ә 1990 йылда XIV быуат гәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Баттут юлдары буйлап үттем.

Санкт-Петербург университетының бишенсе курсында уҡығанда ҡулыма билдәле гәрәпсе А.П.Ковалевский тәржемәһендә Әхмәт Ибн Фаҙландың юлъяҙмаларының тулы варианты килеп эләкте. Ошо тәңгәлдә Фаҙландың ысынлап булыу-булмауы тураһында бәхәс ҡуптарыусыларға сәйәхәтсенең булыуы һәм бик күп ҡыҙыҡлы хеҙмәттәр ҡалдырыуы хаҡында әйтер инем. Шул уҡ ваҡытта Фаҙлан хаҡында башҡа ғалимдарҙың да эштәрендә мәғлүмәттәр бар. Уйлап ҡараһаң, шунсама халыҡ нисә быуат буйына ниндәй маҡсат менән ундай алдаҡта ҡатнашырға тейеш? Был мөмкин булмаған хәл. Өҙөп әйткәндә, сәйәхәтсе Әхмәт ибн Фаҙлан булған.

Фаҙлан сәйәхәте менән Болғарға тиклем килеп еткән, башҡорт ерҙәренә эскә инмәгән, башҡорттар араһында ла йәшәп китмәгән. Әммә яҙмаларында ул башҡорттарҙы телгә ала. Каруан Яйыҡ, Урал ер сиктәренән аша үткәндә башҡорттарҙың һөжүменән һағайып килеүҙәре тураһында яҙа. Уларҙы бында ла, башҡа төрки халыҡтары менән мөнәсәбәт тотҡандағы кеүек үк, бүләк биреүҙәр, зиннәтле бүләктәр менән алмашыуҙар кеүек ысулдар ҡотҡара. Сәйәхәтсе башҡорттарҙы әле Исламға килмәгән, ер-һыу аллаларына табыныусы һәм "төркиҙәрҙең иң усалы" итеп һүрәтләй.

Сәйәхәттәремдең һәр береһе минең өсөн мөһим булды. Тарихты бары тик китаптарҙан ғына өйрәнеү менән уны башҡа илдәр, халыҡтар архивынан, юлъяҙмаларынан, айырым кешеләрҙә генә һаҡланған инештәрҙән өйрәнеү араһында айырма ҙур. Мин үҙем дә юлъяҙмалар алып барам, күргәндәремде бөгөнгө күҙлектән тәфсирләп теркәйем һәм киләсәктә был яҙмалар ҙа алдағы быуындар өсөн файҙалы ҡулланмалар булыр, тип уйлайым.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

**(Аҙағы).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



Әкрәм БЕЙЕШ

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

1917 йылдың 8 - 20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы иғлан ителгән Башҡортостан автономияһын раҫлаған, Башҡорт хөкүмәтен һайлаған һәм башҡа мөһим мәсьәләләр хәл иткән. Был тарихи ваҡиғаға башҡорт халҡы иҫ киткес ныҡ ҡыуанған. Бөтә башҡортто, уның бөтә социаль төркөмөн уртаҡ ҡыуаныс берләштергән. Автономияла, үҙ хөкүмәтендә башҡорттар иҫәпһеҙ ҡорбан биреп, икһеҙ-сикһеҙ ғазап сигеп, быуаттар буйы яулаған азатлыҡ хыялының тормошҡа ашыуын күргән. Милли азатлыҡ көрәшендә шул замандағы рус йәмғиәтен ике дошман лагерына бүлгән социаль ҡаршылыҡ кеүек эске ҡаршылыҡ башҡорт халҡына ят булған. Төп маҡсатҡа, милли азатлыҡҡа өлгәшкәнгә тиклем бер ниндәй синфи мәнфәғәт айырмалығы башҡорт халҡын бүлгеләй алмаған.

Башҡорт автономияһына ҡаршы булған татарҙар, башҡорттарҙы милли-мәҙәни мосолман автономияһы төҙөүгә кәртә ҡуя торған сепаратив эштә гәйепләп, ҡаты һөжүм аҫҡан. Улар хатта III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайын хәрби көс менән ҡыуып таратырға маташҡан. Эштәре барып сыҡмағас, улар Башҡортостан автономияһы төҙөүгә ҡырҡа ҡаршылыҡ белдереп, ҡоролтайға ультиматум яһаған. Ҡоролтай уларҙың ультиматумын кире ҡаҡҡан.

Иғлан итеү менән генә милли автономияны ғәмәлләштереп булмағанын башҡорт хөкүмәте яҡшы аңлаған. Башҡорттар большевиктарҙың Апрель конференцияһындағы резолюцияла, үҙбилдәләнеш мәсьәләһе партия тарафынан "һәр айырым осраҡта тик үҙенә башҡа хәл ителә", тип шарт ҡуйғанын белгән. Башҡорттар шулай уҡ Башҡортостандың үҙендәге ҡатмарлы хәл менән дә иҫәпләшмәй булдыра алмаған. Башҡортостандағы ярты халыҡты тәшкил иткән рус һәм башҡа килмешәктәрҙең дә башҡорт автономияһына ҡырҡа ҡаршы булыуы, Башҡортостан территорияһының большевиктар менән контрреволюцион казактар ҡул аҫтына ҡалып, ике өлөшкә бүленеүе көс еткенеҙ ҡыйынлыҡҡа килтергән. Шуға күрә башҡорттар иғлан ителгән автономияны рәсми рәүештә раҫлатыр өсөн Совет хөкүмәтенә мөрәжәғәт итергә һәм шуның менән билдәләнгән сик эсендә автономияны Башҡортостандың юридик нигеҙен нығытырға булған. Милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы хаҡында бөтә донъяға иғлан иткән Совет хөкүмәтенең һис бер тотҡарлыҡ һәм ҡаршылыҡһыҙ башҡорт автономияһын раҫларына башҡорттар шикләнмәгән. Мәсьәләнең аңһат хәл ителеренә ышанған Башҡорт хөкүмәте 1918 йылдың ғинуар башында Петербургҡа Учредитель йыйылышҡа барырға тейеш булған Башҡорт Мәркәз шура вәкиле Шәриф Манатовҡа Халыҡ Комиссарҙары Советының председателе В. И. Ленин менән иғлан ителгән Башҡортостан автономияһын раҫлау хаҡында һөйләшергә ҡушҡан.

**(Дауамы бар).**

***✓ Гәзиттәр фекерле мәҡәлә тәҡдим итергә тейеш. Мәҫәлән, ниндәйҙер сара булды икән, ти. Уны "барҙым-күрҙем-яҙҙым" тип кенә түгел, ә ошо ваҡиғаға ҡарашыңды, фекереңде белдереп, анализлап тәҡдим итергә кәрәк.***

# УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘҒА

**Республика баҫмалары үҙҙәренең 100 йыллыҡ тарихы менән ғорурланһа, Башҡортостандың баш ҡалаһының да баҫма матбуғаты менән маһайырлығы бар - бынан ярты быуат элек Өфөлә беренсе киске гәзит сыға башлай. Ошо осорҙа яңынан-яңы баҫмалар, башҡа киң мәғлүмәт саралары барлыҡҡа килеүгә ҡарамаҫтан, "Вечерняя Уфа" бөгөн дә баш ҡала халҡы менән ҡала хакимиәтен, ҡала Советын бәйләүсе төп баҫма, төп трибуна булып ҡала. Алтын осорона аяҡ баҫҡан гәзиттең баш мөхәррире Вячеслав ГОЛОВ менән мәлдән файҙаланып, тарих төпкөлөнән бөгөнгәсә хәтер ебен һүтеп кенә ҡалманыҡ, дөйөм журналистика тармағына, уның проблемаларына ла байҡау яһаныҡ.**

**Вячеслав Николаевич, гәзитегеҙҙең алтын юбилейы уңайынан бер аҙ тарих биттәрен аҡтарып алайыҡ, булмаһа. Баҫма ниндәй маҡсаттан асыла һәм ошо йылдар эсендә ул үҙен аҡланымы?**

- Ул ваҡытта өс ҙур республика гәзите - "Совет Башҡортостаны", "Советская Башкирия", "Кызыл таң" сыға ине. Улар барыһы ла иртәнге баҫмалар. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында илебеҙҙә киске гәзиттәр ойоштоРола башлай һәм улар Союз буйынса өс тиҫтә самаһы була. 1968 йылдың 8 октябрендә Мәскәүҙә КПСС Үҙәк комитеты ҡарары менән "Вечерняя Уфа" гәзитен ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Тәүге мөхәррир Йәүҙәт Хөсәйеновҡа коллектив туплау бурысы ҡуйыла. 1969 йылдың 1 ғинуарында уның беренсе һаны донъя күрә. Ул саҡтағы "Ленинец" гәзитенең көслө журналистары Венера Ҡарамышева, Юрий Федорович Дерфель, Лиля Перцева һ.б. "Вечерняя Уфа" гәзитенә күсеп эшләй башлай. Яңы баҫманы ҡала халҡы үҙ итә, уның уҡыусылары ла йылдан-йыл арта, хатта тиражы 150 меңгә еткән ваҡыттар ҙа була.

Киске гәзиттәрҙең, иртәнге гәзиттәрҙән айырмалы, маҡсаты шунда: мәҫәлән, хәбәрсе иртән ниндәйҙер сараға бара, фотоға төшөрә, яҙа, шул мәғлүмәт сәғәт икенсе яртыла баҫылып сыға. Икенән һуң ул киоскыларҙа, почта йәшниктәрендә ята. Халыҡ уларҙы алып, эштән ҡайтып, иркенләп уҡый, йәғни киске гәзит - ул тыныс, ғаилә мөхитендә уҡыуға тәғәйенләнгән.

Булды инде заманалар, ул саҡтарҙа типографияларҙа ҡурғаш формаларҙа хәреф ҡойоп, ут һүнеп китһә, наборщицалар хәрефтәрҙе бөртөкләп йыйып, фотоларҙы ла махсус формаларҙа эшләп, гәзит баҫтыра торғайнылар. Хәҙер 70-се йылдарҙағы "Вечерка"ларҙы ҡарайым - фотоларҙағы кешеләрҙе танып булмай. Сифаты бик түбән, рәссам фотоларға ретушь эшләй, һуңынан улар ҡурғаш пластинкаларға ҡойола. Интернет булмаһа ла, был эштәр заманына күрә бик оператив башҡарыла торғайны. Бөгөнгө менән сағыштырһаҡ, әлбиттә, хәҙер баҫма матбуғаттың сифаты күпкә яҡшы. Элекке гәзиттәрҙең сифаты түбән булыуға ҡарамаҫтан, яҙылыусылар ҙа күп булды, булған гәзиттәрҙе лә ҡыуана-ҡыуана уҡыныҡ бит. Бының менән нимә әйткем килә: тимәк, халыҡтың мәғлүмәткә ихтыяжы ныҡ ҙур булған.

**Кеше булған һайын яҡшыраҡҡа ынтыла, бөгөн мәғлүмәт баҙарында ла һайлап алыу мөмкинлеге бар һәм тиҙ ағышлы заманда кеше интернетҡа, телевизор-радиоға өҫтөнлөк бирә, ә баҫма матбуғатҡа яҙылыусылар йылдан-йыл кәмей бара... Бының сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

- Беренсеһе, ысынлап та, мәғлүмәт баҙарына интернеттың килеп инеүе - бөтөн яңылыҡ секунд эсендә тарала һәм ул һәр саҡ яңырып тора. Әгәр гәзит бушлай таратылһа йәки лимитһыҙ интернет кеүек айына ҙур булмаған билдәле сумма түләнең дә, шуға барлыҡ баҫма матбуғат алдырыу мөмкинлеге булһа, бөтөнләй икенсе күренеш булыр ине. Хәҙер бит кешенең һәр тин аҡсаһы иҫәптә. Әммә халыҡ гәзит уҡый. Мәҫәлән, яңыраҡ шундай мәғлүмәт ишетеп аптыраным: Өфөлә ҡайһы бер йорттарҙа бер подъезда йәшәүсе ололар йыйылышып, бер гәзит яҙҙыралар ҙа, шуны ҡулдан-ҡулға тапшырып уҡыйҙар. Шуға күрә, тиражыбыҙ әҙ, әммә уҡыусыларыбыҙ һаман да күп, тип әйтергә мөмкин. Бары тик улар яҙылыуҙың, гәзит уҡыуҙың үҙенә ҡулай ысулын тапҡан.

Шулай уҡ уҡыусының иғтибарын йәлеп итеү өсөн гәзит икенсе төрлө булырға, үҙгәрергә тейеш. Элек баҫма матбуғат мәғлүмәт тапшырыу сараһы булһа, хәҙер журналистарыма, мәғлүмәт артынан ҡыумағыҙ, беҙ электрон мәғлүмәт сараларын барыбер бер ваҡытта ла уҙып китә алмаясаҡбыҙ, тием. Уйлап ҡарағыҙ: беҙ кисә, элекке көн булған мәғлүмәтте бирәбеҙ, улар гәзиттә баҫылып, уҡыусыға барып еткәнсе иҫкерә. Шуға күрә гәзиттәр, башҡа мәғлүмәт сығанағынан айырмалы, фекерле мәҡәлә тәҡдим итергә тейеш. Мәҫәлән, ниндәйҙер хәл-ваҡиға йәки сара булды икән, ти. Уны "барҙым-күрҙем-яҙҙым" тип кенә түгел, ә ошо ваҡиғаға ҡарашыңды, фекереңде белдереп, анализлап тәҡдим итергә кәрәк. Уҡыусы уға күҙ йүгертеп кенә сыҡмаһын, ә һеҙҙең фекерегеҙҙе уҡып, үҙенең фекере тыуһын, килешмәһен, бәхәсләшһен йәки хупларын. Бөгөн мәҡәләләрҙә күберәк аналитика булырға тейеш.

Бер нисә йыл элек гәзиттәр өсөн, бөтәләр, ябылалар инде, тигән хәүефләнеү булғайны. Шунан көнбайыш менән сағыштырып ҡараным. Улар бит беҙҙе күптән артта ҡалдырған. Интернет беҙҙең тормошобоҙға килеп инеүгә өс тиҫтә йыл самаһы ғына, ә уларҙа ул уҙған быуаттың 1959 йылында уҡ була. Ул ваҡытта беҙ компьютерҙың "к" хәрефен дә ишетмәгәнбеҙ әле. Шуға ҡарамаҫтан, бөгөн көнбайышта ҡалын-ҡалын гәзиттәр сыға. Улар заман талабына яраҡлашҡан - күберәк анализ, өҫтәмә мәғлүмәт, ҡыҙыҡлы мәҡәләләр, әҫәрҙәр тәҡдим итәләр, интернет булғанда ла, баҫма матбуғат үҙ урынын тапҡан.

Әлбиттә, журналистика интернетҡа күсеп, сайттар, гәзиттәрҙең электрон варианттары ғына ҡалһа, бик үкенесле буласаҡ. Сөнки унда ҡуйылған материалдарҙы бер кем дә тикшермәй, мәғлүмәттәрҙең һаны артынан ҡыуып, сифат юғала. Ә бит журналистика - ул әҙәби хеҙмәт. Тимәк, уның теле матур, һутлы, бай булырға тейеш. Беҙ гәзиттә матур тел менән яҙырға тырышабыҙ, һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнә иғтибар итәбеҙ. Шуға гәзит кешеләргә бөгөн бигерәк тә ныҡ кәрәк, һәм ҡасан да булһа, көнбайыш кеүек, ҡабат баҫма матбуғаттың да баһаһы күтәрелеренә ышанам.

**Йәмғиәттә һәр ваҡыт күсәгилешлек принцибы булырға һәм һаҡланырға тейеш. Бөгөн, дөрөҫөн әйткәндә, гәзиттәрҙе күпселек осраҡта оло йәштәгеләр яҙҙыра һәм уҡый. Уларға алмашҡа йәштәрҙе - киләсәктә баҫма матбуғатты уҡыясаҡ потенциалды ла үҫтерергә кәрәк. Был йүнәлештә нимәләр эшләйһегеҙ?**

- Йәштәр ауыр мәсьәлә инде ул... Улар гәзит уҡырмы, юҡмы - белмәйем. Үҙемдең өлкән улыма 18 йәш, ҡулына баҫма матбуғатты тотоп та ҡарамай. Уның бәҫен дә, баһаһын да аңламай. Беҙҙең быуында, беҙҙән һуң килгән быуында эштән һуң ҡулға гәзит тотоп ултырыу йәки ятып, ял итеп, бер мәҡәләне ҡабат-ҡабат уҡыу ғәҙәте бар, йәштәрҙә ул юҡ. Хәйер, элек халыҡтың, шул иҫәптән балаларҙың да, һайлау мөмкинлеге ул тиклем күп түгел ине: гәзит-китап-кино-театр. Бөгөн бит йәнең нимә теләй, барыһы ла бар - аҡсаң ғына булһын да, ваҡытың ғына етһен. Шуға, әлбиттә, уҡыусыларыбыҙҙы бәләкәйҙән нисек тәрбиәләргә тейешлегебеҙҙе уйларға, анализларға кәрәк. Әле йорт хайуандары тураһында яҙабыҙ, төрлө акиәттәр баҫтырабыҙ, әммә, мәҫәлән, "Кызыл таң" кеүек, айырым сығарылыш эшләгәнебеҙ юҡ. Эшләргә мөмкин, әммә штат бәләкәй, хеҙмәткәрҙәр әҙ, уларҙы ҡайһы яҡҡа тартҡыларға белмәйһең.

**Ошо 50 йыл эсендә гәзитте халыҡ араһында популярлаштырыуға күп көс һалған ниндәй журналистарҙы бөгөн хөрмәт менән иҫкә алыр, атап үтер инегеҙ...**

- Бик ҡыйын һорау. Береһен атап, кемделер онотоп ҡалдырыуҙан ҡурҡам, сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы ошо арауыҡта гәзиттең барлыҡҡа килеүенә, үҫешенә өлөш индергән. Мәҫәлән, мин эшкә килгәндә Юрий Дерфель спорт бүлеге мөдире ине. Бик көслө журналист. Яҙыуы буйынса ғына әйтмәйем, ул бик күп спорт сараларын ойоштороусы ла булды. Өфөлә хатта "Вечерняя Уфа" гәзите ойошторған мотоуҙыштар үтте. 1982 йылда Дерфель "Уфимский день оранжевого мяча" - баскетбол байрамын ойошторҙо. Уны һаман да уҙғарабыҙ.

Алла Докучаева - журналист ҡына түгел, бик көслө яҙыусы ла. Хаттар бүлеге мөдире Лилия Перцева заманында "Йәш репортер мәктәбе"н ойошторҙо. Мәктәп уҡыусылары килеп, әллә 30-50 кеше бер бүлмәлә тығылып уҡыйҙар ине. Фәрит Шәрипов, Радик Абдуллин, Юрий Коваль, Венера Ҡарамышева, Әмир Вәлитов... Һәр ҡайһыһы тураһында оҙон-оҙаҡ һөйләргә мөмкин. Хәҙергеләрҙән минең беренсе урынбаҫарым, мәҙәниәт буйынса көслө журналист, абруйлы шәхес Илүзә Капкаеваны, Сергей Осадчийҙы, Рәшит Әйүповты, Татьяна Барабашты атап үтер инем.

Шуға ҡыуанам - Арина Астафьева кеүек көслө йәштәрем бар. ЖКХ түләүҙәре буйынса мин һаман да буталанам, төшөнөп кенә бөтөүгә икенсе үҙгәреш, шунан тағы... Арина квитанциялар буйынса барыһын асыҡлап, матур итеп яҙып, халыҡҡа аңлата ала. Шунан халыҡ дәғүәһе менән килһә, уларға ярҙам итеп, ундабында йөрөй. Был халыҡ өсөн бик кәрәкле эш.

**Элек киң мәғлүмәт сараларын дүртенсе власть тип әйтә инек, яйлап уның йоғонтоһо бөттө, тик атамаһы барыбер тороп ҡалды. Ни өсөн бөгөн дүртенсе властың абруйы юҡ?**

- Бында журналистарҙы йәки халыҡты ғәйепләп булмай. Әгәр властар журналистиканы ихтирам итһә, уны ысынлап та дүртенсе, йәғни үҙҙәре менән тиң власть итеп күрһә, хәл-то-



✔ ***Журналист - ул һөнәр түгел, ул күңел торошо, шуға күрә, күңеле ҡәнәғәтлек кисерһен өсөн кемдер ошо ауыр жанрҙар өҫтөндә лә эшләй. Шулай ҙа, дөрөҫөн әйткәндә, жанрҙар йылдан-йыл юғала бара.***



# БЕҘ КӘРӘКБЕҘ!

рош башҡарасаҡ булыр ине. Ә бөгөн бит журналистар властар менән йәнәш тормай, уларҙың артынан йүгереп, ҡайҙа нимә булғанын яҡтыртыусы хеҙмәтселәр рәүешендә. "Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер" тигән матур бер мәҡәл бар халҡыбыҙҙа, йәғни изгелекте сауап алыр өсөн эшләйҙәр, ә халыҡҡа күрһәтер өсөн түгел. Бөгөн, киреһенсә, ябай ғына, вазифаһы буйынса былай ҙа эшләргә тейешле эште бөтөн донъяға яр һалып башҡаралар, бөтөн киң мәғлүмәт саралары уны яҡтыртырға тейеш. Хатта барлыҡ кәңәшмәләргә, ултырыштарға саҡырып йөҙәтәләр. Балалар йорттарына барып, ниндәйҙер сара үткәрһәләр, һүҙ ҙә юҡ, матур күренеш булыр ине. Күпме эшләп, ундай хәлдә күргән юҡ - көнөнә әллә нисәмә саҡырыу төшә, һәр ҡайһыһын яҡтыртырға кәрәк. Хатта совет осоронда ла нимә яҙырға икәнен үҙебеҙ хәл итә инек. Бик ҡаты замандар булһа ла, беҙгә аҙым һайын күрһәтмә бирелмәне. Саҡырып тетмәкәйҙе тетә инеләр, әлбиттә, унһыҙ ҙа булмай...

▸ **Шул уҡ ваҡытта журналист юҡтан кәнфит яһарға, йәғни юҡтан да файҙалы мәғлүмәт табa белергә тейеш бит. Йәғни, әйтеп китеүебеҙсә, уйландырыр өсөн үҙ фекерен белдерергә, ниндәйҙер урында анализ эшләргә...**

- Килешәм, теләһә ниндәй сараны матур, ҡыҙыҡ итеп яҙырға, күңелһеҙ сараларҙан, матбуғат конференцияларынан, отчеттарҙан да аналитик материал эшләргә мөмкин. Үҙем барлыҡ кешенең телендә булған темаларҙы түгел, күңелһеҙ тойолған темаларҙы яратам. Журналист уны үҙе асырға, халыҡҡа ҡыҙыҡлы итеп кенә түгел, файҙалы итеп еткерергә тейеш. Әммә... Бөгөн тармаҡтағы бөтөн проблемалар бер йомғаҡҡа барып тоташа: темалар күп, талап ҙур, ләкин штатта журналистар ҙа һәм булғандарының һәр тема өҫтөндә уйланып, анализлап, фекер төйнәп яҙып ултырырға ваҡыты ла, физик мөмкинлеге лә етмәй. Әгәр коллективта 100 журналист эшләһә, улар бөтөн ергә лә өлгөрөр, тематика ла төрләнер һәм, иң мөһиме - журналистың уйланырға ваҡыты булыр ине.

▸ **Бөгөнгө көслө дәғүәселек заманында гәзит ниндәй булырға тейеш?**

- Уҡыусы, яҙылыусы ундағы мәҡәләләрҙе ҡайсы менән ҡырҡып алып һаҡларға тырышырға, йәғни гәзит уҡыусы өсөн файҙалы булырға тейеш. Әллә ниндәй хис-тойғоларығыҙ, тарихығыҙ кәрәкмәй, унын файҙаһы булһын: квитанция илдә, ҡайҙа түләргә тейешлеген, ҡайҙа алдау ихтималлы булыуын, һораУҙарҙы асыҡлау өсөн кемгә мөрәжәғәт итергә мөмкин - шул һораУҙарға яуаптар тапһын ул. Спорт тураһында мәҡәлә сыҡтымы, календарен бир. Хоккей икән, команданың ҡайҙа уйнағанын гәзит уҡыусы белеп торһон, башҡа төр икән - шул төрҙөң календарын ҡуй. Шуға гәзиттә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, иҡтисад, финанс темалары мотлаҡ булырға тейеш. Бығаса беҙҙә иҡтисад бите юҡ ине, хәҙер ойошторҙоҡ. Хаҡтар, аҡса ҡайҙа китә, аҙыҡ-түлек хаҡы һәм башҡа үҙенә мөнәсәбәте булған тема ҡыҙыҡлы уҡыусыға. Мәҫәлән, журналист йәрминкәгә бара икән, унын "Эх, тәмле бал-май, ит, йәшелсә емеш һаталар, көн матур, матур көйҙәр яңғырай, халыҡ күп һ.б." тип яҙыуы гәзит алдырыусыға кәрәкме? Киреһенсә, быйыл бал әҙерәк ҡиммәтләндеме, сәбәптәрен асыҡла, бер-ике айҙан унын хаҡы күпме буласаҡ, сифатлы балды нисек билдәләргә, бер районды балы икенсеһенән нимәһе менән айырыла - ошо турала күберәк мәғлүмәт бир. Бына ошо ҡыҙыҡ уҡыусыға һәм файҙалы ла. Ә хәҙер күбеһенсә һүҙҙәр теҙмәһе бар - файҙалы мәғлүмәт юҡ.

Тағы ла... Минең өсөн изге өс тема бар: балалар, ололар, инвалидтар. Властың барлыҡ тармаҡтары яғынан да ошо категория граждандарға ныҡыраҡ иғтибар булһын ине. Шуға, ҡарттар янына барырғамы йәки берәй икенсе сарағамы, тигән һайлау торһа, мин журналистарҙы ололар эргәһенә ебәрәм.

▸ **Ошо эшләгән йылдарығыҙҙа иң үкенгән һәм иң ҡыуанған, ғүмерлеккә хәтерегеҙҙә уйылып ҡалған ваҡиғаларығыҙҙы иҫләйһегеҙме?**

- Иң үкенеслеһе - ҡасандыр бергә эшләгән, белгән, аралашҡан коллегаларыңдың яҡты донъянын китеүе. Һәр юғалтыуҙан күңелдә яра ҡала, йөрәк һыҡрай. Ә инде ҡыуаныстарға килгәндә... Бынан 10 йыл элек гәзит ойошторолоуҙың 40 йыллығын үткәргәндә баҫманы нисек яратыуҙарын күреп ҡыуандым. Ҡала мәҙәниәт һарайында ҙур байрам үткәрҙек, артистар саҡырҙыҡ. Билдәле, абруйлы сәнғәт эшмәкәрҙәре килде, хатта милли симфоник оркестр сығыш яһаны - береһе лә "Минә түләйһегеҙме?" тип ауыҙ асманы. "Гәзитте яратабыҙ, һеҙ саҡырыуығыҙ ғына", тип торалар. Ул тамашасы күп килгәйне, зал тулы халыҡ булды. Гәзитебеҙҙең дуҫтары күп, шуныһы ҡыуандырҙы.

Тағы журналист өсөн нимәһе ҡыуаныслы: мәҡәлә яҙып, уҡыусыларҙан рәхмәт һүҙе ишетһәң - шул инде иң оло баһа!

Ҡайһы берҙә журналисҡа психотерапевт та булырға тура килә. Редакциянан кеше өҙөлмәй. Мәҫәлән, берәй әбей килә лә, баш мөхәррирҙе һорай. Индерәм, ултыртам, ул барлыҡ ғүмерен һөйләп бирә. "Апай, ниндәй проблема буйынса килдегеҙ?" - тип һораһаң: "Эй, хәҙер бер нәмә лә кәрәкмәй инде. Һөйләшергә кешем юҡ бит", - ти. Шунын кеүек, кешеләргә нисек булһа ла ярҙамың тейһә лә ҡыуаныс кисерәһең.

Журналист - ул ҡыҙыҡ профессия, хатта үҙең өсөн яңынаңы асыштар яһайһың. Бына, мәҫәлән, Өфөгә Валерий Леонтьев килде. Мин уны бөтөнләй яратмай инем: сәхнәлә үҙен тотошон да, кейемдәрен дә. Осрашып, гримеркаһында ике сәғәт һөйләшеп ултырҙыҡ. Шул тиклем аҡыллы, тәрән белемле, грамоталы, зирәк кеше - һушым китте. Телевизор аша унын аҡылы күренмәй бит. Шуныһы ла журналист уңышы, бәхете бит - күптәр яратҡан, билдәле артист менән һөйләшеп, ҙур, матур, уҡымлы әңгәмә баҫтырыу.

Тағы 1993 йылда тажик-афған сигендә ҙур низағ булып, шунда Башҡортостандың Һалдат әсәләре комитеты рәйесе Владимир Симарчук менән гуманитар ярҙам алып барып, бер ай йөрөп ҡайтыуыбыҙ, ҡамауға эләгеүебеҙ, бер аҙнаға "хәбәрһеҙ юғалыуыбыҙ" хәтерҙә ҡалған...

▸ **Һеҙ совет осоронда ла, үҙгәртеп ҡороуҙар ваҡытында ла, яңы технологиялар заманында ла матбуғат өлкәһендә эшләгән кеше булараҡ, бөгөнгө көн журналисын нисек итеп һүрәтләр инегеҙ. Ул ниндәй булырға тейеш?**

- Ниндәй генә замандар булғанда ла, журналист өсөн иң мөһиме - намыҫлылыҡ, әҙәплелек. Бына ни өсөн бөгөн журналистиканың абруйы төштө, сөнки журналистар сенсация, әшәкелек артынан ҡыуа башланы, йәғни, сифатһыҙ, "һары", башҡортса әйткәндә, ғәйбәт журналистикаһы барлыҡҡа килде. Шуға күрә кешелек йәһәтенән дә, һөнәри яҡтан да журналист намыҫлы, әҙәпле булырға тейеш.

Бер ваҡыт шулай ҡала Советында кәңәшмә бара. Президиумда ул ваҡыттағы мэр Павел Качкаев менән ҡала Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин ултыра. Мин сығыш яһайым, һәр ваҡыттағыса, аҡса һорайым. Улар миңә, тиражығыҙҙы арттырығыҙ, ти. "Беҙ галстуклы баҫма. Шуға күрә уҡыусыларыбыҙ СПИД-инфо кеүек күп түгел. Теләйһегеҙме, бер көн эсендә редакция эшмәкәрлегенең маҡсатын үҙгәртәм. Киоскыларҙа талашып алласаҡтар, тираж 10 тапҡырға артасаҡ. Әммә ул галстуклы ҡала гәзите булмаясаҡ. Һеҙгә шундай гәзит кәрәкме?" - тием. Икеһе лә көлдө. Галстуклы гәзит булып, әхлаҡһыҙ мәҡәләләр баҫтырмай, йөҙөндә һаҡлап ҡалыуы еңел түгел. Шуға күрә гәзиттең уҡыусылары әҙ, шуға күрә "галстуклы" баҫмаларға ярҙам итергә кәрәк.

Тағы ла журналист белемле, камиллыҡҡа, белемгә ынтылыусан булырға, үҙенең темаһын энәһенән-ебенәсә белергә, ә башҡа темаларҙа хәбәрҙар, яңылыҡҡа һыуһаған булырға тейеш. Шулай уҡ бөгөн мәғлүмәт күп, унын дөрөҫлөгөн әһәмиәтлеһен тотоп алыу зарур. Ошо һиҙемләү юҡ журналистарҙа. Бына беҙҙә Галина Григоренко эшләй, ул хәҙер инде 70 йәште үткән апай. Мин уны ҡарт инә бүре тием. Теманы һиҙә белә. Элекке ваҡыттарҙа, 80-се йылдарҙа Радик Абдуллин, хәҙер мәрхүм инде, шундай ине: ҡайҙа нимә була - барыһын да белеп тора. Был үҙе бер талант һәм ул һәр кемгә бирелмәй!

Журналистар күп һөйләргә ярата, әммә кеше менән эшләгәндә, киреһенсә, ҡаршыһындағы кешене тыңлай белергә тейеш. Был инде профессионализм. Юҡһа, күп осраҡта алдан әҙерләнгән һораУҙарға яуап алыу өсөн һөйләүсе һүҙ ыңғайы башҡа темаларға ла сығып китһә, журналист тиҙ генә бүлдерә лә, икенсе һорауын бирә, ул һораУҙарына яуап ала, әммә әңгәмәсе уға тулыһынса асылмай, үҙенең булмышын асып һалмай, журналист уны "уҡып" өлгөрмәй.

▸ **Бөгөн күп тираж йыйған "һары" баҫмалар күбәйә һәм улар, нигеҙҙә, шәхси баҫмалар. Ә дәүләт ҡулындағылары һәр ваҡыт күҙәтеү аҫтында, нимәлер оҡшамаһа, баҫым да яһала. Шулай ҙа бөгөн гәзиттәрҙә, ғөмүмән, киң мәғлүмәт сараларында конструктив тәнҡит бар тип әйтергә мөмкинме?**

- Ниндәй тәнҡит булһын инде! Үҙегеҙ күреп-белеп тораһығыҙ: ян-яҡтан ҡыҫалар. Шул уҡ ваҡытта, тәнҡит бит ул кемдәлер быҫратыу, күҙҙән төшөрөү йәки юҡҡа сығарыу түгел, тәнҡит - ул булған, халыҡта ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырған хатаны, етешһеҙлектәрҙе асып һалып, уны төҙәтеү кәрәклеген төптән күрһәтеү. Әммә конструктив тәнҡитләү өсөн дә журналист талантлы булырға тейеш. Тәнҡитте бит төрлө жанрҙар аша еткерергә мөмкин. Мәҫәлән, элегерәк гәзиттәрҙә фельетондар баҫыла ине. Хәҙер ҡайҙа улар? Уны бит һәр кем яҙа алмай.

▸ **Йәйләп жанрҙар проблемаһына ла килеп еттек, шикелле. Ғөмүмән, киң мәғлүмәт сараларында, бигерәк тә баҫма матбуғатта журналистика жанрҙары төрҙәре лә юҡҡа сығып бара түгелме?**

- Тотош жанрҙар системаһы һаҡланды тип әйтеп булмай, әммә ҡайһылары ҡалды. Журналистика жанрҙары араһында ауырҙары ла, еңелдәре лә бар. Шуларҙың иң ябайҙары - интервью йәки әңгәмә һәм репортаж. Ултырабыҙ, һөйләшәбеҙ, журналист үҙенә кәрәклеһен генә һығып ала ла - материал әҙер йәки барып, ниндәйҙер сараны ҡарай ҙа яҙа. Очерк яҙыуы ауыр һәм ҡатмарлы. Фельетон - бигерәк тә ауыр. Бөгөн гәзит-журналдарҙы асып ҡараһаҡ, ауыр жанрҙар бөтөнләй юҡ. Икенсе яҡтан, уларҙың кәрәге бармы икән? Гонорар алыр өсөн, ваҡ-ваҡ мәҡәләләр, репортаждар яҙыуы отошлораҡ бит. Бая журналист ниндәй булырға тейеш, тигән һорауҙы жанрҙар менән бәйләнәк, журналист - ул һөнәр түгел, ул күңел торошо, шуға күрә, күңеле ҡәнәғәтлек кисерһен өсөн кемдер ошо ауыр жанрҙар өҫтөндә лә эшләй. Шулай ҙа, дөрөҫөн әйткәндә, жанрҙар йылдан-йыл юғала бара.

▸ **"Журналистиканан аҡса әҙ тип китмәйҙәр, ә аҡса әҙ тип килмәгәндәр бар", тинегеҙ. Тимәк, унда бары тик ошо профессияға башкөллөй бирелгәндәр генә эшләй. Ә бына йәштәр араһында журналистиканы һайлаусылар күпме?**

- Йыш ҡына буласаҡ журналистарға лекция уҡырға саҡыралар. Бер шулай ВЭГУ-ға барҙым. Аудиториялағы 75 кешегә ике сәғәт буйына һөйләп тә, һорау биреп тә ҡарайым - һөҙөмтә юҡ. Ҡыҙыҡһынып тыңлау юҡ, күҙҙәрендә осҡон юҡ - буш ҡараштар.

Шулай уҡ практикаға ҡыҙҙар килә. "Кем журналист булырға теләй?" тип һорайым. Биш ҡыҙҙың береһе генә ҡул күтәрә. Башҡаларына бары тик юғары белем тураһында диплом ғына кәрәк. Ә ни өсөн журналистар уларҙы әпәүләргә, уларға ваҡытын әрәм итергә, практика осоронда өйрәтергә тейеш? Теләге булған бер кешене үҫтереү отошлораҡ. Бөгөн журналист булғым килә, тип атлығып тороусыларҙы бик күрмәйем. Ундайҙар бар, әммә бик һирәк. Күҙҙәрендә осҡон булған йәштәрҙе үҫтерергә тырышабыҙ. Беҙҙең коллективҡа килеп эләгеүе бик ауыр, әммә барыһы ла кешенең үҙенән тора. Хыялы, теләге, маҡсаты булған йәштәр бер нәмәгә ҡарамайынса эшләйәсәк.

▸ **Журналистика - ул, дөрөҫөн әйткәндә, яу яланы. Әммә бөгөн унда ысынлап та ир-егеттәр түгел, ҡатын-ҡыҙҙар күберәк, журналистика ҡатын-ҡыҙ йөҙлө. Ҡайҙа һуң беҙҙең ир-егеттәр?**

- Элек, журналистиканың һәм журналистың абруйы ҙур булғанда, был яланда ир-егеттәр күп булды. Бөгөнгө ысынбарлыҡта тәүге урында абруй түгел, аҡса тора. Журналист булып эшләп тамаҡ туймай - дөрөҫө шулай. Эйе, журналистикала баланс булырға тейеш, сөнки ҡатын-ҡыҙ ҡарашы һәм ир-ат ҡарашы бар. Ир-ат ҡарашы яҡшыраҡ, өҫтөнөрәк, тип әйтмәйем, әммә былар икеһе ике төрлө. Ҡатын-ҡыҙ барыбер ҙә хислерәк, яҙыр алдынан иң элек ғаиләһен, балаларын уйлай, ә ир-атта анализ, логика көслөрәк. Тормошта ир-ат шөғөлө һәм ҡатын-ҡыҙҙыҡы булған кеүек, журналистикала ла тик ир-ат эше һәм ҡатын-ҡыҙҙыҡы бар.

Журналистикала ғына түгел, ғөмүмән, башҡа өлкәләрҙә лә ир-аттың булмауы ҙур проблема. Ләкин журналистикаға аҡса менән ылыҡтырыу ҙа дөрөҫ түгел. Юҡһа, "һары" матбуғатҡа, заказ үтәүселәргә әүереләсәкбеҙ. Журналистика - ул күңел талабы булырға һәм журналист лайыҡлы эш хаҡы алырға тейеш.

**Шулай итеп, әңгәмәбеҙ аҙағында Вячеслав Николаевич алтын юбилейҙары уңайынан коллективына шундай теләктәр еткерҙе: "Беҙ уҡыусыларыбыҙға кәрәк! Элекке кеүек тоҡлап хаттар алмаһаҡ та, яҙалар, киләләр, ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр. Был бик күптәрҙең беҙгә ихтыяжы булыуын күрһәтә. Беҙ уларға кәрәк икән, ышанысын аҡларға, өмөт усағына ялҡын өҫтәп торорға, ҡыйын ваҡытта кешеләргә ярҙам итергә, терәк булырға һәм буласаҡ уҡыусылар тәрбиәләргә тейешбеҙ!"**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ ***Берәүһен уҙҙылар, икенсеһен. Тай ҡайҙа, тай? Тирә-яҡҡа ҡаранып алды. Йәнәшәләрендә күренмәне унһы. Һыбайлы алға уҡталғайны, аптырап китте - ҡойроҡтарын сәнсеп, тай әсәһе алдынан саба ине.***



Ул бар саҡта буш өйгә барыбер ҙә йән ингән кеүек әле. Дуҫы киткәс, донъяны шом баҫа. Ә төндәрен Шамил урын таптмай, йоҡлай алманы. Күҙен йомһа, эт йә ат баҫтыра башлай. Үҙе аңламай, нисек инде иң яратҡан хайуандарым тешләргә йә тибергә маташырға мөмкин, тип аптырай. Оҙонораҡ төштәре кинолағы кеүек сюжетлыға әйләнде. Унда ла йә эт ташлана, йә ат өҫкә менеп килә... Ҡараңғы тынлыҡты ауыр шомлоҡ баҫа, ҡайҙалыр нимәләр шытыр-шытыр килһә лә, хатта тәҙрә төбөндәге себен безелдәүе лә уны һикереп торорға мәжбүр итте. Әйтерһең, өҫтөнән генә тейер-теймәҫ самолет осоп үткән. Шунан ул һикереп тороп утты ҡабыҙҙы. Тынысланғас, яңынан һүндерҙе, тик күҙҙән ут ялҡынсыҡтары китмәне, улар ваҡ-ваҡ ҡына булып янып тора ла, киреһенсә, тертләтеп тирә-яҡҡа һибелә. Унан инде күҙҙе һытырҙай булып баҫҡан ҡараңғылыҡ ҙур йөнтәҫ бер йәнлекте хәтерләтә һәм Шамил шул йөнтәҫ тирене йыртып тағы ут ҡабыҙысҡа ынтыла. Ҡулдың "йөн" тейгән ерҙәре ҡысытып киткән кеүек була. Утты башҡаса һүндерергә ҡурҡа башлай шунан. Инде тынысландым, тиһә, өй бүрәнәһе аша кемдер һөйләшкән кеүек тойола. Берәйһе сәмәй-фәлән генә алып килә күрмәһен, уның бөтөнләй әскеһе килмәй. Әгәр бурҙар булһа? Ул тағы утты һүндерә лә, һаҡ ҡына тәҙрәнән ҡарап тора. Шулай йоҡоһоҙ йөрөп таң аттыра. Ярай, төндәрҙең ҡыҫҡа мәле.

Өсөнсө көнгә, иртәгәһен әсәһенең ун ете саҡрымда ятҡан Поляковка дауаханаһынан ҡайтырын иҫенә төшөргәс, тәүҙә шытып йомшарып бөткән картуфты әрсеп, табала ҡыҙҙырҙы. Тик барыбер тамағына аш барманы. Сәй төмләне, ауыҙы тәм тойманы. Шунан, тир сыҡһын, тип, йыйылып киткән һауыт-һабаны йыуып, өҫтәл тирәһен йыйыштырҙы, ике яҡтың да иҙәнен ялтыратып һөртөп сыҡты. Унан һарай артындағы оло баҡсаға сығып бәрәңге утап маташты. Эҫегә әлһерәп инеп ятҡайны, ҡолағына тәүҙә музыка тауышы салынды, шунан түбәлә себендәр оса башланы, улары аҡ төҫкә инеп, бәләкәй генә аттарға оҡшап китте. Тирә-яҡҡа һибелеп сабышалар. Ялдары, ҡойроҡтары елгә елберҙәгән бараҡмы ни, тегеләй-былай һуғыла. Ат тигәне шайтан балалары түгелме? Оҙоон ҡойроҡло. Шамил һикереп килеп ултырҙы. "Инәнде... шайтандар күрерлек хәлгә етсе әле." Ҡолағын ҡаплап ултырҙы, музыка тынманы. Шуныһы ҡыҙыҡ - ниндәй көй иҫенә төшә, шул моң ағыла башлай. Хет заказ буйынса тыңла. Тәүҙә рәхәт ине Шамилға, хатта ҡушылып көйләп тә ҡараны. Дәртлерәгенә бейеп тә маташты.

Тып-тын өйҙә башын һелкә-һелкә бейеп, ниҙер мығырҙап йөрөгәнендә ҡайтып инде лә әсәһе. Йыйыштырылған өйөн күреп һөйөндө, улы ла айныҡ икән. Кәйефе күтәренке. Әсәһен күргәс, Шамил бейеүенән шып туҡтаны, ҡапыл унайһыҙланып китте:

- Күршеләрҙең аҡырған музыкаһына һелкенеп, ҡайтҡаныңды ла һиҙмәй ҙә ҡалғанмын, әсәй. Иртәгә сығаралар тей инең түгелме?

- Ылау тура килгәйне, һораным да ҡайттым.

- Иртәгә үҙем Радуловты егеп барып алыр инем әле.

Радулов тигәне - һигеҙ йәшлек алашаһы инде. Етеҙ үҡ булмаһа ла, йөккә талымһыҙ уның аты. Иң яҡын дуҫы ла, йәндәше лә. Әле ҡырҙа, урманда йөрөй. Сәсеү үтте, бесәнгә йыраҡ - ыуыҙ үлән менән һыйланып ял итер, ҡоро ерҙә ятып тулар мәле уның.

Борон-борондан, Ташлыйылға ауылы урман төпкөлөндә булғас, бында йорт һайын һәр саҡ ат булды. Хәҙер генә дилбегәне рулгә алыштырыусылар күбәйҙе. Ҡолас етмәҫ бүрәнәләрҙә ле-

совоздар йә көслө-көслө айғыр-бейәләр генә һөйрәй алды. Ул саҡ йүнһеҙ ат та булманы, оҡшаманы икән, ялан ягына һаттылар. Берәйһененең аты йөк тарта алмаһа, кеше көлдөрмә был колхоз атын менән, тип оялталар ине хатта. Шул аттар араһында үҫте Шамил да. Уларҙан һис ҡурҡманы. Был тарафтарға ҡом-таштан юлдар һалынып, еңелерәк техникалар килә башлағас та, ҡайһы бер үҫмерҙәр аттан төшөп шул машина-матайҙарға ултырыуҙы хуп күргәндә лә, Шамил барыбер көнөн аттар янында үткәрҙе. Тиҫтерҙәре араһынан: "Урамдағы айғыр беҙҙе һеңгәҙәткәнсе тешләй, ә һиңә теймәйсәк ул,

Ғәйрәт ҡайһылай, һай. Ҡуҙға баҫҡанмы ни, тик тора алмай үҙе. Ҡалын ирендәрен ҡалтыратып, үҙенсә йомшаҡ, иркә генә итеп өндәшә, шунан йән тетрәткес итеп кешнәп ебәрә.

Ә бәйге көнөндә бер ни булмағандай тыныс ҡына затҡа әйләнә лә ҡуя. Ана шул ҡарсыға менән китте Поляковкаға Шамил. Бейәһе менән бергә тайы ла эйәрҙе, бикләп ҡалдырып булманы үҙен. Бөрләгән кешнәп бер булғас, алдылар үҙҙәре менән. Тегендә бәйләрҙәр әле. Поляковкаға бер көн алдан барҙылар. Бәйгегә сығыр алдынан урындағы ит комбинаты ихатаһында әлеге тайҙы кәртәгә индереп бикләп киттеләр.




әйҙә йүгәнләп, егеп бир әле", - тип килеүселәр ҙә була торғайны. Ат ҡото, ат сихыры, улай ғына түгел, арбау көсө бар ине Шамилда. Ысынлап та, тыңлашмаған уҫал айғырҙарҙы ла тыңлата ала торғайны ул. Аҡбуҙат телен аңлар өсөн Шамил кеүек ҡуш йөрәкле ир-егет һәм ат йәнле булырға кәрәк, тип ҡуя ине уның тураһында күпте күргән ағайҙар.

Леспромхоз бөткәс, арбауы ла, аламаһы ла бергә ҡушылды ла ҡуйҙы. Һис кемгә кәрәге юҡ хәҙер уның. Янында ярай ҙа дуҫтары бар, Радуловы - күңел йыуанысы. Леспромхоздан ҡалған бер ҡомартҡы унһы ла. Янған ҡомартҡы.

Ете йыл элек үҙәк һаналған Поляковкала районДың оло байрамын үткәргәйнеләр. Шунда ат сабышына Ташлыйылғанан да бер нисә атты бәйгегә сығарырға булдылар. Шамилға үҙенең эштәге Бөрләгән исемле бейәһе менән ярышырға ҡушылды. Бейә тиһәң, баһаһы төшөр, торғаны осорға әҙер ҡарсыға ине ул. Үҙе буйсан, оҙон ботло, йопйоморо бейек осалы. Иңенә менергә баҫҡыс кәрәк хатта. Тороҡ яллы, ҡарсыға түшле, тиҙәр улар хаҡында. Шамилды бик үҙ итте ул, йыраҡтан күргәс тә, ҡалын ирендәрен ҡалтыратып, яғымлы ғына өн сығара ине. Ҡатынҡыҙ затынан шул, тыйнаҡ та булды. Алдына һалған һолоно һис ҡасан түккеләмәҫ, ашығып, күнәккә тотанаҡһыҙ һонолмаҫ.

Ә бәйге тиһәң, ниндәй зат булғандыр, бер-ике көн алдан белә ине. Элек ауылда үҙ-ара ат сабыштырып толпарың менән мактаныу ғәҙәте бар ине бит. Шул ваҡыттарҙа һис һынатманы Бөрләгән. Кәртә буйлап муйынын бөгә биреп, түбән ҡарап ҡына юрта башлай, тояғынан тупраҡ-балсыҡ оса, ерҙәр һелкенеп ҡала. Ҡойроғо, әйтерһең, бейеп йөрөгән ҡыҙҙар толомо - талпынған һайын талғын ғына тирбәлә. Түше ҡайнылай бит, саҡ ҡына ҡуҙғалдымы, тарамыштары уйнап китә.

Бөрләгән тәүҙә кешнәп маташты ла, байрам яланына еткәс, тынысланды. Тик, бәйге башланып, аттар саба ғына башлағайны, әсә үҙенең балаһының еҫен тойҙомо, бер аҙ туҡтап, муйынын төрлө яҡҡа һуҙып-һуҙып оҙон итеп кешнәп ебәрҙе лә башҡа бәйгеселәр артынан төштө. Тик шунда ғына Шамил арттан баяғы тайҙы шәйләп алды. Кемдер кәртәнең ҡапҡаһын асҡанмы, әллә үҙе кәртәне һикереп сыҡҡанмы? Әсәһенә оҡшап быныһы ла көйҙәгә бейек, оҙон тояҡлы шул. Хәҙер нишләргә? Ҡалай үҙе етеҙ саба. Бында ялан районДарындағы һабантуйҙағы кеүек түңәрәкләп сабып булмай, ә күренеп ятҡан тау итәгенән барһаң да, аҙаҡ уйһыулыҡ буйлап үтеп байрам яланына килеп сығаһың. Ҡайҙан килеп тапҡан тиһең әсәһен, шильма. Бөрләгән бер саптарҙы үтеүгә, ни мөгжизә, тай ҙа ҡыуҙырып етте. Тимәк, әсәһе кеүек был да ал бирмәҫкә ынтыла. Тик финишҡа тиклем ара алыҫ бит әле. Өҙләгеп ҡуймаҫмы, тыны етерме әле быуыны ла нығынып етмәгән был мөгжизәнен? Шамил төрлө уйға батты, тик бейәһен туҡтатырға ла ҡурҡты. Ауыл намыҫы ла бар бит әле. Уйһыулыҡты үттеләр, алда тағы ике юртаҡ саба. Тай ҙа ҡалышмай, өйөрҙән ситтәрәк һаман да йәнәш килә. Үҙе арығанға оҡшамай, башын баҫып, ҡолаҡтарын ҡайсылап сабыуын белә. Бәйгелә икәнен әллә ул да самалаймы? Байрам яланы ла күренде, Бөрләгән уҡтай алға ынтылды, ситтә килгән тай әсәһенә тинләште. "Һеү, һеү, әйҙә!" - Шамил бар көсөнә бейәһенә дәрт бирергә тырышты. Берәүһен уҙҙылар, икенсеһен. Тай ҡайҙа, тай? Тирә-яҡҡа ҡаранып алды. Йәнәшәләрендә күренмәне унһы. Һыбайлы алға уҡталғайны, аптырап китте - ҡойроҡтарын сәнсеп, тай әсәһе алдынан саба ине. Финишҡа әсәле-ҡолонло бергә барып инделәр. Тамашасылар хайран ҡалып ҡул сапты, эйәр түгел, йүгән дә күрмәгән бер тай барыһын уҙ-

ып беренсе килһен әле. Мөгжизә! Халыҡ араһынан үтеп киткәс, янып ҡуймаһын, тип Шамил бейәһен артабан юрттырып алып китте. Ә тай күп тә барманы, аяҡтарын бөкләп ятырға булды. Быларға эйәреп килгән ауылдаштарына Шамил: "Ҡыуығыҙ, ҡыу, ятҡырмағыҙ, яна хәҙер", - тип лауылданы. Тай бик өркмәне, шулай ҙа тороп берике аҙым атланы ла тағы ятырға йыйынды, тағы ҡыуҙылар, тағы ла талымһыҙ ғына атланы. Шулай ятҡырмай атлатып йөрөнөләр тайҙы, нисек тә янмаһын малҡай. Эй, үҙен маҡтанылар, бер йөшлек тай шул тиклем араны үтеп, йүгерек-йүгерек саптарҙарҙы уҙып беренсе килһен әле. Киләсәге хәттәр буласаҡ, тип юранылар. Тик юрауҙары юш килмәне. Поляковканан ауылға ҡайтҡанда уҡ әсәһенең артынан көскә-көскә эйәрҙе, барҙы-барҙы ла туҡтап тирә-яҡҡа ҡаранып тик торҙо, әсәһе тауыш бирә башлаһа, иренеп кенә ҡуҙғалған булды. Шулай көс-хәл менән ҡайтып еттеләр. Ҡайтҡас та тай ятты. Ветврачтар, төрлө үләндәр эсереп, уколын ҡаҙап, бер сама аяҡҡа баҫтыра алдылар ҙа, тик осоп-уйнап йөрөгән буласаҡ толпар уйсанға әйләнде, әсәһенең кешнәү тауыштарына иғтибарһыҙ ҡала бирҙе. Күҙгә бөтөнләй биреште, өҙлөктә бахырҡай. Сабыу түгел, һөйрәлеп атларлыҡ та көсө ҡалмаған тайға күңелдәре һүрелде леспромхоз етәкселәренең. Иткә ебәрергә булғайнылар, Шамил үҙенә һатыуҙарын һораны. Йәлләне ул тайҙы. Уның һәләкәтле яҙмышында нисектер үҙендә гәйеп тә тойҙо. Шуға, бәйгеләрҙә уктай осор йүне китһә лә, иҫән булыуын теләне. Әле ул саҡта леспромхоз йәшәй ине, эшендәге уңыштары һәм бәйгеләге еңеүе өсөн Фәхретдинов Шамилды ошо тай менән бүләкләнеләр. Ат йәнле егет тайҙы тәүге йыл ентекләп ҡараны, алдынан һоло, икмәк, йәшел бесән өҙмәне, икенсе йылына осалары бер аҙ йомрайғас, күҙенә нур ҡайтҡас, тәүҙә менгегә өйрәтте, аҙаҡ тәртә араһына индерҙе. Талымһыҙ булды үҙе, һәр йомошто еренә алып барып еткерҙе, ҡайтыр юлын юғалтманы. Күрәһең, яҙмышына буйһоноуы ла шул булғандыр, юртаҡ аттарға ҡарап кешнәмәне лә, башын баҫып арба йә сана һөйрәүен белде. Шамилға уның менән рәхәт ине. Ул йәндәшкә әйләнгәйне. Исемен дә үҙе яратып ҡушты: "Радулов".

Ут үткәс, телевизор ҡарарға әүәҫләнеп алды ташлыйылғалылар. Бигерәк тә хоккейҙы яраттылар, үҙебеҙҙең "Салауат Юлаев" өсөн сәсрәп китеп көйәләр ине. Шунда иң шәп һөжүмсе булған Александр Радуловтың исемен тотто ла тайына ҡушты Шамил. Икеһенең дә даны хәтәр, икеһе лә етеҙ бит. Ана шул тыйнаҡ Радулов менән иртәгә әсәһен барып алмаҡсы ине улы.

- Машина булғас, ат арбаһында дерелдәп ҡайтҡы килмәне, - тине әсәһе. - Ниндәй яңылыҡтар бар? Ситдиҡ ағай вафат булып ҡуйған икән.

- Эйе, ҡуйҙыҡ. Күршеләргә әйтеп сығайым әле, музыкаларын баҫып ҡуйһындар, - Шамил сығырға йыйынды.

- Ниндәй музыка тей? Йә Хоҙай, бер ҡашың ҡайҙа булған? - әсәһе улының йөҙөнә ҡараны. - Күҙҙәрең дә ҡыҙарған.

- Ҡаш? - көҙгөгә ҡараған да булмағас, унынын оноҡайны әле Шамил. - Эйе, Фәнил менән ҡырҙыҡ шул. Хәҙер ну... модаһы шулай.

- Шундай мода буламы? Ҡашҡа тейгәнсе, һаҡал-мыйығыңды ҡырыр инең. Эшһеҙлектән ни эшләргә белмәйһегеҙ. Мода, имеш, - Нәзирә апай һөйләнә-һөйләнә кухня яғына үтте. Шамил ҡолағын ҡаплап тышҡа сыҡты:

- Шул тиклем аҡыртмаһалар була бит. Әйтерһең, дискотека бара!

**(Дауамы бар).**

✔ Әсәйем Хажмөхәммәт хажиға Зәйнулла ишандың килеп йөрөүҙәрен дә асыҡ хәтерләй ине. Бер килгәнендә ишандың абыстайы әсәйемә көмөш сулпы бүләк итә. Был тарихи әйберҙе бөгөн булһа ҡәҙерле ҡомартҡы итеп һаҡлайбыҙ.



ШАҢДАУ

# ВӘЛИДИ ЕҘНӘМ...

**2007 йылдың йәйендә "Йәшлек" гәзитендә Нияз Алсынбаевтың "Серле мосафир" исемле повесын уҡып, шул хаҡта әсәйемә һөйләп, үҙемә тарихыбыҙҙың бер өлөшөн асҡайным. Сөнки әсәйем тыңлап бөтөр-бөтмәҫтән, иҫе китмәй генә: "Ул Әхмәтзәки Вәлиди менең еҙнәйем ине", - тимәһенме. Ултырғыска лып ултыра төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым...**

Унан инде һораша-төпсөшә башланым. Ярай, беҙ бала саҡта Әхмәтзәки Вәлидиҙе, халыҡ дошманы, тинеләр. Уның исемен генә телгә алыусыларҙы ла тейешле органдарға саҡырып йөҙәттеләр. Ә демократия булып, Әхмәтзәки Вәлиди исемен Өфөнөң үҙәк урамдарының береһенә биреп, китаптарын башҡортса баҫтырып йәшәүебеҙгә лә байтаҡ ваҡыт үткәйне. Бына һиңә совет пропагандаһы! Башҡортостаныбыҙҙы Башҡортостан һынлы иткән юлбашсыбыҙҙың исемен беҙ, йәш быуын, ауыҙ тултырып әйтһәк тә, ололар, атай-әсәйҙәребеҙ һаман да ләм-мим булған икән. Ә повестың Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында икәнен белгәс, әсәйемдең теле асылды.

Әсәйемдең атаһы, Ағзам олатайым, ғаиләләге өсөнсө малай була. Әсәйҙәре мәрхүмә булғас, улдарын атайҙары байҙарға малайлыҡҡа бирә. Ағзам Асҡарҙағы Хажмөхәммәт хажиҙа һарыҡ көтөүсеһе булып китә. Эшһөйәр, күндәм, зирәк малайҙы үҙ улдары һымаҡ күрәләр. Егет ҡорона ингәс, Райхан исемле ҡыҙға өйләндереп, мал-тыуар биреп, үҙаллы йәшәгеҙ, тип, Рысҡужа ауылына ҡайтаралар. Йәштәр һин дә мин донъя көтөп китә. Ағзамды ауыл мәсетенең мәзине итеп ҡуялар. Йәш ғаилә үҙҙәрен кеше иткән миһырбанлы, йомарт хажи йортона йыш килеп йөрөй. Асҡарҙар ҙа яуапһыҙ ҡалмай - ныҡ аралашалар. Шуға ла Ағзамдың балалары (әсәйемдәр) хажиҙың әлдә нисә булмәле, ҙур-ҙур тәҙрәле оло өйөндә үҙ кеше булған. Хажмөхәмәт хажи ҙа, абыстайы ла әсәйемдә ейәнсәре кеүек күргән. Шуғамы икән, Бәһәмән исемле кешенең улынан ҡыҙҙың ҡолағын тешләтеп, һырға туйы ла үткәргәндәр. Ашъяулыҡҡа әсегән бал да ҡуйған булалар. Ҡурайсы ла саҡыралар. Әсәйемдең түшенә саф көмөштән эшләнгән иҙеү тағалар. "Хәҙер һин килен булдың инде, яулығыңды яҙып бәйләп йөрөргә тейешһең", - тип әйтеүҙәре була, әсәйем яулығын һыпырып сисеп бырғай, иҙеүҙе лә алып һелтәй. Иҙеү тейеп, ҡурайҙы һындыра. "Райхан торайхан, Бәһәмән төһәмән", - тип һамаҡлап тибенеп, баллы көрәгәне ауҙара...

Бер нисә йылдан илдә түңкәрелеш була. Бәһәмәндең улы Раян граждандар һуғышы осоронда һәләк була. Әсәйем 1927 йылда Үтәгәнгә килен булып төшә. Тыуған ауылы Рысҡужаға атай йортона ҡайта-китә йөрөй. Ә Асҡарҙағы оло өйгә юл ябыла - уны совет власы тартып ала, хужаларын Себергә һөргәнгә ебәрә.

Әсәйем Рысҡужаға бер ҡайтҡанында атаһының өйөндә тыуған кейемдә, йонсоу Хажмөхәммәт хажи ултырғанын күрә. Ул Рысҡужала күпме торғандыр, әммә арыуланып, хәлләнеп, ҡайҙалыр китә. Уға әсәйемдең килен булып төшкәндәге билбауын быуҙырып ебәрәләр. Әсәйем хәтерләмәй ваҡытын, әммә төшөн яҡшы иҫләй. Ул Хажмөхәммәт хажиҙың Ҡыркты тауы аша төшөп киткәнен күрә. Шул төшөн атаһына һөйләгәс, Ағзам олатайым былай ти:

- Әхирәткә китте инде, бараһы урыны йәннәттә булһын...

Әсәйем Хажмөхәммәт хажиға Зәйнулла ишандың килеп йөрөүҙәрен дә асыҡ хәтерләй ине. Бер килгәнендә ишандың абыстайы әсәйемә көмөш сулпы бүләк итә. Был тарихи әйберҙе бөгөн булһа ҡәҙерле ҡомартҡы итеп һаҡлайбыҙ.

Яҙыусы, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты Ғәлим Хисамовтың "Киске Өфө"лә баҫылған "Шаҡай бураны" романының өҙөктәре ошо онотолған ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрҙө. Рәхмәт инде Ғәлим ҡустыға. Уның әҫәре аша әсәйемдең (ул 2010 йылдың ҡышында 102 йәшендә теге донъяға күсте, һуңғы һулышынса хәтере яҡшы, иҫе теүәл булды) бала сағында инеп-сығып йөрөгән оло тарихи йорттоң бөгөн булһа имен ултырыуын белдем. Ишан хәҙрәттәре булған йортта шанлы йылдар ҡорбандары, ил азаматтары, олатай-өләсәйҙәр, һуңғы һуғыш ялҡынында ҡарала көйгән атай-әсәйҙәр рухтарына бағышлап аят-доғалар ҡылырға Аллаһы Тәғәлә насип итһен ине.

Ә Ғәлим Хисамов, үҙ асылына тоғро ҡалып, был романында ла еребеҙ, халҡыбыҙ тарихының элек бикләп тотолған биттәрен аса. Шуның өсөн уға оло рәхмәттәремде белдерәм. Киләсәктә лә офоҡтары киң һәм бейек булһын, илһам ҡанаттары талмаһын. Уның был романы яҡын арала китап булып сығып, беҙҙе тағы ла ҡыуандырыр, тип өмөтләнәм. Һәм тағы шуныһы: тарихыбыҙҙың элек бикле биттәрен асып, беҙгә әсе хәҡиҡәтте еткергән Ғәлим Хисамов Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән исемгә бик лайыҡ. Республика тормошоноң бөтә яҡтарына ла яныса, ғәҙел ҡараған башлығыбыҙ Радий Фәрит улы Хәбировтың был тәңгәлдә үҙенең тос һүҙен әйтеренә ышанып ҡалам.

**Вәсилә САДИҠОВА,**
**ағинәй, ҡобайырсы.**
**Әбйәлил районы**
**Һәйетҡол ауылы.**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЙЫР ЙЫРЛАҒАНДА...

## ихласлыҡ кәрәк

**Заман эстрадаһында үҙенең анығ ҡына йүнәлеше булғандар һирәк заманда йәшәйбеҙ. Әммә бөгөнгө ҡунағыбыҙ үҙ юлы, үҙ йүнәлеше генә түгел, ошо һуҡмаҡта йырсы булараҡ үҙ-үҙенә ҡуйған анығ талаптарына тоғролоғо менән айырылып тора. Уҡыусылар иғтибарына Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының "Карауан" эстрада төркөмө артисы, Халыҡ-ара, Бөтөн Рәсәй һәм республика конкурстары лауреаты Рөстәм ШАҺЫБАЛОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



**➔ Һеҙҙең концерттарығыҙға төрлө йәштәге тамашасы йөрөй. Улар араһында йәштәр ҙә, ололар ҙа бар. Уларҙы бер концертҡа нисек йыйһығыҙ тигән һорауға яуап, моғайын, күптәргә ҡыҙыҡтыр...**

- Һәр йырсының үҙенең йүнәлеше булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Мин концерттарҙа, мәҫәлән, халыҡ йырҙарына, шулай уҡ эстрада йырҙарын баян, ҡурайға ҡушылып йырлауға өҫтөнлөк бирәм. Профессиональ композитор йырҙары йырсыны ижади йәһәттән үҫтерә икәне лә билдәле. Тимәк, был тамашасының - йөшме ул, өлкәнме - башҡорт йырына, башҡорт эстрадаһына ҡарашы минекенә ауаздаш.

Бала саҡтан халыҡ йырҙарын, моңло йырҙар ишетеп үҫтем. Йыр, тәү сиратта, кешенең күңелен имләргә тейеш, тип иҫәпләйем. Йыр - ул доға, тип тә әйтәләр. Бында, бәлки, ниндәйҙер кимәлдә дөрөҫлөк тә барҙыр. Йырҙың темаһына, мәғәнәһенә иғтибар итәм. Икенсе яҡтан, доға әйткәндәге кеүек сәхнәлә лә ихласлыҡ кәрәк. Башҡарыуында ихласлыҡ юҡ икән, тамашасы быны яҡшы тоя. Залдан ағылған хис-тойғолар иһә артистың күңелен үҫтерә. Әйткәндәй, минең ижадымды яраткан тамашасымды быйыл да ҙур концертҡа йыйырға ниәтем бар. Ул 1 февралдә Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк. 2007 йылда бергәләп йәш "Карауан" төркөмөндә эшләй башлаған дуҫтарым - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, музыкант, йырсы Мәхмүт Нәзершин, йырсы Заһир Иҫәнсурин, шулай уҡ баянсы Айрат Вәлиев, филармонияның ҡурайсылары ла уны биҙәр, тип уйлайым. Яңы дуэттар ҙа көтөлә.

**➔ Халыҡ йырын оҫта башҡарыусыларҙың береһе булараҡ, оҙон йырҙарыбыҙҙы заманса аранжировка менән йырлауға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Һәр фекерҙең йәшәүгә хаҡы бар, тиҙәр бит. Артист үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алып, уны заманса итеп башҡара икән, башҡорт йыр сәнғәтендә былай йырҙарҙың да булырға хоҡуғы бар. Етмәһә, бөгөн яңынан-яңы музыка инструменттары, тимәк, мөмкинлектәр ҙә күбәйә. Үҙем дә "Ильяс"ты заманса эшкәртеүҙә йырлайым, унда ҡыл ҡумыҙ ҙа ҡулланыла. Тамашасы бик һыҡай тойғолар менән ҡабул итә.

Ғөмүмән, халыҡ йырын репертуарға индергәндә, бик һаҡ булыға кәрәк. Ә аранжировка яһалған йырҙарға килгәндә, минеңсә, был мәсьәләлә ҡайһы бер нәмәләрҙе үҙең өсөн ҡағиҙә итеп аныҡна һалырға кәрәк. Беренсенән һәм иң мөһиме - йырҙың көйө боҙолмаһын. Башҡорт халыҡ йыры үҙенең юғарылығын - моңон, бөгөлдәрен, аһәнен һаҡларға тейеш. Ҡайһы берҙә аранжировкаланғандан һуң көйҙөң үҙгәреүен ишетеп, аптырап китәһең. Йәғни, заманса аранжировкаға һалыу йырҙы еңелерәк башҡарырға мөмкинлек бирә тип аңларға кәрәкмәй. Көй заманса мөмкинлектәрҙе ҡулланыу һөҙөмтәһендә яҡшыраҡ, байыраҡ яңғыраш алырға ғына тейеш. Икенсенән, бында эшкәртелгән йырҙарҙы тотонғансы, йырсы халыҡ йырын борон нисек башҡарғандар, шулай уҡ тәбиғи итеп йырлай белергә тейеш.

**➔ Күп йырҙарығыҙ, ғөмүмән, ижадығыҙ кешелек өсөн иң мөҡәддәс тойғоларҙы данлауға нигеҙләнгән. Донъяның асылында һөйөү - гүзәл затҡа ғына түгел, Тыуған ереңә, илеңә, ата-әсәйеңә, халҡыңа - ята тигән инаныу менән йәшәйһегеҙме?**

- Донъяны матурлыҡтан бигерәк, һөйөү биҙәй. Һөйөү бар башланғысы бит. Беҙҙең халҡыбыҙ рухы менән азат, күңеле менән шағир булған. Ул донъяға ла һөйөү менән баҡҡан. Халыҡ йырҙарын ихласлыҡ менән күңел һалып тыңлағыҙ әле - уларҙа ошоно раҫлаған күпме матур үрнәк бар! Яраткан кешеһенә тойғоларын белдереү өсөн ниндәй нескә сағыштырыуҙар ҡулланғандар.

Тормошобоҙҙа изгелек, яҡшылыҡ, күңел йылылығы күберәк булһа, йәшәүе лә еңелерәк бит. Сәхнәгә сығып йыр йырлауы еңел түгел ул, һин унда ни өсөн сыҡҡаныңды аңларға тейешһең. Эйе, бөгөн концерттарҙа тамашасы уның сценарийына ла, биҙәлешенә лә ныҡ иғтибар итә. Тик һин сәхнәне күпме генә биҙәмә, ул барыбер һине нимә тураһында йырлап тороуыңа ҡарап баһалай. Ул тамашанан асылына ҡайтып, рухи күтәрелеш кисереп сығырға теләй. Шуға ла минең йырҙарым быға ниндәйҙер өлөш индерһә, йырсы һәм кеше булараҡ, бик бәхетле буласаҡмын.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ Бер кемдең дә ғәзиз балаһын ут эсенә ебәргеһе килеп тормай. Һуңғы йылдарҙа ана шундай ҡоралллы конфликттар булған ергә фәҡәт контракт нигеҙендә хеҙмәт иткәндәрҙе генә алыу дөрөҫ, тип уйлайым.



ИНТЕРНЕТТАН



# НИНДӘЙ АТАЙ БУЛЫРЫ...

## йөҙгә яҙыла

■ Һимереүҙең төрлө типтары була - кемдеңдер биленә, кемдеңдер аяғына, янбашына май күберәк йыйыла. Лондон колледжы белгестәре билдәләүенсә, билдәге артыҡ май баш мейеһе торошо менән бәйле икән. Бил йыуаныраҡ булған һайын, мейенең ҡайһы бер өлөштәре кәмей. Тап ошо өлөштәр күп фукнцияларға, мәҫәлән, эске ағзалар эшмәкәрлегенә яуаплы. Һимеҙлек менән яфаланыусылар еҫтәрҙе лә насар айыра. Ә кеше ризыҡты күпселек еҫенә ҡарап һайлай.

■ Бала уң ҡолағы менән ишеткәнде яҡшыраҡ аңлай һәм хәтерендә ҡалдыра, был ғалимдар тарафынан күптән дәлилләнгән. Әммә өлкәнәйгәс тә был өҫтөнлөк һаҡланамы? Уң ҡолаҡ аша ингән тауыштар баш мейеһенең һул яҡ ярымшары тарафынан эшкәртелә. Ә был өлөш телмәр һәм хәтер менән бәйле. Һәр ҡолаҡ мәғлүмәттең айырым өлөштәрен ишетә һәм һуңынан улар ишетеү системаһында берләштерелә. Тик бәләкәй балаларҙың ишетеү системаһы ике ҡолаҡҡа ла бер юлы ишетелгән мәғлүмәтте айыра алмай. Шуға ла улар уң ҡолағы менән яҡшыраҡ ишетә. Һынауҙар күрһәтеүенсә, өлкәндәрҙә лә был һәләт һаҡлана, тик улар быны менән ҡулланыуҙы онота.

■ Йоҡлар алдынан спорт менән шөғөлләнергә яраймы? Төндә насар йоҡлаһаң, мотлаҡ, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-тың Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Күңел болғанғанда, мускулдар һыҙлағанда имбир файҙалы. Ул ҡандағы шәкәр кимәлен дә түбәнәйтә, аш һеңдереүгә булышлыҡ итә. Имбирҙе Азия илдәрендә ит, балыҡ ризыҡтарына ла, сәйгә лә өҫтәйҙәр. Гингерол - төп биологик әүҙем матдә имбиргә файҙалы сифаттар өҫтәй. Яман шештең ҡайһы бер формаларын имбир менән дауалап була. Бигерәк ашҡаҙан аҫты, һөт биҙҙәре яман шешен булдырмау өсөн имбир ҡулланырға кәңәш итәләр. Был тәмләткес респираторлы инфекцияларға ҡаршы көрәшә.

■ Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери үткәргән һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ тәү күреүҙә үк ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән. Был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

ХӘТЕРКИТАП

**Ошо арала илле йәшен тултырған Афған һуғышы ветераны, "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены һәм башҡа күп Афған, Совет һәм Рәсәй миҙалдары кавалеры Мансур Рафаэль улы ХӘЛИТОВ хаҡында һүҙем. Баймаҡ районы Байым ауылында урта мәктәпте тамамлағас, Өфө урман хужалығы техникумында уҡып, урман белгесе һөнәренә эйә булған был егетте 1987 йылдың яҙында Совет Армияһы сафына алалар. Таджик - Афған сик буйында урынлашҡан частарҙың береһендә өс ай әҙерлек үткәндән һуң, әлененән-әле Афғанстан территорияһына сығып, командованиеның һәр төрлө махсус заданиеларын үтәү бурысы ҡуйылған Десант-штурмлау төркөмө составында хеҙмәт итә башлай. Әллә күпме операцияларҙа ҡатнашып, бына шул сит ерҙә ғүмере буйына етерлек сынығыу ала ла инде әле егерме йәше лә тулмаған егет… Һуғыш тураһында бөтөнләй һөйләргә яратмаған, әҙәпле, шул уҡ ваҡытта юморға ла бай был кешегә "Афған һуғышы мәлендә ныҡ хәтерҙә ҡалырлыҡ ваҡиғалар ҙа булғандыр ул?" тигән һорауымды бирәм ҡайсаҡ. Минең, яҙыусы булараҡ, унан һуғыш эпизодын һөйләтеп алыу теләгемде лә яҡшы белеүенә ҡарамаҫтан, етеҙ генә итеп һүҙҙе икенсегә бороусан ул. Һәр таш араһынан тиерлек үлемесле пулялар яуған Афған ерен, яу ҡырын, иптәштәренең үлемен ҡабаттан күҙ алдына килтереп, улар хаҡында һөйләргә ысынлап та яратмаған, аҙ һүҙле был яҡташымды шулай ҙа нығыраҡ итеп "ҡапшап" ҡарарға булдым. Афған һуғышы тамамланыуға утыҙ йыл тулып килгән уңайҙы тура килтереп, бер талай һорауҙарымды ла биреп ташланым.**

# АФҒАНҒА БАРЫРҒА...

## бурыслы инекме?

➔ **Мансур Рафаэль улы, ун һигеҙ-егерме йәшлек мәлеңдә Афғанстанда һин үҙеңдең интернациональ бурысыңды үтәнем, тип һанайһыңмы, әллә әрмеләге "приказ не обсуждают, а выполняют", тигән принцип менән генә һуғыштыңмы?**

- Башҡа меңәрләгән иптәштәрем менән берлектә үҙҙәрен "Демократик республика" тип иғлан иткән Афған хөкүмәтенә ярҙам иттем, тип һанайым шулай ҙа. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең Советтар Союзы сигенең именлеген тәьмин итеүҙә лә беҙҙең өлөш булғандыр. Ә инде бойороҡҡа килгәндә, уны ысынлап та бәхәскә ҡуйырға ярамағанлыҡты һәр һалдат белә.

➔ **Хаталанмаһам, ҡасандыр бер заман "Беҙ унда саҡырылмаған ҡунаҡтар булдыҡ", тигән һымағыраҡ фекерҙә инең?..**

- Эйе, әммә әрменән ҡайтҡанда улай тип фекерләмәй инем әле. Тик илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороу, "демократия", "асыҡлыҡ", "плюрализм" тигән нәмәләр башланғас, үҙебеҙҙең үк кешеләребеҙ, айырыуса, һәр төрлө киң мәғлүмәт саралары беҙҙе - Афғанда һуғышҡан яугирҙарҙы ана шул илдең "баҫып алыусылары" тип бөтә донъяға иғлан иттеләр бит инде. "Заман башҡа - заң башҡа", тигәндәй, шул мәлдә күптәребеҙ хатта быға ышана биреп тә ҡуйғайныҡ. Мин дә "Әллә беҙ бушҡа ҡан ҡойғанбыҙмы", тип бер аҙ икеләнә биреп ҡуйғайным. Әммә бөгөн шул ваҡытҡа оҡшашыраҡ ситуация Сирияла килеп сыҡҡас, башҡасараҡ фекерләйем. Беҙ Афғанстанда юҡҡа булмағанбыҙҙыр, тип уйлайым. Бәлки, илебеҙҙең йәнәшәһендә Ҡушма Штаттарҙың үҙ базаларын ҡуйыуына тап беҙ кәртә булып торғанбыҙҙыр. Ил масштабынан сығып фекерләһәң - бына шулай. Тик балаһын әрме хеҙмәтенә оҙатҡан ата-әсә күҙлегенән сығып ҡарағанда, бер кемдең дә ғәзиз балаһын ут эсенә ебәргеһе килеп тормай. Һуңғы йылдарҙа ана шундай ҡоралллы конфликттар булған ергә фәҡәт контракт нигеҙендә хеҙмәт иткәндәрҙе генә алыу дөрөҫ, тип уйлайым. Ә Афғанстан ерендә, унан Чечняла саҡырылыш буйынса хеҙмәт иткән тиҫтәләгән мең йәш егеттең ғүмере өҙөлөүе бик йәл.

➔ **Элегерәк, Бөйөк Ватан һуғышында ябай һалдат булып хеҙмәт иткән бер ағайға "Һуғыш мәлендә һалдатты ниндәй мәсьәлә нығыраҡ борсой ине, тиҙерәк дошмандарҙы еңеп ҡайтыу теләгеме, әллә нисек тере ҡалыу ҡайғыһымы?" тип һорағас, ул: "Һуғышта һалдаттың иң ҙур хыялы - нисек туйғансы ашарға ла, нисек күберәк йоҡларға", - тип, минең өсөн көтөлмәгәнсә яуап биргәйне. Һин ошондай һорауға нисегерәк итеп яуап бирер инең?**

- Һуғыш булғас, төрлө мәлдәр була. Былдай аныҡ һорауға аныҡ яуап биреү ауыр. Ул ашау, йоҡлау проблемаһымы, дошманды еңеү хаҡында уйланыумы, әммә Тыуған иленә, атай-әсәйенә, туғандарына тере, иҫән-һау килеш ҡайтыу теләге бер ҡасан да баштан сыҡмай инде ул. Кемдәребеҙгә Аллаһы Тәғәлә тере ҡайтырға яҙған - ҡайтып та килдек. Бәғзе иптәштәребеҙҙе цинк табутында ла оҙаттыҡ. Улар ҙа, әлбиттә, тере ҡайтырға хыялланған кешеләр ине...

➔ **Һуғыш тураһында һөйләргә яратып етмәгәнеңде беләм, шулай булыуға ҡарамаҫтан, гәзит уҡыусыларыбыҙ өсөн берәй генә булһа ла эпизод һөйлә әле.**

- Сираттағы заданиеға бойороҡ алғас, Афғанстан территорияһында алдан әҙерләнеп ҡуйған майҙансыҡҡа вертолет менән килеп төштөк һәм, өйрәнгән буйынса, автоматтарыбыҙҙы әҙер тотоп, тирә-яҡҡа һирпелеп ята ба-

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# МЫШАР ТУРҒАЙЫ

**Беҙ ҡоштарҙың һыуыҡ көндәр етеү менән йылы яҡҡа "тайыуына" бала саҡтан уҡ күнегеп бөткәнбеҙ, буғай. Ә бына, киреһенсә, беҙгә ҡышлауға осоп килеүсе ҡоштар тураһында артыҡ уйлап та бирмәйбеҙ, шикелле. Ошондай ҡоштарҙың береһе - мышар турғайы. Ул күберәген ылыҫлы, ҡайһы ваҡыт ҡатнаш урмандарҙа көн күрә. Был ҡош беҙҙә йәшәмәй, беҙгә ул ҡышларға ғына осоп килә.**



Мышар турғайына исем хатта ҡулай ҡушылған. Урыҫса исеме уның һайрауына бәйле. Әгәр ситтән тыңлап торһаң, был төркөмдән һәр ваҡыт туҡтауһыҙ нәҙекәсе һыҙғырыу шауы (свистеть йәки свиристеть була инде) ишетелеп тора. Шуға күрә был ҡошҡа свиристель исеме бирелгән. Ә башҡортса исеме мышар ағасына (икенсе исеме - миләш) бәйле. Исем бушҡа бирелмәгән, был ҡоштоң төп аҙығы булып мышар емештәре тора. Әгәр көн иткән төбәктә миләш унды икән, был ҡоштар күсеп-күсенеп йөрөмәй. Әммә миләштең уңмауы ла бар бит әле. Был саҡта мышар турғайҙары аҙыҡ эҙләп, күсенеп йөрөй башлайҙар. Шуға күрә ҡышлау осороноң төп төбәге юҡ - таптылар, ашанылар һәм артабан осоп киттеләр. Ошо эҙләнеүҙәр мәлендә улар беҙҙең республикаға ла килеп сығалар.

Беҙҙә йәшәмәһә лә мышар турғайын таныуы еңел. Ул башҡаларҙан айырылып тора - уның башында кәүҙәһенә һылашып ҡына торған матур ғына өлпәйе бар. Кәүҙәһе лә әллә ни ҙур түгел. Уҙа барһа, сыйырсыҡтан әҙ генә ҙурыраҡтыр. Әгәр ҡыш көнө һеҙҙең баҡсаны әсе һыҙғырып, өлпәйле ҡоштар баҫып алды икән, тимәк, ышаныслы итеп, был ҡоштар мышар турғайҙары, тип әйтергә була.

Ә шулай ҙа мышар турғайы миләш кенә ашамай. Йыйылмай ҡалған ҡарағат булһынмы, алма-груша булһынмы, йөҙөм, гөлйемеш һәм башҡаһы булһынмы - барыһын да ашай мышар турғайы. Шуныһы үҙенсәлекле. Был ҡош бер ашағанда аҙыҡты күпләп ашамай. Бер емеште өҙөп ала, ҡаба, йота һәм ултыра күҙҙәрен йомоп, ошо бер генә емеште эшкәртеп. Ваҡыты менән алабарман йәш ҡоштар самаһыҙ күп ашап ташлай һәм

✓ *Әлбиттә, булды. Миәкә районынан Илһам Әхмәтшин, Тәтешленән Фәүзән Бәҙретдинов, Баймаҡ районынан Исрафил, Ғәлимйән исемле егеттәр. Гәзитебеҙгә биргән бына ошо интервьюнан файҙаланып, уларға сәләмемде лә әйтәм.*



шланыҡ. Шул мәл яҡында ғына шартлау яңғыраны. Минометтан аталар буғай. Тик ҡайҙан атҡандарын белеү бөтөнләй мөмкин түгел. Быны шул шартлауҙа старшина Иван Рахмановтың ҡаты яраланғанын күреп, тейешенсә тәүге ярҙам күрһәтеп, йәһәт кенә вертолетҡа тейәнек. Старшина тейәлгән вертолетты оҙатып та өлгөрҙөк, яҡында тағы бер мина ярылды. Был юлы командир менән замполит ергә йығылды. Тик шунда ғына беҙ вертолет төшәсәк майҙансыҡтың "дошмандар" тарафынан миналанғанлығына төшөндөк. Аҙым һайын тиерлек күмеп ҡуйылған "противопехотный" миналарҙы зарарһыҙландырыу буйынса саперҙарыбыҙ эш башланы. "Миноискатель" ярҙамында егермегә яҡын мина таптылар. Беҙҙең кеүек ергә һырынып ятҡан бер егеттең аҫтынан да ниндәйҙер мөғжизә менән шартламаған бер мина табылды. Аллаһы Тәғәлә был һалдатҡа артабан да йәшәргә яҙған икән... Күпмелер ваҡыттан сапер егеттәрҙең мина эҙләй торған приборҙарының батареяһы "ултырҙы", һәм улар, остарында тимер сым булған "щупь" ярҙамында эҙләүҙәрен артабан дауам итте. Әммә береһенең әлеге тимер һәрмәүесе төртөлөп, йәнә бер минаны шартлатты, һөҙөмтәлә ике сапер ергә йығылды... Иң тәү яра алған старшинаның йәрәхәте үлемесле булған икән, уның үлем хәбәрен һуңынан ишеттек. Бындай хәлдәрҙә иҫкә алып һөйләүе еңел түгел, ғәфү итегеҙ...

**➔ Йәшерәк ваҡытымда яугирҙарға ошо һорауымды ла бирергә ярата торғайным: "Һуғыш мәлендә ҡурҡынысмы?"**

-Баштараҡ һәм аҙаҡтараҡ - ҡурҡыныс. Тәүҙәрәк, яу ҡырына яңы килгән, әле өйрәнеп етмәгән мәлдәрҙә "Юҡ, мин ҡурҡманым", тип әйтһәң, әлбиттә, дөрөҫлөккә тап килеп етеңкерәмәҫ. Был - тәбиғи. Һәр тере йән эйәһендә булған һымаҡ, әҙәм балаһының да "үҙһаҡлау инстинкты" тигән нәмәһе була. Ә шулай ҙа, дөрөҫөн генә әйткәндә, кеше ана шундай ситуацияларға ла өйрәнеп китә икән ул. Торабара, ысынлап та, ауыр ғына операцияларҙа ҡатнашырға тура килде. Хатта "үлем" тигән нәмәне онотоп киткән саҡтар ҙа булманы түгел... Ә бына илгә ҡайтыр мәл яҡынлаша башлағас, ысынлап та - ҡурҡыныс. Өйҙә зар-интизар булып, "ут йотоп" һине көтөп ултырған атайың һәм әсәйеңде йышыраҡ иҫкә алаһың. Уларға үҙеңде тере генә килеш алып ҡайтып күрһәтеү теләге менән янаһың. "Аҙаҡтараҡ - ҡурҡыныс" тигәнемдә тик ана шулай итеп аңлатып бирә алам.

**➔ Сибай ҡалаһында Булат Мөхәмәтдинов исемле яугир-интернационалист йәшәй. Ҡыҫҡа ғына хикәйәләр ҙә ижад итә. Уның урыҫ телендә яҙылған бер хикәйәһе "Зависть" тип атала. Дүрт һөйләмдән торған бындай бәләкәй хикәйәне ғүмеремдә тәүге мәртәбә уҡырға тура килде. Уны хатта ятлап та алдым. Бер китабында нәшер ителгән был хикәйәһенең тәржемәһе ошолай: "Яралыларҙы тейәп алған ике вертолетты илгә оҙатып, һуғыш булмаған ергә осоп киткән иптәштәргә ҡарап, көнләшеп тороп ҡалдыҡ. Артабан "Патрондарҙы йәлләмәҫкә", тигән команда аҫтындағы атыш, гөрһөлдәүҙәрҙән бар яҙғы тәбиғәт төтөн араһына күмелеп, йәшенгәндәй булды. Һуғыш тынып, тирә-яҡ һил булғас та, әлеге ике вертолеттың тау артында янып төшкәне хаҡында белдек. Тик хәҙер инде бер кем дә ундағыларҙан көнләшмәне..." Ошо хикәйә хаҡында нимә әйтер инең?**

- Алдараҡ һөйләп киткән, үҙем менән булған хәлгә ифрат та оҡшаш хикәйә. Ҡыҫҡа, әммә йөкмәткеле итеп яҙылған. Эйе, кемдең генә тыуған илгә тере ҡайтҡыһы килмәһен. Үҙең тере булған хәлдә лә, иптәштәреңде һуңғы юлға оҙатыу бик ауыр. Уларҙың да һәр береһенең өйөндә яҡындары, ҡәҙерләләре көтөп тора. Ҡайҙалыр сит ергә алып барып үлтертһендәр өсөн үҫтермәгән бит улар улдарын. Үлгәндәргә ҡарап, тап ана шул хикәйә авторы һымаҡ фекер итеп, ә үҙеңдең әлегә тере булғаның өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп, артабан да хеҙмәтеңдә дауам итәһең инде.

**➔ Тыныс шарттарҙағы әрме хеҙмәтендә "дедовщина" тигән күренеш әленән-әле ишетелгеләп тора. Ә һуғыш мәлендә бындай нәмә менән булышыусылар булмағандыр ул?..**

- Ундай нәмә менән булышыусылар һуғыш мәлендә булманы. Бәлки, хатта, киреһенсәләр, йәшерәктәрҙе аңһыҙыраҡ ҡылыҡтарҙан ҡурсалап алып йөрөүҙе, уларҙы һуғыш нескәлектәренә өйрәтеүҙе олораҡтар үҙҙәренең бурысы итеп һанай ине.

**➔ Бергә хеҙмәт иткән яҡташтар ҙа булғандыр? Ҡайһы райондарҙан инеләр? Әрме сафына алыныусы йәштәргә, ғөмүмән, яҡташтарыбыҙға ниндәй теләктәр әйтер инең?**

- Әлбиттә, булды. Миәкә районынан Илһам Әхмәтшин, Тәтешленән Фәүзән Бәҙретдинов, Баймаҡ районынан Исрафил, Ғәлимйән исемле егеттәр. Гәзитебеҙгә биргән бына ошо интервьюнан файҙаланып, уларға сәләмемде лә әйтергә теләгем бар. Аллаһы Тәғәлә уларға ныҡлы иман, артабанғы тормошонда һәр саҡ аяҙ күк йөҙө, тыныслыҡ насип итһен! Әле быйыл, 28-се майҙа, Баймаҡ ҡалаһында көтөлмәгән бер ҡыҙыҡ осрашыу ҙа булып алды. Сик һаҡсыларына мемориаль таҡтаташ асыу сараһы мәлендә Татлыбай ауылынан Айбулат исемле егет мине килеп таныны. Мин "дембел"гә ҡайтырға йөрөгәндә ул әле генә учебкаға килгән булған икән. Шул саҡ, уны - йәш һалдатты ашханаға алып инеп, туйҙырғанса һыйлап сығарғанмын. Ана шуны утыҙ йыл буйы хәтерләй Айбулат ҡусты... Әрме сафына алынасаҡ йәштәргә: "Старик" булып алғас та, һауаланып, әллә кем булып йөрөмәгеҙ, часығыҙға килгән яҡташтарығыҙҙы һәр саҡ таба һалып, улар менән танышып, хәлегеҙҙән килгәнсе ярҙам итеп, бер-берегеҙҙе яҡлашып йөрөгөҙ", - тип әйтер инем.

**Әйткәндәй, йәнен-тәнен аямай, совет хөкүмәтенең бойороғон үтәп, ут эсенән тере сығып, илгә ҡайтып, йәшәү ҡәҙерен белгән был яугир-интернационалист хәҙерге көндә күп кенә йәштәргә үрнәк булырлыҡ итеп тормош көтә. Хәләл ефете Раушания менән татыу ғаиләлә дүрт бала үҫтереп, утыҙ йылға яҡын тыуған ауылында ғүмер итә. Аҙбар тулы мал-тыуарына, ихата тулы ауыл хужалығы техникаһына ҡарап, был тулы ғаиләлә эшһөйәр кешеләр йәшәгәнен аңлау ҡыйын түгел. Бына ошо өлгөлө ғаиләгә Аллаһы Тәғәләнән иман байлығы, һаулыҡ, бәхет насип итеүен һорайым.**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ әңгәмәләште.**

шунда уҡ ғүмерлек һабаҡ ала. Ҡапылдан мул ашалған туң емештәр бер мәл ашҡаҙанда әсеп китә. Һөҙөмтәлә йәш ҡоштар иҫерә башлай. Эштең айышына төшөнә алмай этләнеп бер булалар улар - йә ағастан ҡолап төшәләр, йә оса алмай бер булалар, йә осоп барышлай ағасҡа һуғылалар һәм башҡаһы. Өлкәндәре, моғайын, был хәл беҙҙең дә баштан үтте, тип көлөп ултыраларҙыр инде. Ә һабаҡ алған йәш ҡоштар ҡабат был хатаны ҡабатламай. Киләсәктә улар ҙа туңған емеште бары тик берәмләп-сүпләп кенә ашап ултырасаҡ. Шуныһы үҙенсәлекле - был ҡоштар ергә өҙөлөп төшкән емеште ашамай, бары тик ботаҡта булғанын ғына өҙөп алып ашай.

Әйткәндәй, мышар турғайы, нишләптер, кешенән артыҡ ҡурҡып бармай. Уға мөмкин тиклем яҡынларға һәм бар матурлығын сағылдырған аныҡ фотоға төшөрөп алырға була.

**Әглəм ШӘРИПОВ, биология фәндәре докторы. Бөрйән районы.**

*ҺЫЙЛАМАҒА...*

# ҮҘЕБЕҘСӘ!

**Беҙҙең халыҡтың ниндәйҙер экзотик салаттарға иҫе китеп бармай, уға ит, картуф, йәшелсә-емеш, һөт аҙыҡтары мөһимерәк. Ошоно күҙ уңында тотоп, иттән әҙерләнгән аш-һыу рецептары тәҡдим итәбеҙ.**

## Башҡортса ит

Был үҙенсәлекле һәм тәмле ашамлыҡ. Һарыҡ йәки башмаҡ ите әҙер булғас, һурпала бәрәңге менән кишерҙе бешерергә. Иттең һөйәклерәк булыуы яҡшы, ә йәшелсәләр ныҡ эре лә һәм артыҡ ваҡ та булмаҫҡа тейеш. Ит һәм йәшелсәләр бешкән арала йомортҡа, тоҙ ҡушып, ҡамыр баҫырға. Ҡамырҙы йоҡа ғына итеп йәйгәс, өҫтөн көнбағыш майы менән майлап, йәшел тәмләткестәр һибергә. Уны ипләп кенә төрөп, бәләкәй рулеттар итеп ҡырҡҡас, иттең һурпаһында бешереп алырға. Ҙур йәлпәк тәрилкәгә өлөштәргә бүленгән итте, уның өҫтөнә йәшелсә һәм рулеттарҙы һалырға ла, йәшел һуған һибергә. Ашамлыҡ янына һәр кемгә айырым тәрилкәлә ҡоротло һурпа бирелә.

## Өфөсә ит

Һарыҡ итен бешерергә. Он, йомортҡа һәм һыуҙан ҡамыр баҫырға. Йоҡаҡ ҡына итеп йәйелгән һалмаға аҡ майҙа ҡыҙҙырылған кишер менән һуған һалып, тоҙ һәм борос һибеп төрөргә лә парҙа бешереп алырға. Киҫәктәргә бүленгән ит менән бәләкәй өлөштәргә ҡырҡылған рулетты тәрилкәгә һалып, өҫтөнә һурпа ҡойоп, табынға бирергә.

## Борсаҡлы һурпа

Һыйыр итен оҙаҡ итеп бешерергә. Иттең һөйәкле булыуы ашты һөҙлөклө итәсәк. Ит бешкән арала һуған менән кишерҙе ваҡ ҡына итеп турап, майҙа ҡыҙҙырырға, томат пастаһы йәки помидор ҡушып, тағы ла утта тотоп алырға. Он, йомортҡа, тоҙ һәм һыуҙан ҡамыр баҫып, туҡмас ҡырҡырға. Ит бешер алдынан ғына ике устай фасоль һалып ебәрергә. Һуңынан һурпаға ҡыҙҙырылған йәшелсәләрҙе һәм туҡмасты һалып, бер минуттай ғына бешерергә. Аш үҙенең быуына томаланып, 5-7 минуттай торорға тейеш. Ваҡ ҡына итеп ҡырҡылған йәшел тәмләткестәр һалып ебәрергә була.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Иман йәшлекте ҡайтара

Ысынлап та, имандың кешене тынысландырыу ғына түгел, йәшәреү процесына йоғонто яһауы тураһында мәғлүмәттәр бик күп. Дьюк университеты үткәргән тиҫтәләрсә тәжрибә лә был ҡарашты раҫлай. Уның һөҙөмтәләренән күренеүенсә, инвалидтарҙың һәм хроник сирлеләрҙең дини инанысы уларҙың депрессиянан сығыу тиҙлегенә тәьҫир итә. Тикшереүселәрҙең отчеты, "дини инаныстың һәм рухиәттең юғары булыуы тормошҡа оптимистик ҡараштың көслө, йәмғиәт тарафынан яҡлауға етди өмөттәр, стресҡа нығыраҡ ҡаршы тороу, хәүефлелектең түбән булыуы менән күҙалланауын", билдәләй. Тиҫтә йылдар буйына донъя күргән мәҡәләләргә күҙәтеү яһау диндарлыҡты тикшереүҙең 83 процентында кешеләрҙең физик сәләмәт булыуын асыҡлай. Анализ күрһәтеүенсә, тикшеренеүҙәрҙең 92 процентында ойошҡан дин рухи сәләмәтлек өсөн ыңғай йоғонто яһай.

Бынан тыш, диндарҙарҙың иммун системаһы яҡшыраҡ эшләй. Ғалимдар даими рәүештә сиркәүгә йөрөгән һәм йөрөмәгәндәрҙең иммун күҙәнәктәрен тикшерә. Йөрөмәүселәрҙең күҙәнәктәрендә йәш буйынса осраған ауырыуҙарҙың киң спектрына бәйле иммунопротеин-интерлейкин-6-ның юғары күләмдә булыуы асыҡлана.

## Доға көсө

Шундай тикшеренеүҙәрҙең иң билдәләренең береһе доға көсөн һынау була. Тәжрибә доктор Рэндольф Берд тарафынан Сан-Францисколағы дөйөм профилле дауахананың йөрәк бүлексәһендә үткәрелә. Берд 393 пациентты ике төркөмгә бүлә: уларҙың береһенең сәләмәтлеге өсөн бөтөнләй сит кешеләр доға уҡырға тейеш була, икенсеһенә берәү ҙә доға уҡымай (пациенттар үҙҙәре инндәй төркөмдә икәнлектәрен белмәй). Һөҙөмтәләр бер кем дә доға уҡымаған пациенттарҙың төп сирҙәренә бәйле өҙлөгөүҙәр ике тапҡыр самаһына күберәк булыуын күрһәтә.

Әммә хәҙер башҡа бик күп тәжрибәләр, сәләмәтлектәре өсөн кемдер ситтән доға уҡыған кешеләр һаулыҡтары менән маҡтана ала, тигән һығымта эшләргә мөмкинлек бирмәй. Бынан тыш, диндарлыҡ һәм яҡшы сәләмәтлек араһында бәйләнеш булыуын күрһәткән тикшеренеүҙәрҙең бер өлөшө методиканы боҙоу арҡаһында ғилми берлек тарафынан инҡар ителә. Колумбия университетының бихевиораль медицина профессоры, доктор Ричард Слоан, динде дауалау сараһы итеп тәҡдим итеү әхлаҡ күҙлегенән ҡарағанда бик ауыр, тип билдәләй. Ул: "Пациентҡа, диндарлыҡ яҡшы сәләмәтлеккә бәйле, тиһәгеҙ, насар сәләмәтлектең динһеҙлек һөҙөмтәһе булыуын уйлайһығыҙ һәм күҙаллайһығыҙ", - ти.

Диндең дауалау сараһы булмауын дини лидерҙар үҙҙәре лә тәнҡитләй. Слоан иһә киң мәғлүмәт сараларының диндарлыҡтың сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһаған һөҙөмтәләрен генә яҡтыртыуын, ә кире һөҙөмтәләргә күҙ йомоуын билдәләй.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 28 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 28 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ланцет". [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "Познер". [16+]
1.05 Т/с "Безопасность". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Безопасность". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.10 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Другие". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 Новости (на баш. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Дом на дюнах". [0+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Последнее море Чингисхана". [12+]**
**3.45 Д/ф "По волнам моей памяти". [12+]**
**4.15 Х/ф "Дом на дюнах". [0+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 29 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 29 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ланцет". [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Безопасность". [16+]
2.10 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.20 "Мужское / Женское". [16+]
4.10 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Другие". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Йокерит" (Хельсинки).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Капкан для киллера". [12+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.15 Х/ф "Капкан для киллера". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 30 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 30 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ланцет". [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Безопасность". [16+]
2.00 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.05 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Другие". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Историческая среда. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на баш. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Жизнь и приключения Николаса Никльби". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.00 Х/ф "Жизнь и приключения Николаса Никльби". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 31 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 31 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ланцет". [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Безопасность". [16+]
2.00 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.05 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Другие". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на баш. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Жизнь и приключения Николаса Никльби". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Откройте, милиция". [12+]**
**4.00 Х/ф "Жизнь и приключения Николаса Никльби". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 1 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 1 февраля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
0.05 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Х/ф Премьера. "Под покровом ночи". [18+]
3.05 "Модный приговор". [6+]
4.00 "Мужское / Женское". [16+]
4.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Д/ф "Человек".
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Петросян-шоу". [16+]
23.20 "Выход в люди". [12+]
0.40 Х/ф "Спасённая любовь". [12+]
4.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Анатолий Карпов. Ход конем". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Анатолий Карпов. Ход конем". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.30 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Позывной "Барс". [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Игры мотыльков". [16+]**
**1.30 Спектакль "Найдите мне папашу". [12+]**
**3.30 Башҡорттар. [6+]**
**4.00 Д/ф "Анатолий Карпов. Ход конем". [12+]**
**4.45 Х/ф "Игры мотыльков". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 2 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Два долгих гудка в тумане". [12+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Спорт". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Что останется после меня". К 80-летию Александра Пороховщикова. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.25 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.15 Д/ф "Ты помнишь, плыли две звезды..." [16+]
17.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.45 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.25 Премьера. "Лев Лещенко. Концерт в день рождения". [12+]
21.00 Время.
21.20 "Лев Лещенко. Концерт в день рождения". [12+]
23.00 Х/ф Премьера. "Дитя во времени". [16+]
0.50 Х/ф "Воды слонам!" [16+]
3.00 "Модный приговор". [6+]
4.00 "Мужское / Женское". [16+]
4.50 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Х/ф "Завтрак в постель". [12+]
16.00 "Пригласите на свадьбу!" [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Один в один. Народный сезон". [12+]
23.15 Х/ф "Калейдоскоп судьбы". [12+]
3.25 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Астерикс: Земля Богов". [0+]**
**9.30 "Большой чемодан. [6+]**
**10.15 Следопыт. [12+]**
**10.45 Преград.net. [6+]**
**11.00 Юные виртуозы Уфы. [0+]**
**11.15 "Книга сказок". [0+]**
**11.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск).**
**19.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.30 Моя вершина. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Над пропастью во ржи". [16+]**
**1.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.00 Спектакль "Салават". [12+]**
**4.30 Х/ф "Над пропастью во ржи". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 3 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Х/ф "Зимний вечер в Гаграх". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Зимний вечер в Гаграх". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Андрей Мягков. "Тишину шагами меря..." [12+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 "Наедине со всеми". [16+]
13.15 "Лев Лещенко. Концерт в день рождения". [12+]
15.35 Х/ф "Верные друзья". [0+]
17.35 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [12+]
19.10 Премьера. "Главная роль". [12+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Дети XXI века. [12+]
23.45 Х/ф "Особо опасен". [18+]
1.45 "Модный приговор". [6+]
2.45 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.00 Смеяться разрешается.
16.00 Х/ф "Моя чужая жизнь". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
1.30 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.05 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 "Йома". [0+]**
**8.30 "Бай". [12+]**
**9.00 Х/ф "Над пропастью во ржи". [16+]**
**10.45 "Перекличка". [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Байтус. [6+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Башкортостан начинается здесь". Юбилейный вечер народного поэта РБ Равиля Бикбаева. [12+]**
**18.30 Д/ф "Тайны нашего кино". [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Әлләсе... [6+]**
**20.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**20.45 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Х/ф "Трудно быть богом". [18+]**
**2.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Ғинуар-февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (22) дүшәмбе | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 16:12 | 17:42 | 19:12 |
| 29 (23) шишәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:14 | 17:44 | 19:14 |
| 30 (24) шаршамбы | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 31 (25) кесе йома | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 16:19 | 17:49 | 19:19 |
| 1 (26) йома | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 2 (27) шәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |
| 3 (28) йәкшәмбе | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: һеҙ ата-әсәләрегеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булһағыҙ, балаларығыҙҙан шундай мөнәсәбәт күрерһегеҙ.*

*(Фалес Милета).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**3-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Битлз. Бүләков. Катод. Взвод. Бабич. Итәғәт. Ғиләжев. Емтек. Ағүҙәк. АМО. Яға. Кирәй. Еңеү. Имза. Соҡор. Витте. Ат. Ватан. Рюрик. Халиков. Секвойя.

**Вертикаль буйынса:** Ғафаров. Вәлитов. Ғәлиев. Бюро. Арахис. Диван. Бүләк. Ябаға. Нуриев. Туғыҙбаева. Танго. Завод. Күсәр. Мари. Елкә. Чук. Йөрәк.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV | V | VI | VII |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | |

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 ғинуар "Әбейүшкә@тушка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

**26 ғинуар "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+

**27 ғинуар "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+

**29 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**30 ғинуар "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

**31 ғинуар "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.00, 12.00 0+

**31 ғинуар "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 ғинуар "Калигула"** (А. Камю), трагедия 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**26 ғинуар "История одной снежинки"** (В. Аношкин), 12.00, 14. 00 0+

**27 ғинуар "Морозко"** (М. Шуринова), 12.00, 14. 00 0+

**1 февраль "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков), 18. 00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 февраль Рөстәм Шаһыбалов** концерты 6+

ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ



**Киләһе иҡтисади көрсөктө ҡасан булырға мөмкин? Һорау пессимистик рухта яңғыраһа ла, иҡтисади көрсөктөң яңы тулҡынын көтөү тулыһынса нигеҙле, сөнки ул даими күренеш. Һуңғы 30 йыл эсендә донъя иҡтисады биш ҙур көрсөктөң шаһиты булды. Улар 1987, 1994, 1998, 2000 һәм 2007-2008 йылдарҙағы ваҡиғалар. Әйтергә кәрәк, һәр яңы көрсөк алдағыһына ҡарағанда көслөрәк һәм масштаблыраҡ булды.**

# КӨРСӨККӘ ӘҘЕР БУЛ!

Бөгөнгө көндә бөтә донъя 150 триллион һум бурысҡа "батҡан". Элек тә эре тип һаналған банктар һуңғы ваҡытта тағы ла ҙурайып, бөтә донъя банк системаһындағы активтар күләмендә уларҙың өлөшө лә күбәйҙе.

Кредит менән бәйле бөтә иҡтисади көрсөктәр ҙә төрлөсә башлана, ләкин бер үк төрлө тамамлана. Ниндәй булһа ла көрсөк айырым бер секторҙа башлана ла, башҡаларына ла күсә. Барыһы ла биржалағы ҡайһы бер активтарҙың котировкаһы ҡапыл ғына төшөүҙән башлана. Инвесторҙар был активтан тиҙ арала ҡотолоу өсөн ашығыс рәүештә уны һата башлай. Ләкин барыһы ла һатҡас, һорау кәмей, һатып алыусы ла бөтә. Ошо урында маржиналь талаптар (килешеүҙәр төҙөү өсөн инвесторҙарға үҙ иҫәптәрендә минималь депозиттың булыуын талап итеү) барлыҡҡа килә. Инвестор, иҫәбендә депозит булһын өсөн үҙҙәренең яҡшы активтарын һата башлай. Был, үҙ сиратында, банк секторында һәм дилерҙар араһында паника барлыҡҡа килтерә. Был ҡурҡыу тойғоһо, торабара бөтә банк системаһына ла күсеп, уларҙың банкротлығына килтерә. Бындай ваҡытта күпселек осраҡта ваҡ инвесторҙар һәм бәләкәй банктар зыян күрә, ә эре банктар, дәүләт ярҙамы алып, эшләүен дауам итә.

Үрҙә әйтелгәндәр бөтә көрсөктәр өсөн дә дөйөм һыҙат булып тора. Ләкин ғауға ҡубыуҙың сәбәптәре төрлөсә булырға мөмкин. Мәҫәлән, улар иҫәбендә биржаны компьютерлаштырыу, интернет аша һатыу итеүсе компанияларҙың килеп тыуған проблемалары, ипотека буйынса түләүҙәрҙе ҡайтармау кеүек сәбәптәр бар. 2008 йылдағы көрсөк Америкалағы ипотека секторында башланды ла банктың бөтә секторҙарына ла таралды. Унан һуң ипотека алыу шарттары ҡатмарлашты, ләкин дөйөм система нығытылманы һәм көрсөк хәүефе икенсе өлкәгә күсте. Ниндәй өлкәгә, тигән һорау тыуа. Билдәле америка иҡтисадсыһы Кармен Рейнхарт билдәләүенсә, беҙгә АҠШ-тың юғары килемле облигациялары менән һаҡ булыу мөһим. "Беҙ ошо облигациялар буйынса түләй алмау тулҡыны алдында торабыҙ һәм киләһе иҡтисади көрсөктөң нәҡ ошо өлкәлә башланыуын күҙалларға мөмкин", ти ул. Был облигацияларҙы шулай уҡ "сүп-сар облигациялар", тип йөрөтәләр. Һуңғы ваҡытта ошондай облигацияларҙың хаҡы 60 процентҡа ҡәҙәр артты, сөнки бөйөк иҡтисади көрсөктән һуң уларҙың процент ставкаһы ныҡ түбән булды. Һөҙөмтәлә бизнестың төрлө өлкәләрендә лә кредит алыу артты. Бөгөнгө көнгә, "сүп-сар облигациялары" буйынса түләнмәгән кредиттың күләме, белгестәр фекеренсә, 3,7 триллион долларға еткән.

Бер кем дә көрсөктөң ҡасан башланасағын теүәл генә әйтә алмай. Мәҫәлән, 1998 һәм 2000 йылдарҙа көрсөккә тиклем, яҡынса, бер йыл алдан тулҡынланыуҙар башланды. Әлеге мәлдә лә ситуацияның ҡасан һәм ни рәүешле үҫеш аласағын аныҡ ҡына күҙаллап булмай, ләкин һәр саҡ уға әҙер булыу бер кемгә лә ҡамасауламай.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



**Сибай ҡалаһының "Ынйыҡай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле өсөн яңы йыл тәүге көндәренән үк уңышлы башланды. Улар йыл башында Мәскәү ҡалаһында үткәрелгән "Планета йәйғоро" мәҙәни-мәғариф проекты сиктәрендәге II Халыҡ-ара хореографик турнирҙа ҡатнашып, бихисап еңеүҙәр яулап ҡайтты.**

# СИБАЙҘАРҘЫҢ...

## мәскәүҙәрҙе аяғүрә баҫтырғаны

Ҡаланың күҙ өҫтөндәге ҡаш булған "Ынйыҡай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле ун йылдан ашыу ижади ғүмерендә ҡырҡҡа яҡын бейеү әҙерләп, тамашаға сығарған. Ансамблдең етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Эльвира Ғөбәйҙуллина бейеүҙәрҙе башлыса үҙе һала, хореографтар ҙа саҡыра. Емешле хеҙмәт, тамашасы һөйөүен яулау өсөн көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй. "Был беҙҙең Мәскәү ҡалаһына беренсе тапҡыр ғына барыуыбыҙ түгел. "Мәскәү Рәсәйҙең киләсәге" проектында "Рәсәйҙең иң яҡшы коллективы" тигән исем алып ҡайтҡайныҡ. Ошо сәбәптән беҙҙе быйылғы турнирға махсус рәүештә саҡырҙылар, - тип һөйләй ансамблдең етәксеһе. - Бейеүҙәрҙе бик уйлап, һайлап ғына алдыҡ. Улар беҙҙең милли асылды ла асырға, фольклорыбыҙҙы ла күрһәтергә, башҡаларҙан айырып торорға ла тейеш ине. Һәм яңылышманыҡ! Бейеүҙәребеҙҙе тамашасы аяғүрә баҫып ҡараны, ҡул сабыуҙар дәррәү булды. Баһалама ағзалары, ойоштороусылар теленән "Башҡортостан", "Сибай" тигән һүҙҙәр йыш ишетелде, маҡтап, хуплап, һоҡланып бөтә алманылар..."

Эльвира Вәкил ҡыҙы әйтеүенсә, байрам көндәрендә юл хаҡтары ҡиммәтләнеп китһә лә, ансамблдә шөғөлләнеүсе балаларҙың ата-әсәләре кире сигенмәгән. Улар бар сығымдарҙы үҙҙәре ҡаплап, бейеүсе балаларына баш ҡаланы гөрләтеп ҡайтыу мөмкинлеген биргән. Ата-әсәләрҙең ошо батырлығы өсөн ҙур рәхмәтле етәкселәре. Ә "Ынйыҡай"ҙар атай-әсәйҙәренең быңдай фиҙаҡәрлегенә лайыҡлы яуап биргән: бәйгелә ҡатнашыусы 125 бейеү ансамбле араһында ла, оло сәхнә алдында ла ҡаушап ҡалмаған. Башҡорт рухы менән башҡаларҙы шаҡ ҡатырған. Уларҙың Урал арьяғы фольклорына нигеҙләнгән халыҡсан бейеүҙәре мәскәүҙәрҙе һәм килгән ҡунаҡтарҙы ысынлап та әсир итә. "Кәкүк сәйе" менән "Тирмә янында" бейеүе - беренсе, "Тимербайҙың улдары", "Таусылар", "Тыпырҙаҡ" бейеүҙәре өсөнсө урындарҙы яулай. Быларға өҫтәп, Халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге ике диплом һәм киләһе бәйгеләрҙә бушлай ҡатнашыуға хоҡуҡ биргән сертификат та бүләк иткәндәр "ынйыҡай"ҙарға.

Әйткәндәй, был "Ынйыҡай"ҙарҙың беренсе генә еңеүҙәре лә түгел, улар йыл да ике-өс урындан ошондай еңеүҙәр менән ҡайта. Былтыр апрель айында Ҡаҙан ҡалаһында гран-при, декабрҙә Магнитогорскиҙа бер түгел, дүрт беренсе урын яулау бәхетенә өлгәшкән балалар улар.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# БЫЛ ДОНЪЯНЫҢ...

## фәйрүзәһе лә, һәтемтәйе лә бар

♦ Бала - бауыр ите тиһәк тә, ул әллә нисә ҡат утлы күлдәк кейҙереүсе зат.

♦ Барҙың малын, юҡтың көнөн һорау - ил өҫтөнә төшкән ут-ялҡын ул.

♦ Тәҙрә төбөндәге гөлгә ҡарап ҡына бөтә донъя гөл-сәскәнән тора, тип уйламағыҙ: билсәне лә, дегәнәге лә, шайтан таяғы ла, әреме менән кесерткәне лә туп-тулы.

♦ Ике тамсы бер-береһенә оҡшаһа ла, тәмдәре менән айырыла; кешеләр ҙә шулай.

♦ Тирәк ағас бейек ағас, ҡара ҡарғышлы ағас: быса күрмә ҙурайғас.

♦ Һөртә белмәһәң, хушбуйҙан да тиҙәк еҫе, һөйләй белмәһәң, йылы һүҙҙән дә боҙ бөркөлә.

♦ Йүнһеҙҙең бүләге сир сәсер - ишек төбөнән үтмәһен; яҡшының бүләге нур һибер - бейек түрҙән төшмәһен.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Ишембай районы** Ураҙбай ауылынан Фәниә Йәмилева, **Архангел районы** Ҡыҙғы ауылынан Әлфирә Ноғоманова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Иҫке Бәпес ауылынан Ғәлиә Абдуллина, **Баймаҡ районы** Әтҡол ауылынан Әнисә Әбелғазина, Янғаҙы ауылынан Гөлнур Тимербулатова, **Әбйәлил районы** Салауат ауылынан Рауза Сәғитова, **Өфө ҡалаһынан** Хәлил Мусин, **Өфө районы** Шамонин ауылынан Рәйлә Ҡалҡаманова, Флүрә Супанова, **Саҡмағош районы** Ташҡалмаш ауылынан Лилиә Ғиззәтуллина, **Бөрйән районы** Ғәлиәкбәр ауылынан Әминә Байғазинаны һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ғүмерегеҙ шатлыҡта үтһен, сәләмәтлек, бәхет, уңыштар юлдаш булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БИРӘСӘГЕҢ БИРМӘЙ...

## гүргә инеп булмай

Ахырызаман килһә, атаһы тороп - улы һөйләр, инәһе тороп - ҡыҙы һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп кешеләр яҙмышы менән килешер ине лә, ләкин яҙмыштың да тауыш биреү хоҡуғы бар бит.

**(Станислав Лец).**

Ҡыҙ-ҡатындар, әлбиттә, аҡыллыраҡ. Һеҙҙең берәй ваҡыт ир-егеттең матур аяҡтарынан башын юғалтҡан гүзәл затты күргәнегеҙ булдымы?!

**(Фаина Раневская).**

Ирмен тигән ир үҙен ғәйепләр, ваҡсыл ирҙәр башҡаларҙан ғәйеп эҙләр.

**(Конфуций).**

Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: һеҙ ата-әсәләрегеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булһағыҙ, балаларығыҙҙан шундай мөнәсәбәт күрерһегеҙ.

**(Фалес Милета).**

Һуғышта ни яҡшы - дошманыңды еңеүме, әллә еңелеү тойғоһон кисереүме - быны беҙ белмәйбеҙ.

**(Вьяса).**

Донъяла яҡшы кешеләр етешмәй икән, уларҙы күбәйтеү сараһын күрергә кәрәк.

**(Берес Скиннер).**

Изге булыу өсөн фәрештә булыу мотлаҡ түгел.

**(Альберт Швейцер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер байҙың хеҙмәтселәре араһында Лоҡман тигән аҡыллы кеше була. Әммә ул башҡаларға ҡарағанда көсһөҙөрәк, тышҡы ҡиәфәте менән дә күрмәлекһеҙерәк булғас, хеҙмәтселәр уны бик һөйһөнөп еткермәйҙәр. Бер саҡ хужалары бар хеҙмәтселәрен дә баҡсаға емеш йыйырға ебәрә. Хеҙмәтселәре емеште йыйып алып, ашап бөтөрә лә, хужаға: "Емештәрҙе Лоҡман ашап бөтөрҙө", - тип ошаҡлай. Хужа Лоҡманды әрләй башлай. Шул саҡ Лоҡман былай ти: "Хужам, беҙҙең барыбыҙға ла йылы һыу эсер ҙә, беҙҙе урамға алып сығып, тегеләй-былай йүгерергә мәжбүр ит. Шунда беленер емештәрҙе кем ашағаны". Хужа шулай итә лә. Хеҙмәтселәренең барыһына ла йылы һыу эсерә һәм үҙе атҡа менеп алып, уларҙы тегеләй-былай ҡыуып йүгертә башлай. Күп тә үтмәй, хеҙмәтселәрҙең барыһы ла ашаған емешен ҡоҫа башлай. Лоҡман да ҡоҫа, әммә уның ашҡаҙанынан һыуҙан башҡа бер ни ҙә сыҡмай.**

**Әгәр ҙә Лоҡмандың аҡылы хеҙмәтселәрҙең алдағын асыҡлауға булышлыҡ итһә, үҙ ҡолдарын яратҡан Аллаһының фәһеме ниҙә булыр? Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы алдына барып баҫҡас, һеҙ бер ниндәй ҡырын эшегеҙҙе лә, серегеҙҙе лә йәшерә алмаясаҡһығыҙ..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4077
Заказ - 55